ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 май (һабанай) 2020

№21 (907)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм йәмәғәт! 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу дауам итә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Бергә булайыҡ!***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Ҡайтам! Ҡайтам!



Мин йортома ҡайтам!" 6

"Селтәр" саң ҡаға:



милли кейемебеҙҙе төп нөсхәлә тергеҙәйек! 8-9

Кәңәш туйы



10-11

Заманды бизмәнгә һалып...



12

ТВ-программа 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Көтөп алынған ураҙалар ҙа тамам. Быйыл ул ниҙәр күрһәтте, иманға ҡайтыусылар, ураҙа тотоусылар күбәйҙеме? Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә ыңғайға көйләнеш, шәфҡәтлелек күренештәре өҫтөнлөк иттеме?

***Рәмзиә ҒАЙСИНА, Баймаҡ районы Низәмәт ауылы:*** Үҙемдең күҙәтеүҙәрем буйынса, быйыл ураҙа тотоусылар һаны бермә-бер артты, тип уйлайым. Быны мин ауылдаштарым, туғандарым, дуҫтарым һәм таныштарыма ҡарап әйтәм. Быны сәбәптәрен төрлөсә аңлатып булалыр. Кемдер быны дин, иман нигеҙҙәренең тормошобоҙға нығыраҡ үтеп инә барыуы тип аңлатһа, икенселәр кешелеккә янаған хәүеф, ҡурҡыныс алдында Аллаһҡа һыйыныу сараһы тип уйлай. Ураҙа тотоусылар араһында үҙҙәренең сәләмәтлек торошон, түҙемлек-сабырлыҡтарын һынап ҡарарға теләүселәр ҙә барҙыр. Хатта ки ураҙаны үҙҙәрен күрһәтеү өсөн файҙаланыусылар ҙа бар, тиҙәр. Бәхеткә, мин ундайҙарҙы үҙ юлымда осратҡаным юҡ, шулай ҙа уларҙы бик ҡаты хөкөм итергә лә ярамай. Бәлки, ипле генә аңлатырға тырышырға кәрәктер, тейем, сөнки шундай юл менән башлап ебәрһә лә, аҙаҡҡа табан ураҙаның ысын ҡиммәтенә төшөнөп, хаҡ юлға баҫыр һәм иманға таҙа күңел менән килер. Һәр хәлдә, кешенең нимәнәндер ҡурҡып ураҙа тота башлауына ҡарағанда, уны Аллаһҡа рәхмәтле булып ниәтләү хәйерлерәктер.

Кеше-ара мөнәсәбәттәргә килгәндә, ауылдарҙа халыҡ былай ҙа электән үк бер-береһенә шәфҡәтле һәм ярҙамсыл булыуы менән айырылып тора, минеңсә. Уларҙың бер-береһен яҡшы белеүе, икенсенән, тәбиғәткә, ер-һыуыбыҙға яҡын булыуы күңел тороштарының да тәбиғирәк булыуына сәбәпсе. Ярҙамсыллыҡ, мәрхәмәтлелек күренештәре быйыл ҡалаларҙа ла күҙгә бәрелде. Телевидение тапшырыуҙарынан, интернет хәбәрҙәренән күренеүенсә, ирекмәнлек хәрәкәте әүҙемлек алды: өлкән йәштәге, сирле йә хәрәкәте сикләнгән инвалидтарға күпме изгелек эшләне улар!

Унан һуң, коронавирус менән сирләп, һауыҡҡандар араһында донор булыусыларҙың да изгелек ғәмәле һоҡландырҙы: уларҙың ҡанынан айырып алынған плазма ауыр хәлдәге сирлеләрҙе ҡотҡарасаҡ. Табиптар хаҡында айырым әйтеп китеү кәрәк. Элегерәк халыҡтың күпселеге беҙҙең һаулыҡ һаҡлау системаһы эшенә, сифаты һәм кимәленә ҡарата бик күп дәғүәләр белдерә килде, шуға ҡарамаҫтан, ауыр һынау алдында барыбер табиптарыбыҙ һынатмаҫҡа тырыша. Дөрөҫ, ошондай ваҡытта уларҙың төрлөһө осрап тора, ләкин ил Президенты В. Путин әйтмешләй, сир менән көрәштең алғы һыҙығында һөнәри анттарына тоғро ҡалып, фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтеүселәр ҙә күп. Дөрөҫөн әйткәндә, улар һөнәри бурыстарына ғына түгел, ә кешелек асылдарына ла тоғролоҡтарын раҫланы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# МАТБУҒАТ ЯРҘАМҒА МОХТАЖ

**Был аҙналағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тураһында телгә алып, баҫма матбуғатҡа ярҙам кәрәклегенә баҫым яһаны.**

- Беҙҙең муниципаль матбуғат баҫмалары - "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости", "Киске Өфө", "Уфимская неделя" гәзиттәре һәм "Уфа" журналы даими рәүештә республика һәм ҡала тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы яҡтыртып бара. Хөрмәтле коллегалар, ошо еңел булмаған ваҡытта гәзит-журналдарыбыҙға ярҙам ҡулы һуҙырға тәҡдим итәм. Шулай уҡ ветерандарға ошо баҫмаларға подписка бүләк итеү мөмкинлеген дә ҡарауығыҙҙы һорайым, - тине ул.

**(Мәғлүмәттең дауамын 5-се биттән уҡығыҙ).**



Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡытыусылары - гәзиттең тоғро дуҫтары

12+

✓ *Шул ҡарар арҡаһында ябай халыҡ баҙарға барып, малын һата алмай хәҙер. Алыпһатарҙарҙы байыта. Сөнки малын тейәп, шул махсус цехҡа алып барыу өсөн арбалы транспорт кәрәк, яллаһаң - аҡса...*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ШӨКӨР ИТӘБЕҘ...

**"Киске Өфө" гәзитен бик күптән алдырып уҡыйбыҙ. Гәзиттең эстәлеге, унда яҙылған, күтәрелгән проблемалар күңелемә бик яҡын. Бер битен дә йыртһырмай йыйып барам. Гәзитте уҡырға тип туғандар алып ҡайтып китеп ҡәҙерһеҙләнә, уҡылған биттәренең туҙып йөрөгәнен күрһәм, йәнем әсей хатта...**

Минең дә гәзит аша әйтер һүҙҙәрем күп ул, тик бушап, ҡулға ҡәләм алып, яҙып ебәреп кенә булмай. Көнитмешебеҙҙә әленән-әле реформа, үҙгәрештәр булып тора бит. Шундай саҡтарҙа геү итеп күтәрелә лә халыҡ тауышы, йәйләп күнә, проблема йотола. Күнеп, түҙеп йәшәйбеҙ бит инде. Мәҫәлән, сүп-сар өсөн яңы индерелгән түләүҙәр байтаҡ ваҡыт ауыл халҡының ризаһыҙлығын тыуҙырҙы. Һуңынан күнделәр. Ләкин күнеп булмаған күренештәр ҙә бар. Бына, мәҫәлән, ауыл халҡы шәхси хужалығында аҫралған малын баҙарҙа һатыу өсөн махсус цехтарҙа ғына һуйҙырырға тейеш, тиғән нәмә уйлап сығарҙылар бер мәл. Йәнәһе, ауырыу таралмай. Шул ҡарар арҡаһында ябай халыҡ баҙарға барып, малын һата алмай хәҙер. Алыпһатарҙарҙы байыта. Сөнки малын тейәп, шул махсус цехҡа алып барыу өсөн арбалы транспорт кәрәк, яллаһаң - аҡса, цехта һыйыр малын һуйҙырыу өсөн - 1050, йылҡы малы өсөн 2500 һум хаҡ алалар, бынан тыш, мал табибының тәрлә рәсми ҡағыҙҙары, башҡа белешмә ҡағыҙҙары өсөн дә аҡса кәрәк. Баҙарҙың үҙенә инһәң, һатыу-һатмауға ҡарап, һәр килограмм итеңә 10-15 һум күләмендә һалым түләп сығаһың. Мал һуйыу цехтары аша һуйылды, тиғән ярлыҡ һуғылған итеңә халыҡ сәйерһенеп ҡарай әле ул, "Хәләл итеп салалармы һуң унда?" тип тә һораусылар бар...

Беҙ хәлдән килгәнсе мал тотоп, шуны көҙөн баҙар-йәрминкә аша һатып, аҡсаһына өс баланы уҡытабыҙ. Иремдә лә, үҙемдә лә ауыл ерендә эш юҡ. Икебеҙ ҙә эшләмәгәс, бейылдан балаларға пособие ла, өлкәнебеҙгә социаль стипендия ла юллай алманыҡ. Уртансы балабыҙ гимназияла элек ташламалы хаҡҡа туҡлана ине, собес аша "Аҙ тәьмин ителгән" тигән белешмә алып була ине. Хәҙер ул белешмәне алыр өсөн әллә күпме кәртә ҡуйҙылар. Ата-әсәнең икеһе лә эшләүе шарт икәнен МФЦ-ға өсөнсө тапҡыр барғас ҡына саҡ аңланым. Эшһеҙҙәр сиратына ла ҡуймайҙар, исмаһам, ҡуйһалар, бер йыл тоталар ҙа, тағы ярты йыл үтмәйенсә кире теркәмәйҙәр. Шулай итеп, ауыл кешеһе хәҙер ул ниндәйҙер белешмә, пособие юллап йөрөмәй, сөнки юл йөрөп туҙҙырған аҡсаһын да ҡаплата алмай.

Бына әле бейәбеҙҙе һуйырға тейәп алып китергә торабыҙ. Өфөнән вузда уҡыған оло улым менән гимназияла уҡыған ҡыҙым ҡайтты, уларҙы Темәс баҙарына һөт, ҡорот һатырға ебәрәсәкмен. Ә үҙемә ирем менән Баймаҡҡа барып, бейәне һуйҙырып, эсәген йыуып алып ҡайтырға кәрәк. Ярай әле, йылҡы малының эсәген кире алып була. Һыйырҙың тиреһе, башы, тояғы, үпкә-бауырын һуйған ерҙә бушлай биреп китәһең. Кире алырға ярамай, алам тиһәң, һуйҙырған өсөн 1050 һум урынына 2000 итеп түләргә кәрәк. Башын өтөп, телен 300 һум менән, башын - 400 һумға, тояҡтарын өтөп, 100-130 һумға, бауыр-йөрәген 200-250 һумға, эсәктәрен дә ҡырып йыуып һатһаң, тиреһен - үгеҙ булһа, килограмын 23 һум менән тапшырһаң, апаруҡ аҡса сыға торғайны. Кәмендә 5-6 мең. Әммә хәҙер был тауар үҙеңдеке түгел, һуйыу цехында ҡалдырыла...

Зарлана, тимәгеҙ. Беҙ тинде тингә ҡушып, машинаһын да алдыҡ, ипотекаға бер бүлмәле булһа ла фатир ҙа хәстәрләнек, тик һаулыҡ ҡына етһен инде ошо тиклем кәртәләрҙе, проблемаларҙы еңеп сығырға. Ике олатайым да - Ғүмәр Әҙеһәм улы Ирназаров һәм Хәсән Мөжәүир улы Зөлҡәрнәев гел генә: "Беҙ күргәнде күрмәгеҙ, һуғыш сығып ҡуймаһын", - тип йәшәне. Беҙ ҙә шул илде һуғыш, гәрәсәт ялмап ҡуймаһын, тип, булғанына шөкөр итеп йәшәйбеҙ.

**Альбина БАЙРАҠАЕВА.**
**Баймаҡ районы Үргә Таһир ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Көтөп алынған ураҙалар ҙа тамам. Быйыл ул ниҙәр күрһәтте, иманға ҡайтыусылар, ураҙа тотоусылар күбәйҙеме? Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙә ыңғайға көйләнеш, шәфҡәтлелек күренештәре өҫтөнлөк иттеме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Хәйҙәр НИҒМӘТЙӘНОВ, эшсе, Өфө ҡалаһы:*** Ураҙаның быйыл ил өсөн генә түгел, донъя кимәлендәге афәт осорона тап килеүен күптәр тикмәгә юраманы, уны Юғары көс тарафынан ергә ебәрелгән ишара тип ҡабул итте. Аҡыллыға - ишара, тиҙәр бит, мин үҙем былай әллә ни хөрәфәткә ышанып бөтмәһәм дә, бында, ысынлап та, ниндәйҙер ғиллә булыуы бик мөмкин, тип тә уйлап ҡуям. Халыҡтың быйыл ураҙаға әүҙем тотоноуы ла ошо фаразды нигеҙләп тора кеүек.

Кешегә эйәреп, дәртләнеп китеп үҙем дә тота башлағайным, ауыр эштә - төҙөлөштә эшләгәнлектән, өс-дүрт көндән арттырып булманы: хәл бөтә, һыуһата, сөнки тирләп-бешеп кирбес, бетон, цемент менән эш итергә тура килә. Кешеләр өйҙә ултырғанда ла беҙ эшләнек. Еңелерәк эштә йөрөгән 21 йәшлек бер егет ураҙаһын аҙағынаса еткерә алды, афарин тимен уға. Тыуған ауылымдағы ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ туғандарымдың да күбеһе ураҙала булдылар. Көнөнә биш фарыз намаҙын уҡып, шартына килтереп бөтөрә алмаһалар ҙа дингә тартылыусылар араһында ҡатын-ҡыҙҙың күберәк булыуы күренә, ә ирҙәрҙең быға әллә ни иҫе китеп бармай һымаҡ. Аяттарға, йома намаҙҙарына түбәтәй кейеп килеп ултыралар ҙа, сыҡҡас, онотalар. Исмаһам, доғалар ятлап алып эстән генә уҡып йөрөһәләр, күңелдәре йомшарыр ине. Юғиһә, ауылдарҙа әскелек тә, эшһеҙлек тә, фәҡирлек тә бар. Фәҡирҙәр тип, тап ана шул эсеп йөрөгәндәрҙе әйтәм инде. Элекке кеүек, бер-береңә бушлай ярҙамға килеп етеү, өмәгә әйтеү йолалары ла бөттә, онотолдо. Бәләкәй генә эш өсөн дә хаҡ һорарға оялмайҙар, ярҙамдан булыр, сауабын насип итһен, тимәйҙәр.

Белмәйем, ауылдарыбыҙ бер саҡ элекке кеүек гөрләп торормо икән? Әле быны пандемия башланғас, Себер тарафтарында, Яҡутстанда ауыр эштә йөрөгән ике меңләп ир-егетебеҙ ҡайтты. Бындай эштә эшләгәс, улар үңған, булдыҡлы егеттәр, тимәк! Тик беҙҙең мөхиткә ҡайтып, эсә генә башламаһын инде улар. Ауылдарыбыҙҙа ана шул ситтән ҡайтҡан эш көстәре малсылыҡ, игенселек, ҡошсолоҡ, йәшелсәселек буйынса фермер хужалыҡтары ойоштороп ебәрә алыр ине бит. Тик бының өсөн дәүләттән дә ярҙам кәрәк. Юғиһә, ауыл халҡы көс түгеп үҫтергән уңышын, аҫраған малын ҡайҙа итергә белмәй аптырана. Кеше-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыуға булышлыҡ итеүен таныған хәлдә лә, бөгөн ауылдың йөҙөн тамырынан үҙгәртеү өсөн ураҙа тотоу, дингә һығыныу ғына етмәй шул...

***Мәүлиҙә ДӘҮЛӘТБАЕВА, хеҙмәт ветераны, инвалид:*** Эйе, быйылғы ураҙа башҡа йылдарҙағынан айырылып торҙо, сөнки күп илдәрҙе ялмап алған коронавирус сире тап ошо ваҡытҡа тура килде. Шул арҡала кешеләр өйҙәренә бикләнде, аралашыу мөхите ҡикләнде. Ярай ҙа ҡайны берәүҙәр, хәҙер хатта өлкән йәштәгеләр ҙә, интернет аша виртуаль аралашыуға күсте. Шунлыҡтан, йома намаҙҙарын да мәсеткә йыйылышып түгел, ә онлайн режимда өйҙәрендә башҡарырға тура килә. Ураҙа тотоусыларҙың да арта барыуын шул уҡ интернеттан белеп ҡыуандым. Дөрөҫ, ураҙағыларҙың барыһы ла интернетта ултырмаһа ла, иртәнсәк сәхәргә тороуҙарынан башлап, ураҙаны нисек тотоуҙары, ифтарға нимәләр әҙерләп ауыҙ асыуҙарына тиклем тәьсораттары менән бүлешеүсе йорт хужабикәләре, пенсионерҙарҙың байтаҡ ҡына икәнен белдем.

Эйе, өйҙәребеҙгә бикләнһәк тә, күңелдәребеҙ бикләнмәне. Теләһә ҡайны ваҡытта күңелде өйкәп торған мәсьәлә буйынса һөйләшеп, эс серҙәрең менән бүлешер кешеләр барлығы, берҙәмлек, яҡынлыҡ тойғоһо күңел төшөнкөлөгөнән аралай, яҡшыға ышаныс ты нығыта төшкәндәй. Ләкин күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеүгә етәме инде!

Әңгәмәсеңдең кем икәнен белмәйенсә сиселеп китеүҙең дә ярамағанлығын аңланым. Дөрөҫөрәге, "аңлаттылар". Даими рәүештә дарыуҙарға бәйләлектән, ураҙа тота алмауым хаҡында "Серҙәштәр" гә яҙғас, үҙен уҡытыусы тип таныштырыусы бер ҡатын менән бәйләнешкә инеп, 45 йыл стажлы тәжрибәле табипты белеүе, тик уның ғына ауырыу балаһын аяҡҡа баҫтырыуы хаҡында яҙып, миңә лә шул шәфҡәт туташына мөрәжәғәт итергә кәңәш бирҙе һәм, ул һинең гормон препараттарыңды, бөтөн башҡа дарыуҙарыңды ташлатасаҡ, тип тә өҫтәне. Кемдең инде һауыҡҡыһы, башҡалар кеүек тулы тормошта йәшәгеһе килмәһен! Күңелемдә мең өмөт, мең хыял тоҡанды. Был "абруйлы, тәжрибәле табипҡа" ҡурҡа-ҡурҡа ғына шылтыратҡас, мин уның, ысынлап та, бик "тәжрибәле" булыуын аңланым һәм уға эс серемде сисеүемә бик үкендем. Бәлки, яҡшы табип булғандыр ҙа ҡасандыр, ләкин әлеге ваҡытта ниндәйҙер ишетмәгән-белмәгән Ҡаҙағстан бәлзәмдәре менән сауҙа итеүсе "бизнес-вумен" булып сыҡты ул. Сир буйынса кәңәш биреү түгел, диагнозды ла хатта тыңлап торманы, ә талапсан тауыш менән минең кеҫәләрҙе "ҡапшай" башланы: күпме пенсия алаһың, ирең эшләйме, балаларың ярҙам итәме һ.б. Бер ҙә изге Рамаҙан айы тип тормайынса, бына шундай юл менән аҡса ҡайырыусылар ҙа бар икән арабыҙҙа - һаҡ булығыҙ! "Бәйләнештә" үҙ-ара фекер алышыусы, серләшеүсе кешеләрҙән үҙҙәренә кәрәкле клиенттарҙы бына шул рәүешле ҡармаҡлап ултырыусы үҙ мосолмандарың барҙыр тип кем уйлаһын. Хәйер, сирле кеше хәле менән шулай үҙ файҙаһын ҡайғыртыусы әҙәмдәрҙе мосолман тип әйтергә лә ярамай, әлбиттә. Бының менән мин һеҙҙең һорауҙың һуңғы өлөшөнә шулай тип яуап бирер инем: яҡшылыҡ менән яманлыҡ һәр замандa ла йәнәшә килә торған төшөнсәләр. Кешеләр аңында ыңғайға көйләнеш өҫтөнлөк алһын өсөн бай һәм ныҡлы нигеҙле, ябай кешегә йөҙ менән боролған дәүләттә йәшәргә кәрәктер тип уйлайым. Ә инде был мөмкин булмаған мәсьәлә икән, һәр кеше үҙ аңында яҡшыға көйләнеш булдырып йәшәргә тейеш булып сыға, шуныһы нисек йәшәмәк кәрәк? Ә был көйләнеште әҙәм балаһы фәҡәт дин юлында ғына таба алалыр, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓21 майға оператив мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 2424 осрағы асыҡланған. Бер тәүлектә улар 89-ға артҡан. Әлеге ваҡытта республикала сирлеләр - 1643 кеше, һауыҡҡандар - 792, коронавирустан үлеүҙең яңы осраҡтары тураһында хәбәр ителмәй (ошо осорҙа 18 кеше).

✓Һуңғы тәүлектә Рәсәйҙең 84 төбәгендә 8849 яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыу осрағы теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта 7289 кеше һауығып сыҡҡан. Шулай уҡ тәүлек эсендә 127 үлем осрағы теркәлгән. Ошо осорҙа Рәсәйҙә 3099 кеше коронавирустан вафат булған. Дөйөм алғанда, 21 майға Рәсәйҙә 317 мең 554 кеше - медицина ҡулатеүе аҫтында.

✓Башҡортостандың төрлө райондарында бер үк ваҡытта 24 балалар баҡсаһы төҙөлә. Республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итеүенсә, барлыҡ мәктәпкәсә белем биреү объекттары 2020 йылдың аҙағына сафҡа индерелә. "Дәүләкәндә бер юлы ясле төркөмдәре менән 240 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы төҙөйбеҙ. Уларҙа заманса физкультура һәм спорт залдары, логопед, психолог кабинеттары, кер йыуыу бүлмәһе, заманса ҡорамалдар менән аш-һыу әҙерләү блогы була", - тип яҙҙы республика етәксеһе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров субсидия бүленгән төбәк авиаташыуҙары исемлеген раҫланы. Исемлеккә түбәндәге йүнәлештәр буйынса маршруттар инде: Өфө - Һамар, Өфө - Киров, Өфө - Ырымбур, Өфө - Түбәнге Новгород, Өфө - Ижевск, Өфө - Чебоксар, Өфө - Волгоград, Өфө - Минеральные воды, Өфө - Пермь, Өфө - Краснодар, Өфө - Дондағы Ростов.

✓Башҡортостан хөкүмәте төҙөлөш тармағына ярҙам сараларының береһе булараҡ 2020 йылдың икенсе ярты йылында төҙөлгән ипотека килешеүҙәре буйынса процент ставкаһын субсидиялау юлы менән ихтыяжды әүҙемләштерергә тәҡдим итте. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә беренсе вице-премьер Андрей Назаров белдерҙе. Шулай уҡ иҡтисадтың реаль секторына ярҙам күрһәтеү маҡсатында предприятиеларға финанс яҡтан ярҙам итеү өсөн махсус фонд булдырыу күҙ уңында тотола.

✓Башҡортостанда 19 майға медицина учреждениеларына 2946 кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт итҡән, улар араһында 1290-ы - балалар. Былтыр ошо осорҙа 3172 кеше, шул иҫәптән 1160 бала талпан тешләүгә зарланған.

✓ *Себерҙән, Яҡутстандан иҫән-имен ҡайтҡан ир-егеттәребеҙ ҙә бынан ары сит яҡтарҙа йөрөмәҫтәр, ғаиләләре менән бергә булып, балаларын тәрбиәләү, ауылдарҙы тергеҙеү, тыуған ерҙе йәмләүгә ең һыҙғанып тотонорҙар.*



*УЙЛЫҒА - УЙ*

# МИЛЛИ АСЫЛЫБЫҘ ҺАҠЛАЯСАҠ БЕҘҘЕ

**"Киске Өфө" гәзитенән уҡыусыларына "Коронавирус ваҡиғаһынан һуң кешеләр яҡшы яҡҡа үҙгәрерме?" тигән һорау бирелгәйне. Мин: "Беҙгә үҙгәрергә кәрәкмәй, тик үҙ асылыбыҙға, тамырҙарыбыҙға ҡайтырға кәрәк", - тип яуап бирәм. Бөгөнгө афәт асылыбыҙға ҡайтыр өсөн бер һынауҙыр. Үҙ асылыбыҙ - ул ата-бабаларыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килгән тәрбиә мәктәбе, тәрбиә ҡанундары, ейгән ризығыбыҙ, туған моң, туған тел. Ҡаныбыҙға һалынған аңыбыҙға ҡайтыу.**

Эйе, тыныс ҡына йәшәп ятҡанда донъябыҙға көтөлмәгән бәлә килде. Көтөлмәгән микән? Тормоштоң бөтмәҫ-төкәнмәҫ ығы-зығыһына алданып, мәңгелек ҡиммәттәр тураһында онотторҡ, ата-әсә, тәбиғәт, милләт алдындағы бурыстарыбыҙҙы һанламай башланыҡ. Шуға ла был коронавирус тигән афәт иң изге төшөнсәгә - ғаилә нигеҙҙәренә һөжүм яһаны. Беҙҙе иң яҡындарыбыҙ менән бергә бикләне ул һәм беҙ ғаилә мөнәсәбәттәренә һынау тотторҡ. Миҙалдың ике яғы булған кеүек, татыу, берҙәм ғаиләләр үҙ ояларында булған матур мөнәсәбәттәренә тағы бер ҡат ҡыуанып, был донъяла иң мөһиме, иң ғәзизе ғаилә икәненә тағы бер ҡат инанып, туғанлыҡ ептәрен нығыраҡ төйнәп, тыныс ҡына, яҡты өмөт менән йәшәй бирә. Үҙ ҡәлғәһендә матур утрау тыуҙырып, йәшәү, уҡыу өсөн шарттар булдырып, дөрөҫ тәрбиә биреүҙе дауам итә. Шомло, билдәһеҙ мәлдә ғаиләлә генә бар ғәрәсәттән ышыҡ табырға була икәнен күрһәтеп, балаларының күңел донъяһын бөтәйтеп, улар ҡорасаҡ ғаиләләрҙе лә хәстәрләп, шытымлы орлоҡ һала, быуындар бәйләнешен йүнләй. Шул уҡ ваҡытта ғаилә карабына "һыу ингән" миҫалдар ҙа бар...

Үҙ асылыбыҙға ҡайтыу, тигәндән. Бер ваҡиға тураһында яҙып үтәйем әле. Үткән ҡыш Кумертау ҡалаһында дауаханала ятырға тура килде. Унда ни, ваҡыт күп, ишеткән-күргәнеңде барлап, йә фәһем, йә ғибрәт ал. Палатабыҙҙа 3 урыҫ, 1 украин ҡатыны һәм мин фәҡирегеҙ. Тәүге көндәрҙә тороп йөрөргә бик форсат булмағас, күршеләремдең аһ-зарын тыңлайым. Арабыҙҙа иң йәше булған украин ҡатыны иғтибар үҙәгендә, палаталар буйлап йөрөп килә, яңылыҡтар һөйләй, йә көлдөрә, йә тормош юлын бәйән итә. Украинала тыуған, шунда үҫкән. Әрме хеҙмәтен үтәгән башҡорт егетенә кейәүгә сыҡҡан, шунда төпләнгәндәр. Иреенең әсәһе ауырып китеү сәбәпле, Башҡортостанға күсеп килергә мәжбүр булғандар. Ҡыҙы, кейәүе, улы, килене лә бергә күсенгән. Палаталағы оло апайҙар уның матур, етеш тормошо тураһында һөйләгәндәрен кинәнеп тыңлай. Ә инде тормош иптәше килгәс, аһ иттеләр. Шулай булмай ни! Үҙе сибәр, буй-һыны быҙна тигән, ҡатынына иғтибарлы. Бигерәк тә уның саф хохолдарса оһолдап һөйләшеүе һуштарын алды. "Эйе, ул украинса минән былайыраҡ һөйләшә, һатып ебәрер. Беҙ өйҙә украинса ғына һөйләшәбеҙ, кейәүҙәр, килендәр килһә, рус теленә күсәбеҙ", - тип маҡтанған ҡатын бер көндө: "Ә беләһегеҙме, беҙҙең ейән башҡортса һөйләшә, ышанаһығыҙмы, юҡмы, беҙҙә башкиренек бар",- тип хәбәр һалды. Минең баш осонда ятҡан, көн-төн ыңғырашҡан мәрйә әбей "Как так?" тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды хатта, һикереп тороп ултырҙы (шул арала миңә лә күҙ һалып өлгөрҙө). "Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнергә тейештәр, тигәс, "Беҙ бит башҡортса белмәйбеҙ, дәрескә йөрөмәҫһең", тип һөйләнһәм, ейәнем: "Мин башҡорт, мин башҡорт телен уҡыйым", - тип һалдырмаһынмы. Өгөтләп тә, өйгә эшенде нисек эшләйһең, тип тә ҡараным - юҡ. Урамдағы башҡорт балалары менән башҡортса һөйләшә, башҡорт теленән дәресте үҙаллы әҙерләй. Бына шулай, бер башкиренек үҫә беҙҙә. Әле күреһегеҙ үҙен, бөгөн килә әсәйҙәре менән минең янға", - тине ҡатын. Ысынлап та килде ул малай, "Һаумыһығыҙ, здравствуйте!" тип килеп инде. Бына бит ул ҡан тиртеүе! Ҡанға һалынған аң! Күҙҙәрем менән генә яратып, рәхмәт әйттем ул малайға: "Һин үҙеңдең ниндәй шәп икәнеңде белмәйһең әле, ҡартатайыңда булмаған аҡыл бар һиндә, рух бар", - тип шыбырланым...

Беҙҙең халыҡ көслө ул, ниндәй генә тетрәнеүҙәр, һынауҙар үтмәгән. Был юлы ла юғалып ҡалмаҫ. Ҡалманы ла. Күптәр асылыбыҙға юлландыҡ. Әсәй, өләсәйҙәр усаҡ тергеҙҙе, ғаилә усағын, ғаилә ҡотон дөрләтте. Милли аштарыбыҙҙы тергеҙеп (лимон, имбирҙәр ары торһон ҡорот, талҡан, буҙа барҙа), боронғо ҡул эштәрен алды ҡулдарына, әкиәт, мөнәжәт һөйләне, китаптар уҡыны, тормоштағы үҙгәрештәрҙе тойомлаған һиҙгер балалар күңелен ҡояш кеүек нурлай алды. Ағинәйҙәр баҫты милләт сәңгелдәге янына (беҙ бит бала ғына түгел, милләт тәрбиәләйбеҙ). Әлеге үҙизоляция мәлендә лә тик ултырмай улар: милли кейемдәрҙе барлап, төҙәтеп, онлайн режимда оҫталыҡ дәрестәре күрһәтә, мәрхәмәтлек тойғоларын үҫтереп, бушлай битлектәр тегеп, халыҡҡа тарата, ауыл аҡһаҡалдары менән бер рәттән ауыл, ил именлеге өсөн доғалар ҡыла. Бөгөнгө көндә беҙ үҙ өйҙәребеҙгә бикләнгәндә халҡыбыҙҙың төп тәрбиә ҡиммәттәре кәрәк булды ла инде: кешелеклелек, итәғәтле, ихтирамлы, иғтибарлы булыу, һыйышып тыныс йәшәү, эш һөйөүсәнлек, күркәм сабырлыҡ. Шөкөр, ир-егеттәребеҙ ысын ир, атайлыҡ вазифаларын әүҙемләштерҙе. Интернетта бер атайҙың: "Ниһайәт, улыма атай-бабайҙар һөнәрҙәрен байҡатырға ваҡыт таптым: бергәләп уҡ-һаҙаҡ эшләп, йәйәнән атырға өйрәндек", - тип яҙғанына һоҡландым.

Ир-егеттәр тигәндән. Себерҙән, Яҡутстандан иҫән-имен ҡайтҡан ир-егеттәребеҙ ҙә бынан ары сит яҡтарҙа йөрөмәҫтәр, ғаиләләре менән бергә булып, балаларын тәрбиәләү, ауылдарҙы тергеҙеү, тыуған ерҙе йәмләүгә ең һыҙғанып тотонорҙар, тигән өмөт тә бар әле беҙҙә.

Эйе, был ҡаңғырыш мәлендә юғалып ҡалғандар, телефон аша төрлө яңылыҡтар, имеш-мимештәр тыңлап, ҡуҙғып, бар ҡурҡыуын, борсолоуын яҡындарына төшөрөп, ғаилә ҡотон юғалтҡандар ҙа бар. Ҡалай итәһең, был донъяның ала-ҡолалары һәр заманда булған. Бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, барыһы ла үтә. Был да үтәсәк. Милли асылыбыҙ һаҡлап ҡаласаҡ беҙҙе. Иң мөһиме, үҙ-үҙебеҙҙе һаҡларлыҡ ихтыярыбыҙ, ғорурлығыбыҙ, иманыбыҙ булһын.

Коронавирустан һуң ни булыр беҙҙең менән? Кеше иманына күрә һынала, тиҙәр. Ошо ваҡытта сабыр булып, ошо көндә ил-йорт, ата-әсә, милләт алдындағы бурыстарыбыҙҙы иҫкә алып, тәүбәгә килһәк, Хоҙай ҙурыраҡ юғалтыуҙарҙан һаҡлар. Шуға ышанайыҡ.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА,**
**Ейәнсура районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*БЕҘҘЕ ЯРАТҠАН ДУҪТАР*

## БАЙБЫҘ

Беҙ, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы ағинәйҙәре, "Киске Өфө"нән айырылғаныбыҙ юҡ. Унда баҫылған һәр мәҡәләнән үҙебеҙгә мәғлүмәт алабыҙ: йолалар өйрәнәбеҙ, башҡорт милли кейем буйынса кәңәштәр алабыҙ, тәрбиә мәктәбе һабаҡтарын үҙләштерәбеҙ, зыялылар һүҙен күңелдәргә һеңдерәбеҙ. Беҙ 2013 йылдан "Яҙгөл" вокаль ансамблендә лә шөғөлләнәбеҙ. Ансамблебеҙҙең репертуары бик бай. Халыҡ йырҙарын, мөнәжәттәр, популяр йырҙарҙы башҡарабыҙ, ауылда, районда, республикала үткән сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Магнитогорск ҡалаһында үткәрелгән "Яҙғы һандуғас" фестивалендә 1-се дәрәжә диплом (2016); Сибай ҡалаһында үткәрелгән төбәк-ара мөнәжәт байрамында 1-се урын (2019); Баймаҡ районы Буранбай ауылында үткән "Рухиәт" башҡорт йырҙарын башҡарыусыларҙың район конкурсында 2-се урын (2019); Ейәнсура районында үткәрелгән "Мин яратам һине, тормош!" республика конкурсында ла призлы урындар яуланыҡ (2019). Икенсе яратҡан шөғөлөбөҙ, әлбиттә, башҡорт милли кейемдәре тегеү, биҙәүестәр эшләү. Был өлкәлә лә башҡалар менән уртаҡлашыр белем-тәжрибәбеҙ бар. Байбыҙ. "Киске Өфө" мәғлүмәт менән байыта, ҡул белгән шөғөлдәребеҙ, аралашыуҙар, әүҙем йәмәғәт эштәре менән булыу беҙҙе рухи яҡтан байыта.

**Әлфиә ИБРАҺИМОВА.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан ғаиләләргә һәм балаларға саралар йәһәтенән коронавирусҡа ҡаршы көрәш һөҙөмтәлелеге буйынса лидер өс төбәк иҫәбенә инде. Анализды 11-17 майҙа социаль тикшеренеүҙәр институты үткәргән. Беренсе урында - Ленинград өлкәһе, икенселә - Башҡортостан, өсөнсөлә - Удмурт Республикаһы.

✓ Республикала шәкәр сөгөлдөрөн сәсеү тамамланыуға табан бара. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 19 майға аграрийҙар 27,6 мең гектар татлы культура сәскән, йәки планға ҡарата 98 процент. Шулай уҡ 19 майға игенселәр 1,5 миллион гектарға яҙғы культуралар сәскән, был планлаштырылған күләмдән 77 процент тәшкил итә.

✓ Ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары хәбәр итеүенсә, Кремлдә Конституцияға төҙәтмәләр буйынса тауыш биреүҙе һәм Еңеү парадын бер көндә - 24 июндә уҙғарыу мөмкинлеге ҡарала. Баҫма мәғлүмәттәре буйынса, 1945 йылда Еңеү параԁы тап ошо көндә булған, шуға күрә 24 июнь Еңеү параԁы өсөн төп дата тип ҡарала. Парадты һәм тауыш биреүҙе бер көндә үткәреү уңайлы, сөнки был осраҡта шаршамбы, 24 июнь, ял көнө тип иғлан ителә, тип иҫәпләй сығанаҡтарҙың береһе.

✓ Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы хәбәр иткәнсә, туғыҙынсы һәм ун беренсе кластарҙа "Һуңғы ҡыңғырау" 29 майҙа дистанцион рәүештә ойошторола. Шулай уҡ республика Мәғариф һәм фән министрлығы тәҡдиме менән "Һуңғы ҡыңғырау" көнөндә сығарылыш класс уҡыусыларына бергә йыйылыу һәм тәбиғәткә сығыу тыйыла.

✓ "Башинформ"дың элекке генераль директоры Максим Ульчев Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем мәғлүмәт агентлығының баш бухгалтеры булып эшләгән Дилә Сәғитова ойошманың директоры вазифаһын башҡарыусы буласаҡ. Баҫманың редакция сәйәсәтен баш мөхәррир Алик Шакиров билдәләй.

✓ Өфөнән ике мәктәп "Тармаҡ лидерҙары" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яуланы. Улар - Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе һәм Өфө балалар сәнғәт мәктәбе. Сарала бөтә илдән 51004 ойошма ҡатнашты. Рәсәй Федерацияһы "Тармаҡ лидерҙары" - мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт ойошмалары өсөн асыҡ конкурс.

✓ **Субсидия 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2020 йылдың 1 апреленә тиклем кредит алған заемсыларға бирелә. Субсидия биреү ваҡыты - 2020 йылдың 1 апреленән 2020 йылдың 31 декабренә тиклем.**



ҠЫҪҠАСА

# ӨЛКӘНДӘР - ҠУРСАЛАНЫУҒА!

✓ **Башҡортостанда 65 йәштән өлкәндәр һәм хроник сирҙәрҙән яфаланғандар өсөн йәнә изоляция режимы индерелә. Был хаҡта дүшәмбе хөкүмәттәге кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров белдерҙе.** Тейешле указға 18 майҙа ҡул ҡуйылды. Документ Рәсәй Президенты Владимир Путиндың 65 йәштән өлкәндәр һәм хроник сирҙәрҙән яфаланғандар өсөн изоляция режимын индереү тураһында йөкләмәләрен иҫәпкә алып әҙерләнгән. "Был указды әҙерләгәндә табиптарҙың фекерен дә иҫәпкә алдыҡ, хәҙер уға аҙыраҡ төҙәтмәләр индерәбеҙ. Указда ике норма бар. Беренсеһе: эшләп йөрөгән 65 йәштән өлкәндәр өйҙән эшләүгә күсә. Беҙ полиция органдарына рейдтар барышында әлеге йәш төркөмөнә ҡараған кешеләргә иғтибар итергә һәм уларға изоляция режимын үтәргә кәңәш бирергә ҡушабыҙ. Шуға күрә улар магазинға, табипҡа барһын, ашығыс медицина ярҙамын алыу мөмкинлегенә эйә булһын өсөн бөтә ҡағыҙҙаларҙы указға яҙырбыҙ. Ләкин төп норма - 65 йәштән өлкәндәр йәнә изоляция режимына күсә".

✓ **Башҡортостанда медицина учреждениелары тулы күләмдә эшләргә һәм коронавирус менән ауырыусыларға ғына түгел, ә бөтә пациенттарға ярҙам күрһәтергә тейеш.** Был турала 14 майҙа коронавирус буйынса оператив штаб ултырышында республика Башлығы Радий Хәбиров әйтте. Ул Башҡортостан Республикаһы Башлығының Социаль коммуникациялар буйынса идаралығы начальнигы Елена Прочаковскаянан башҡа сирҙәр буйынса табип ярҙамы ала алмаған кешеләр өсөн махсус чат булдырыуҙы һораны. "Коронавирусҡа күп көс һалыу арҡаһында кешеләрҙең яфаланыуына юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Быны иғтибар менән күҙәтеп барасаҡмын", - тип белдерҙе Башҡортостан Республикаһы Башлығы.

✓ **Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы республиканың ҡайһы ҡала һәм районларында яңы коронавирус инфекцияһы менән сирләүҙәр күберәк булыуы хаҡында хәбәр итте.** Мәғлүмәттәр 19 майға иртәнге сәғәт 9-ға бирелгән. COVID-19 раҫланған осраҡтар һаны буйынса беренсе урында - Өфө, 733 осраҡ (тәүлек эсендә +18), икенсе урында - Нефтекама, 262 осраҡ (тәүлек эсендә бер яңы осраҡ та юҡ), өсөнсөлә - Бәләбәй, 95 осраҡ (тәүлек эсендә +1). Артабан Өфө районы килә - 77 (бер тәүлектә +2), Стәрлетамаҡ - 68 (бер тәүлектә +1), Салауат - 59, Күмертау - 58 (+4), Салауат районы - 54 (бер тәүлектә +49, сир Тажикстандан һәм Үзбәкстандан килгән мигранттар араһында таралған тип билдәләнә), Тәтешле районы - 46 һәм Октябрьский ҡалаһы - 39. Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығында белдереүҙәренсә, тәүлек эсендә үҫеш темпы 4,2 процент тәшкил иткән.

✓ **Дөйөм белем биреү ойошмалары һәм дәүләт һөнәри белем биреү ойошмаларының иң яҡшы башҡорт һәм рус теле уҡытыусылары араһында аҡсалата премияға дәғүәселәрҙең республика конкурсы дистанциялы уҙғарыла.** Конкурс йомғаҡтары буйынса иң яҡшы 50 башҡорт һәм рус теле уҡытыусыһына Башҡортостан Республикаһы мәғарифы үҫешенә мөһим өлөш индергән һәм һөҙөмтәле һөнәри эшмәкәрлеге өсөн 50-шәр мең һум күләмендә премия тапшырыласаҡ. Республика конкурсында ҡатнашыу өсөн документтарҙы 2020 йылдың 25 майына тиклем Башҡортостан Республикаһы Мәғарифы үҫтереү институтына электрон адрестары буйынса ебәрергә кәрәк: башҡорт теле уҡытыусылары өсөн - bashyazgrant@mail.ru (Башҡортостан Республикаһы Мәғарифы үҫтереү институтының башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһы); рус теле уҡытыусылары өсөн - rusyazgrant@mail.ru (Башҡортостан Республикаһы Мәғарифы үҫтереү институтының филологик белем биреү кафедраһы).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠОРТСОЛАР ЙЫЙЫЛАСАҠ

**Башҡортостанда "Апимондия" халыҡ-ара умартасылар ассоциацияһының 47-се конгресын һәм "АпиЭкспо" күргәҙмәһен уҙғарыуға әҙерлек дауам итә. Билдәле булыуынса, улар 2021 йылда республика биләмәһендә үтергә тейеш. Апимондия башҡарма комитеты ултырышында видеоконференция форматында бөтә донъя форумына әҙерлек буйынса эш мәсьәләләре ҡаралды.**

Умартасылар федерацияһы етәкселеге Рәсәй яғынан виза һәм таможня мәсьәләләре буйынса ярҙам күрһәтеүҙең, күберәк ҡатнашыусылар йәлеп итеү өсөн илдә һәм унан ситтә Апимондия конгресын танытыуҙың мөһимлеген билдәләне. Рәсәй умартасылары өсөн теркәү взностары мәсьәләһенә айырыуса иғтибар бүленде. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Илшат Тажетдинов Апимондия етәкселегенә Рәсәй умартасыларына льготалы ҡатнашыу хаҡын билдәләү мөмкинлеген ҡарау тәҡдиме менән мөрәжәғәт итте. Апимондия етәкселеге әлегә был тәҡдимде хупланы, тиҙҙән Рәсәй яғы Апимондияға рәсми һорау ебәрәсәк. Башҡарма комитеттың киләһе ултырышы 6 июнгә тәғәйенләнгән, унда 2021 йылдың сентябрендә Өфөлә үтергә тейешле конгрестың ғилми программаһын әҙерләү тураһында фекер алышыу күҙаллана. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Апимондия барышында донъя умартасыларының Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенә, Башҡорт аграр университетының Еләкле ауылындағы тәжрибә умарталығына, Иглин районында планлаштырылған бал ауылына, Архангел, Шишмә һәм Ишембай районларындағы тоҡомло ҡорттар умарталығына, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығына һәм "Башҡортостан" милли паркына барыу мөмкинлеге бар.

# ҒАИЛӘЛӘРГӘ ЯРҘАМ



**Башҡортостанда ҡайһы бер ғаиләләргә ипотека буйынса процентарҙы түләү өсөн 100 мең һумға тиклем аҡса бирелә.**

Ишле ғаиләләр, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр, инвалидтар, яңғыҙ ата-әсәләр, шулай уҡ 2020 йылдың 15 мартынан 1 июненә тиклем эшен юғалтҡан граждандар ошондай мөмкинлек менән файҙалана ала. Башҡортостан Республикаһының Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Марат Әхмәҙуллин һүҙҙәренсә, быңдай субсидия 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2020 йылдың 1 апреленә тиклем кредит алған заемсыларға бирелә. Субсидия биреү ваҡыты - 2020 йылдың 1 апреленән 2020 йылдың 31 декабренә тиклем. Бер ҡатнашыусыға субсидияның дөйөм күләме 100 мең һумдан артмаҫҡа тейеш. Был осраҡта бала тип 18 йәшкә ҡәҙәр йә иһә көндөҙгө бүлектә белем алған 23 йәшкә тиклемгеләр иҫәпләнә. Субсидия юллау өсөн әле үк кредит алған банкка мөрәжәғәт итергә кәрәк. Кредит ойошмаһы ике ай эсендә Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ программаларын ғәмәлгә ашырыу идаралығы менән сығымдарҙы ҡаплау буйынса уртаҡ ғәмәлдәр тураһында килешеү төҙөй. Кредит ойошмаһы менән килешеү төҙөү хаҡында мәғлүмәт ведомствоның рәсми сайтына урынлаштырыла. Белешмәләр өсөн телефон:+7(347) 218-17-49, +7(347)218-17-42, +7(347) 218-17-43, +7(347) 218-17-45.

# ТҮЛӘРГӘ!



**Башҡортостанда COVID-19 менән эшләгән бөтә табиптарға һәм ашығыс ярҙам водителдәренә аҡса түләнә. Рәсәй Федерацияһы хөкүмәтенең 2020 йылдың 15 майындағы ҡарарына үҙгәрештәр индерелде.**

Түләүҙәрҙә стационарҙа йәки ашығыс медицина ярҙамында бер тапҡыр булһа ла коронавирус диагнозы ҡуйылған ауырыу менән эшләгәндәрҙең барыһы ла тулы күләмдә алырға тейеш (80, 50, 25 мең). Ҡарарҙа "фактик эшләгән ваҡыт өсөн" һүҙҙәрен алып ташланылар. Коронавирус менән сирләүҙәргә медицина ярҙамы күрһәтеүҙә ҡатнашҡан ашығыс ярҙам водителдәренә, шул иҫәптән транспорт компанияларына дәртләндереүсе түләүҙәр биреүгә ҡағылышлы үҙгәрештәр индерелде. Отпуск, ауырыу менән бәйле айлыҡ норманы тулыһынса эшләмәгән хеҙмәткәрҙәргә дәртләндереүсе түләүҙәр тулы күләмдә күсерелде. "Башҡортостанда коронавирус йоҡторған пациенттар менән эшләгән барлыҡ хеҙмәткәрҙәргә дәртләндереүсе түләүҙәр тулы күләмдә күсерелде. 16-18 майҙа бөтә түләүҙәр ҡулға бирелде. Шулай уҡ транспорт компаниялары-аутсорсерҙар менән килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды һәм компанияларға водителдәргә (64 кешегә) апрель өсөн тулы күләмдә түләү өсөн аҡса күсерелде", - тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.

# ҒАРИЗАҺЫҘ ҒЫНА...



**Башҡортостанда 15 апрелдән башлап мендән ашыу ғаилә ғаризаһыҙ тәртиптә Әсәлек капиталына сертификат юллаған, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә.**

Сертификат электрон төрҙә генә рәсмиләштерелә. Уны рәсмиләштереү Пенсия фондының мәғлүмәт системаһында теркәлә һәм Рәсәй Пенсия фонды сайтында йәки "Госуслуги" порталында әсәнең шәхси кабинетына ебәрелә. Улылыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алған ғаиләләргә сертификат алыу өсөн элеккесә ғариза яҙыу тәртибе һаҡлана. 2020 йылда Әсәлек капиталы күләме 466 617 һум тәшкил итә. Быйыл икенсе балаһы тыуған ғаиләләр өсөн Әсәлек капиталы 150 мең һумға арттырыла һәм һөҙөмтәлә 616 617 һум була. 2020 йылдан донъяға килгән йәки улылыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алынған өсөнсө, дүртенсе һәм артабанғы балалар өсөн ошондай сумма бирелергә тейеш (әгәр элек ғаиләнең әсәлек капиталына хоҡуғы булмаһа). 2007 йылдан Башҡортостанда бөтәһе 324 мендән ашыу Әсәлек капиталына сертификат бирелгән, тип белдерҙеләр Рәсәй Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһендә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Ғ.Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының баш табибы Эльза Сыртланова вазифаһын ҡалдырҙы. Һаулыҡ һаҡлау министры билдәләүенсә, ул Өфөнөң 38-се поликлиникаһының баш табибы вазифаһына, Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына етәксе итеп БДМУның баш табибы Шамил Булатовтың тәғәйенләнеүе ихтимал.

✓Өфөлә 50 метрлыҡ "Нефтсе" бассейнын төҙөкләндереү тамамланды. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, спорт объекты ике йылға яҡын төҙөкләндерелде. Реконструкция республика бюджетына 140 миллион һумға төштө.

✓Өфө сентябрҙә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған фестиваль уҙғарырға йыйына. Унда хәрби һәм ретротехниканы күрһәтеү, ялан кухняһы, спорт зоналары, тактик һәм атыу ҡоралдары күргәҙмәһе, йыр һәм бейеү коллективтары ҡатнашлығында концерт планлаштырыла.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында Совет майҙаны буйлап транспорт хәрәкәте ябыды. Өфө хакимиәте мәғлүмәтәре буйынса, сикләү ярты йылдан ашыу - 10 декабргә тиклем, ғәмәлдә була. Майҙанды ябыу легендар генерал Миңлегәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыу менән бәйле.

✓Рәсәй Мәғариф министрлығы туғыҙынсы класс уҡыусылары өсөн рус теле һәм математиканан йомғаҡлау имтихандарын үткәрмәй, тип хәбәр итте ведомствоның матбуғат хеҙмәте. Йомғаҡлау билдәләре йыллыҡ баһалар нигеҙендә ҡуйыла. Мәктәп тамамлаусылар өсөн Берҙәм дәүләт имтихандары датаһы йәнә 8 июндән билдәһеҙ ваҡытҡа күсерелде.

✓Яҡташыбыҙ, Мәскәү өлкәһе Егорьевск үҙәк район дауаханаһы терапевы Наил Саматовты һуңғы юлға оҙаттылар. Ул коронавирустан Мәскәү өлкәһендә вафат булып ҡалһа ла, тыуған яғына - Салауат районы Ахун ауылына алып ҡайтып ерләнеләр. Уға 28 генә йәш ине. Ул Янғантау урта мәктәбен, быйыл Башҡорт дәүләт медицина университетының дауалау факультетын тамамлаған. Башҡортостан табибының исеме "Хәтер исемлеге"нә индерелгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡурсаланыу ҡағыҙәләре бер аҙ йомшартылһа ла, йәмәғәт урындарында битлектәр, бирсәткәләр кейеү талабы мотлаҡ булып ҡала. Шулай уҡ 65 йәштән оло граждандар һәм хроник сирҙәре булғандар, улар менән бер өйҙә йәшәүселәр өсөн дә ҡурсаланыу дауам итә. Хаҡлы ялда булып та эшләп йөрөүселәр тулыһынса ситтән тороп эшләүгә күсерелә. Бары тик аҙыҡ-түлек, дарыу йәки бәйләнеш салонына сығыуға ғына ташламалар бар. Хатта был аҙнала үтәсәк Ураҙа байрамы ла ситтән тороп ҡына билдәләнәсәк, ғибәҙәттәр онлайн режимда күрһәтеләсәк. Ҡала хакимиәтендә сираттағы видеоконференция форматында үткән оперативканы мэр Өлфәт Мостафин бөгөн көнүҙәк булған ошо темаларҙан башланы. Сөнки, мәғлүм булыуынса, әле коронавирус менән зарарланыусылар һаны кәмемәй, тимәк тынысланырға иртә.**

# БАРЫҺЫ ЛА СИТТӘН ТОРОП...



Шулай уҡ, ғәҙәттәгесә, төрлө тармаҡтар буйынса яуаплыларҙың эпидемия шарттарында эш урындарында һәм учреждениеларҙа инфекция таралыуын профилактикалау буйынса алып барылған эшмәкәрлеге менән бер рәттән, мизгелдең ремонт эштәре тураһында ла сығыштар тыңланды. Йәмәғәт урындарында граждандарҙың "Юғары әҙерлек" режимы талаптарын нисек үтәүе мәсьәләһе лә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Был турала мәғлүмәтте Өфө ҡалаһының Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге директоры Александр Овчинников еткерҙе. Улар Халыҡты социаль хеҙмәтләндереү республика үҙәге хеҙмәткәрҙәре менән берлектә 21 марттан алып сит илдәрҙән, илдең башҡа төбәктәренән ҡайтҡан граждандарҙың, Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы хеҙмәткәрҙәренең һәм пациенттарының, 65 йәштән өлкән граждандарҙың, хроник сирҙәре булғандарҙың ҡурсаланыу режимын нисек үтәүен тикшерә. Был маҡсатта бәләкәй төркөмдәр ойошторолоп, улар ошо категорияға ҡараусыларҙың фатирҙары буйлап йөрөй.

Әлеге ваҡытка сит илдән ҡайтҡан - 5617, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ҡайтҡан 2006 граждан, Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының 1693 хеҙмәткәре һәм элекке пациенты, оло йәштәге 66 мең кеше тикшерелгән. Яңы сир усағы асыҡланыу менән кисектергеһеҙ саралар күрелгән. Бынан тыш, ҡаланың 16 паркы һәм скверы даими контролдә тотола. Йәмәғәт урындары "Хәүефһеҙ ҡала" видеокүҙәтеү аппарат-программа комплексының өҫтәмә системаһы аша күҙәтелеп, халыҡтың ҡайҙа күберәк йөрөүе асыҡлана һәм шуның буйынса патруль төркөмдәрҙең маршруты көйләнә. Ҡала территорияларын контролдә барышында 90 меңдән ашыу кеше иҫкәртелгән, оло йәштәге 19 меңдән ашыу кешегә мотлаҡ ҡурсаланыу талаптарын үтәү зарурлығы аңлатылған.

Балиғ булмаған балалар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Ҡала урамдарында ҡағиҙә боҙған 5712 үҫмер асыҡланған, 136 ата-әсә балаларын тәрбиәләү бурыстарын үтәмәгәне өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

Көндәр оҙайыу һәм матурланыу менән йәштәр ҙә өйҙә ултырып сыҙамай. Һөҙөмтәлә һуңғы 4 көндә генә (19 майға ҡарата) Салауат Юлаев майҙаны һәм уның эргәтирәһендәге территорияла 117 административ хоҡуҡ боҙоу осрағы иҫкәртелгән, шул иҫәптән 60 осраҡ - йәмәғәт урынында булыу талаптарын үтәмәүгә ҡағыла. Бынан тыш, студенттар ҡаласыҡтары территорияларында ла даими рейдтар ойоштороla, урамда рөхсәтһеҙ сауҙа итеү осраҡтары асыҡлана, эшмәкәрлеген туҡтатыу талабы булыуға ҡарамаҫтан, һаман да эшен дауам иткән предприятиелар буйынса ла мониторинг алып барыла. Өлфәт Мостафин, үҙ сиратында, кисен йәштәр йыйылған урындарҙа, бигерәк тә "Торатау" Конгресс-холы эргәһендәге парковканы даими контролдә тоторға кәрәклегенә баҫым яһаны.

Быйылғы уҡыу йылы үҙенсәлекле тамамлана - 6 апрелдән Өфөнөң барлыҡ 128 дөйөм белем биреү ойошмаһы сиректе ситтән тороп уҡыу форматына күсте, ата-әсәләр менән аралашыу ҙа дистанцион формала алып барыла. Был хаҡта хакимиәттең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова мәғлүмәт бирҙе. Һуңғы ҡыңғырау шылтырағанға тиклем барлыҡ предметтар буйынса ла төп белем биреү программаһы тулыһынса үҙләштереләсәк. РФ Мәғариф министрлығы ҡарарына ярашлы, 4-8-се синыфтарҙа апрель-майға тәғәйенләнгән Бөтә Рәсәй тикшереү эштәре (ВПР) көҙгөләккә күсерелгән. Һәр мәктәп уҡыу йылы тамамланыу датаһын үҙе билдәләһә лә, БР Мәғариф һәм фән министрлығы хатына ярашлы, 1-4-се синыфтар өсөн ул 22 майҙа, 5-8-се һәм 10-сы синыфтар өсөн 29 майҙа тамамланасаҡ һәм шул көндә онлайн Һуңғы ҡыңғырау байрамы буласаҡ. 9-сы һәм 11-се сығарылыш синыфтары уҡыусыларына быйыл ТДИ һәм БДИ тапшырыу мотлаҡ түгел, аттестаттар йыллыҡ йомғаҡлау баһалары буйынса биреләсәк. Ә инде кем юғары уҡыу йортона инергә теләй, шулар ғына имтихан тапшыра, уны тапшырыу датаһы һуңғараҡ күсерелә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠЫҪҠАСА

# УРАҘАНЫ ТАМАМЛАЙБЫҘ...

✓ **Башҡортостанда 24 майҙа мосолмандарҙың изге Рамаҙан айы тамамланыу уңайынан Ураҙа байрамы билдәләнә.** 18 майҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә быйыл Ураҙа байрамы Пасханы билдәләгән кеүек ойоштороласағын әйтте. Бындай ҡарар дин әһелдәре менән кәңәшләшкәндән һуң ҡабул ителде. "Юғары әҙерлек режимы тураһындағы указға ярашлы, беҙ бергә йыйылыуҙы тыйырға һөйләштек. Шуға күрә йәмәғәт намаҙҙарын онлайн-трансляция режимында үткәрергә тәҡдим итәбеҙ", - тине Радий Хәбиров. Республика етәксеһе Пасханы билдәләгән ваҡытта режим үтәлмәгән, күмәкләп ғибәҙәт ҡылған урындарҙа коронавирус таралыуы осраҡтары булыуын әйтте. Алдан хәбәр ителгәнсә, 2020 йылдың 24 майы - Ураҙа байрамы - республикала ял көнө тип иҫәпләнә.

✓ **Матур йолаға әүерелгән "Өлгөлө ихата, йорт, подъезд" конкурсы Өфөлә 2004 йылдан алып уҙғарыла.** Уның маҡсаты - ҡаланың тышҡы йөҙөн, уның ихаталарын һәм йорттарын матурлау. Конкурс ике этапта ойоштороло. Районда - майҙан сентябргә тиклем. Ҡала этабы - 1 сентябрҙән 15 декабргә хәтлем. Район этабының һигеҙ еңеүсеһе ҡала этабына сыға. Махсус комиссия улар араһынан еңеүселәрҙе билдәләй. Йорт, ихата һәм подъезд, уларҙың төҙөклөгө, биҙәлеше, торлаҡ фондын техник файҙаланыу нормаларын үтәү, хеҙмәттәр өсөн бурыстың булмауы һәм башҡа параметрҙар баһалана. Еңеүселәрҙе аҡсалата премия көтә, уны милексәләрҙең дөйөм йыйылышының ҡарары буйынса ихатаны, йортто, подъезды өҫтәмә төҙөкләндереү, шулай уҡ күп фатирлы йорт Советы рәйесен дәртләндереү өсөн тотонорға мөмкин (ләкин 10 проценттан артыҡ булмаҫҡа тейеш). 2019 йылда 51 ихата, 49 йорт һәм 49 подъезд "Өлгөлө йорт, ихата, подъезд" конкурсында ҡатнашырға ғариза биргәйне.

✓ **Башҡортостан - Рәсәйҙә коронавирусҡа ҡаршы режимды йомшартыу осоронда спорт ярыштарын уҙғара башлаған беренсе төбәк.** 23 майҙа "Аҡбуҙат" ипподромында "Терра Башҡортостан" республика атспорт турнирының өсөнсө этабы була. Ярыштар тамашаһыһыҙ үткәрелә. Ат сабышын биш телеканал: Башҡортостан юлдаш телевидениеһы, UTV, "Вся Уфа", Конный мир, "СтартТВ" күрһәтә, шулай уҡ ярыштар барышын социаль селтәрҙәрҙә күҙәтеп барырға мөмкин (akbuzat_ippodrom_ufa). Өсөнсө этапта ипподром аттарында Архангел, Бөрө, Иглин, Салауат райондары вәкилдәре ҡатнаша. Көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана. Турнир бөтә санитар нормаларға ярашлы уҙғарыла, тип хәбәр иттеләр ипподром хакимиәтенән.

✓ **Өфөнөң ятаҡтарҙа йәшәгән юғары уҡыу йорттары студенттарын, коронавирус йоҡтороу хәүефе янауы сәбәпле, өйҙәренә ҡайтаралар.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров университет ректорҙары менән иртәнге кәңәшмәнән һуң шундай бойороҡ бирҙе. "Беҙҙә 4,5 мең самаһы студент - Өфөлә. Уларҙың меңгә яҡыны - сит ил студенттары, ләкин ҡалған 3,5 меңе - беҙҙекеләр бит, улар Өфөлә, ятаҡтарҙа нимә эшләй һуң? Шуға күрә бында ла тәртип урынлаштырыуҙы һораным, сөнки хәҙер йүнләп уҡымаған йәштәр ҡала буйлап йөрөй һәм бер-береһенә сир йоҡтора башлай. Өҫтәүенә, ҡайһы бер ятаҡтарҙа коронавирус йоҡтороу осраҡтарын теркәй башланылар".

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымын түбәнәйтеү өсөн төнәтмә эшләргә 2-шәр ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғо, шифалы валериананың турақланған тамырһабағы, әнис емеше, меңъяпраҡ кәрәк. Ошо йыйылманың 2 ҡалағына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан төнәтмә эсеп дауаланырға.

### Теш һыҙлаһа

❖ Табипҡа күренеү мөмкинлеге булмағанда теш ныҡ һыҙлаһа, 4 бөртөк лавр япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт тотҡас, һеҙеп алырға. Ошо йылы төнәтмә менән һыҙланыу баҫылғанға тиклем бер ниҫә тапҡыр ауыҙҙы сайҡатырға.

### Сөйәл

❖ Цикорий тамыры сөйәлде бөтөрөргә ярҙам итә. Цикорийҙы тамыры менән алып йыуырға, 1:3 нисбәтендә һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Ошо ҡайнатма менән сөйәлде сылатырға һәм боҫлама һалып бәйләп ҡуйырға. Ябай һыу менән еүешләмәгеҙ. Бер нисә көндән тире таҙара.

### Сәс ҡойолоуҙан

❖ Һырғанаҡ ярҙам итә. Бер ус һырғанаҡ емеше, япраҡтары һәм йәш үрентеләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 10 минут ҡайнатып, һөҙөргә. Килеп сыҡҡан ҡайнатманы баш тиреһенә ыуырға. Һөҙөмтәлерәк булһын өсөн был ҡайнатманы бүлеп, көнөнә өс тапҡыр эшләргә була.

❖ Сәсте йыуған һайын кесерткән һыуы менән сайҡатыу бик ыңғай тәьҫир итә. Уны әҙерләү өсөн бер ус кипкән кесерткәнде 2-3 литр һыуға һалып ҡайнатырға, йылымысланғансы ҡуйып торорға. Шул һыу менән сәсте йыуырға.

❖ Ике ҡалаҡ ҡайын япрағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Ошо һыу менән сәсте йыуғандан һуң башты сайҡатырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Изге әүлиә Мөжәүир Уйылдан улы йәшәгән төбәкте һәм уның бөтә тирә-яғын, йөҙ километр радиус менән дәүләт ҡурсаулығы итеп һаҡлау кәрәклеге тураһында иҫкәртелә.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Ҡурған өлкәһендә ҡабартма ҡайыулы байрам күлдәктәрен XX быуат дауамында ла кейгәндәр. Ирҙәр күлдәге һәм ҡушаҡтары ла ҡайылған. Йорт туҡыусылығы менән шөғөлләнмәй башлағас, байрам кейемдәрен фабрикала эшләнгән туҡымаларҙан теккәндәр, уны күп төрлө төҫлө ҡайыу һәм атлас таҫмалар менән биҙәгәндәр. Нағыштың төҫтәре береһенән икенсеһенә төрләнеп китеүе орнаментҡа бәйле булмауы был ҡайыуҙарҙың үҙенсәлеген тәшкил итә. XX быуаттың 60-70-се йылдарында Ҡурған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарында ҡайыу оҫталары күп булыуға ҡарамаҫтан, бер нисә тотороҡло орнаменталь композиция бер аҙ төрләндереп ҡулланылған. Ҡыҙыл ерлеккә ҡайырға яратҡандар. Биҙәктең һыҙаттары ғына ҡайылған, ҡырғыҙҙарҙың "тура сайма" тип аталған тегеү алымына оҡшатып, бер һыҙыҡтан торған, тығыҙландырылған һәм киңәйтелгән сылбыр эшләнгән.



*Ҡурған өлкәһе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары күлдәктәрендә киң таралған стилләштерелгән орнамент. XX б. уртаһы.*

Ҡабартма ҡайыу техникаһы ҡатмарлы биҙәктәге һыҙыҡтарҙың талғынлығын, оҙонлоғон, өҙлөкһөҙлөгөн тәьмин иткән. Ҡайһы бер композициялар нигеҙендә тулҡынға оҡшаш үренде йәки түңәрәкләнеп киткән кәкерсәк рәүешендәге биҙәк ята. Биҙәк тулҡындарының эскә инеп торған урындары бер бөртөк сәскә йәки йыйнаҡ сәскәлектәр менән тултырылған. Стилләштерелгәндәре сите буйлап ырғаҡҡа оҡшаған бихисап сығынтылар йәки кәкерсәктәрҙән, уртаһында йөрәк йәки сәскә төшөрөлгән, йондоҙға тартым эске орнаментлы түңәрәктәр, болотҡа оҡшаш йәки башҡа төрлө ҡыҙыҡлы һүрәттәрҙән торған. Орнамент бүлкәстәр (ячейки) менән сикләнгән, улар бер ҡат йәки ҡуш элмә техникаһында эшләнгән, һыҙат аҫтынан үткән һәм урыны-урыны менән аркалы сығынтылары ҡалҡып торған төркөмдәргә бүленә. Төп һүрәттә лә, тышҡы ҡайма буйҙарында ла сәскә тәлгәштәрен һынландырыу ғәҙәте булған. "Дөйә муйыны" тип аталған әҙеп - ритмик рәүештә элмәккә оҡшаш һигеҙлек менән бүленгән бер яҡлы кәкерсәктәрҙең тар ғына һыҙаты - иң популяр иҫәпләнгән.



*Ҡурған башҡорттары нағышындағы "дөйә муйыны" һәм "суҡтар"*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КӨНАУАЗ*

**Яҡутстандың Чаяндин яҭҡылығында коронавирус таралыуы һөҙөмтәһендә Башҡортостанға тәүгеләрҙән булып ҡайтып, обсерваторҙа 14 көнлөк карантин режимында булған 400 вахтасының күңел торошо, моғайын, шундайыраҡ булғандыр.**
**Хәбәр итеүебеҙсә, тәүге ике бортты Магнитогорск ҡалаһы аэропорты ҡабул итеп, ҡайтыусыларҙы Әбйәлил районы ял йорттары базаһының береһендә асылған обсерваторға урынлаштырғайнылар.**
**17 майҙа тәүге 200 кеше, бер нисә көндән башҡалар карантиндан сыҡты.**
**Башҡортостан Рәсәй төбәктәренән тәүгеләрҙән булып яҡташтарыбыҙҙы ҡайтарыуҙы һәм ҡабул итеүҙе ойошторҙо. Вахтасылар барыһы ла коронавирусҡа тикшереү үтте һәм анализ һөҙөмтәһе ыңғай булған 8 кеше дауаханаға урынлаштырылды, улар менән аралашыусылар ҙа дауаханаға һалынды. Анализ һөҙөмтәләре кире булғандар 14 көнлөк карантиндан һуң, ҡабаттан алынған анализдарынан уларҙа сир юҡлығы раҫланғас, өйҙәренә ҡайтарылды. Шулай уҡ башҡа осберваторҙарҙа булыусылар ҙа яйлап карантиндан сығарыла башланы.**

# "ҠАЙТАМ! ҠАЙТАМ! МИН ЙОРТОМА ҠАЙТАМ!"



## Теманы дауам итеп...

Әбйәлил районынан Артур Ибраһимов та ошо көндәрҙә, ниһайәт, ғаиләһенә ҡайтты. Обсерваторҙа булған ваҡытта ғүмеренең шатлыҡлы мәлен - атай булыу бәхетен кисерә ул: улы тыуа. "Тәүге балам, шуға вахтала булғанда тирә-яҡта бығаса билдәһеҙ вирус тураһында хәбәрҙәр таралғас, ҡатыным, тыуасаҡ балам өсөн борсолдом. Әгәр беҙҙе ҡайтармаһалар, республика ҡабул итмәһә, йөклө килеш ул нишләр? Мин үҙем Дәүләкән районынан, кәләшем Ырымбур өлкәһенән, шуға уның эргәһендә лә ярҙам итерҙәй, терәк булырҙай яҡындарыбыҙ булмауына көйөндөм. Шөкөр, барыһы ла яҡшы. Улым тыуыуы хаҡында ишеткәс, обсерватор етәкселеге район хакимиәте башлығы исеменән ҡотланы, коллегалар ҙа тәбрикләне. Тормош туҡтамай, дауам итә", - тип шатлығы менән бүлешеүҙән башланы ул һүҙен. Артабан инде әңгәмә дилбегәһен ҡулға алырға тура килде.

**➔ Артур, бына коронавирус донъяны "тиклем" һәм "һуң" тигән ике төшөнсәгә бүлде. Һеҙҙең өсөн, бигерәк тә ситтә йөрөп ҡайтҡас, ниндәйҙер айырма бармы? Белгестәр ҙә бынан һуң тормош элеккесә булмаясаҡ, тип фаразлай...**

- Әлегә ундай айырманы күрмәйем. Беҙ Яҡутстанда вирус усағы булған ерҙән 40 саҡырым алыҫлыҡта эшләнек. Ауырыусылар булманы. Шуға әлегәсә уның етдилегенә нисектер тулыһынса ышанмайым. Башҡалар ҙа минең кеүектер, тип уйлайым. Әле бер хеҙмәттәшем менән һөйләшеп алдым. Температураһы ла, бер ниндәй билдәләре лә юҡ - анализдары вирус барлығын күрһәткән. Хәҙер ҡабаттан тапшыра инде. Бында ҡайтҡас та кемдер битлектә йөрөй, кемдер битлекһеҙ икәнен күрҙек. Бәлки, вирус эҙемтәләре яйлап һиҙелә башлар һәм шул саҡта ғына тулыһынса ышанырбыҙ.

**➔ Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында тәүгеләрҙән булып вахтасыларҙы ҡабул итә башланы...**

- Эйе, бының өсөн республика етәкселегенә ҙур рәхмәт белдерге килә. Сөнки эш 15 апрелдә үк туҡтатылғайны, эшселәрҙе 4 майҙан ҡайтара башланылар. Шундай ҡатмарлы һәм хәүефле мәлдә беҙҙе ҡабул итмәүҙәре лә ихтимал ине, әммә тыуған төйәк баш тартманы, барыбыҙҙы ла ҡабул итте, ике аҙнаға төрлө ял йорттарына урынлаштырып, унда булған ваҡытта барлыҡ сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алды.

**➔ Шундай мәғлүмәт булғайны: вахтасылар обсерваторҙа карантинда саҡта уларға эш биреүсе бер айлыҡ эш хаҡын түләй, тигән...**

- Чаяндин яҭҡылығында эшләүселәргә карантинда булған осор өсөн шунда уҡ бойороҡ менән бер айлыҡ эш хаҡы билдәләгәндәр, ә беҙгә эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы тултырҙылар. Ул яҡтан ҡыйырһытманылар.

**➔ Хәҙер тоҡомоғоҙҙо дауам итәсәк улығыҙ тураһында ла хәстәрлек күрергә кәрәк. Кемдер бөгөнгө заманда бала үҫтереү бик ҡиммәт, ти, икенселәр һәр бала үҙ ризығы менән тыуа тип иҫәпләй. Һеҙ ниндәй юлды һайлайһығыҙ: улығыҙ һәм ғаиләгеҙҙе тәьмин итеү хаҡына ҡабаттан вахта эшенә китәһегеҙме, әллә ғаиләгеҙ эргәһендә ҡалаһығыҙмы?**

- Әле Яҡутстанда нимәләр булырын белмәйбеҙ. Чаяндин яҭҡылығын, башҡа яҭҡылыҡтарҙы тулыһынса яптылар, техниканы консервацияланылар. Мин июнгә отпускыға ғариза яҙғайным, шуға әле эш тураһында уйлаған юҡ. Вахта ысулы менән 5-6 йыл эшләнем. Әлбиттә, әгәр Башҡортостанда ғаиләне тәьмин итерлек лайыҡлы хаҡ түләнгән эш урыны булһа, ҙур ҡәнәғәтлек менән бында ҡалыр инем. Дөрөҫөн әйткәндә, бығаса үҙебеҙҙә ныҡлап эш эҙләп ҡарағаным булманы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Белгестәр белдереүенсә, коронавирустың иҡтисадҡа һәм тормошобоҙға кире йоғонтоһон әле аңлап һәм баһалап бөтөрмәйбеҙ, бер ни тиклем ваҡыттан һуң ғына асылына төшөнә башлаясаҡбыҙ. Әммә "аҡса юҡ, ә һеҙ түҙегеҙ" йәки "ауыр буласаҡ, ә һеҙ түҙегеҙ" тип кенә буш вәғәҙәләргә ышанып та йәшәп булмай. Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Республикала эшһеҙлек артҡанда ир-егеттәребеҙҙең ҡабаттан вахта буйынса эшкә сығып китмәҫенә гарантия юҡ...**

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

*БЕЛӘ ИНЕГЕҘМЕ?*

# РИМ ПАПАҺЫНЫҢ ХАТЫ



Баймаҡ районы Манһыр ауылында йәшәгән Мөжәүир хәҙрәт баҡый донъяға киткәс, 1970 йылдарҙа, Баймаҡ райкомының беренсе секретары исеменә Италияның Рим папаһынан хат-мөрәжәғәт килеп төшә. Ул Баймаҡ районы етәкселегенә лә тәғәйенләнгән була. Был хатта Италия руханиҙарының Мөжәүир хәҙрәтте белеүҙәре, донъя кимәлендәге бөйөк шәхес тип таныуҙары тураһында әйтелә һәм изге әүлиә Мөжәүир Уйылдан улы йәшәгән төбәкте һәм уның бөтә тирә-яғын, йөҙ километр радиус менән дәүләт ҡурсаулығы итеп һаҡлау кәрәклеге тураһында иҫкәртелә. "Һеҙҙең халыҡ бик мөғжизәле урында йәшәй. Ерегеҙ бай, тәбиғәтегеҙ хозур, халҡығыҙҙың киләсәге яҡты", - тиелә был русса яҙылған хатта.

"Тере сағында Мөжәүир әүлиәнең туған халҡы өсөн бөйөк ыҙа сигеүе булды", - тип яҙа Италия руханийы. Йәнә хатта ошондай юлдар була: "Мөжәүир әүлиәнең йәне ерҙән киткәс, изге рухы үҙе йәшәп киткән төбәккә генә түгел, бөтә планетаға бәрәкәт, именлек ебәреп ятыр..." Рим папаһы үҙенең был хатында изге дин әһеле йәшәгән ерҙәрҙе халыҡ күҙ ҡараһындай һаҡлаһын ине, тигән теләк белдерә.

✔ *Ҡырғыҙ башҡорттары - халҡыбыҙҙың айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Әгәр улар үҙҙәренең ысын тарихи этник берҙәйлеген башҡа милләт менән бәйләй икән - был, тимәк, үҙ тарихын белмәүе арҡаһында килеп сыға.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ҠЫРҒЫҘ, ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТ



Хәҙерге заманда ҡырғыҙ ырыуына ҡараған башҡорт варисҭары Башҡортостандың Илеш, Баҡалы, Краснокама, Туймазы, Шаран райондарында, Татарстандың Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Әлмәт, Баулы райондары ауылдарында йәшәй.

Бынан 100 йылдан ашыу әүәлерәк, 1917 йылда уҙғарылған Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығын иҫәпкә алыу материалдарына ярашлы, Бәләбәй һәм Бөрө өйәҙҙәре территорияһына ҡараған Ҡырғыҙ ырыуының 38 ауылында 30 меңгә яҡын кеше йәшәүе теркәлгән. Унан тыш, 1920 йылда Татар АССР-ы составына индерелгән 13 ауылда ҡырғыҙ ырыуына ҡараған аҫаба башҡорттар йәшәгәне билдәле. Әлеге ваҡытта Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәренә ҡараған ауылдар буйынса 1917 йылғы иҫәп алыу материалдары билдәһеҙ көйө ҡала. Шулай ҙа бында ошоға тиклем көн иткән халыҡ хаҡында башҡа документтар бар. Мәҫәлән, 1902 йылға ҡараған мәғлүмәттәргә ярашлы, Минзәлә өйәҙе Ҡырғыҙ олоҫонон Аҡтаныш, Иҫке Әлим, Яңы Әлим, Айыш, Кәзекей, Толнамас һәм Чуғанаҡ ауылдарында 6 000 самаһы аҫаба башҡорт теркәлгән. Бөгөлмә өйәҙенең шул уҡ Ҡырғыҙ олоҫо ауылдары Аҡбаш, Ҡараҡашлы, Ташлы һәм Ҡаразиректә тағы ла 4 500 самаһы башҡорт кешеһе теркәлә. Тимәк, 1917 йылда Ҡырғыҙ олоҫо ауылдарындағы башҡорттар һаны 40 меңдән дә кәм булмағанын раҫлап була.

Әлеге ваҡытта ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары араһында геногеографик тикшеренеүҙәр бик аҙ киммәлдә уҙғарылған. Шулай ҙа хатта ошо нигеҙҙә лә ҡырғыҙ башҡорттарының генофонд үҙенсәлектәре хаҡында билдәле бер һығымталар эшләргә мөмкинлек бар. 2014 йылда Е.В. Балановская етәкселегендә ойошторолған генетик материалдар йыйыу барышында Илеш һәм Баҡалы районына ҡараған ауылдарҙан ҡырғыҙ ырыуының 13 кешеһе ниндәй гаплотөркөмгә ҡарауы билдәләндә. Уларҙың күпселеге I-M253 гаплотөркөмө вәкилдәре булып сыҡты. Әйтергә кәрәк, был гаплотөркөмдөң айырым субкладтары (тармаҡтары) бәгзе бер башҡа башҡорт ырыуҙары кешеләрендә лә билдәле булды. Мәҫәлән, гәрәй ырыуына ҡараған башҡорттарҙа I1-M227, мырҙалар һәм тырнаҡлыларҙа I1-Z140 субкладтары осрай. Шуныһы ҡыҙыҡлы, юрматы ырыуына ҡараған Аҡбирҙин-Ишембаевтар нәҫелдәрендә, ҡайһы бер мең башҡорттарында ла ошо гаплотөркөм вәкилдәре бар икән.

- Ҡырғыҙ башҡорттары - халҡыбыҙҙың айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Әгәр улар үҙҙәренең ысын тарихи этник берҙәйлеген башҡа милләт менән бәйләй икән - был, тимәк, байтаҡ ҡына милләттәштәребеҙҙең үҙ тарихын ныҡлап белмәүе арҡаһында килеп сыға. Әтөп сығышы менән ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары араһынан булған бик күп милләттәштәребеҙ Башҡортостанда һәм Рәсәй кимәлендә билдәлелек һәм танылыу тапты. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: Суфиян Поварисов - БР халыҡ яҙыусыһы, Талип Нурҡаев - Советтар Союзы Геройы, Зиннур Мәрҙәнов - дипломат, Әғлә Күсемов - спорт йөрөшө буйынса күп тапҡыр донъя чемпионы, Фәнис Раянов - юридик фәндәр докторы, профессор, Урал Латыпов - Беларусь Республикаһының дәүләт эшмәкәре, Тимерхан Нәзмиев, Нәсифулла Зәйнуллин - Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, Иҙрис Кәлимуллин, Рәфил Нәбиуллин - БР халыҡ артистары, Ринат Хәйри - шағир, Фидан Мәрүәров - тыуған яҡты өйрәнеүсе, Ҡырғыҙ ырыуы ойошмаһы етәксеһе. Йәнә, ут күршебеҙ Татарстанда билдәлелек тапҡан халыҡ шағиры, дәүләт эшмәкәре Роберт Миннуллин һәм ТР ФА Тел, әҙәбиәт һәм сәнғәт институты директоры Ким Миннуллиндарҙың да ҡырғыҙ ырыуына ҡараған ауылдарҙа тыуып үҫкәнлектәре билдәле.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 15, 18-20-се һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

1942 йылдың июль айы. Көндәр аяҙ тора, эҫе, тирә-яҡ тын ҡалған, бер ниндәй һуғыш-ҡырылыш юҡ кеүек. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы эскадрондары Брянск фронтының Воронеж ҡалаһы йүнәлешендәге Алешки - Малые Борки - Святоша рубежында һөжүм итеп килеүсе гитлерсыларға ҡаршы алышҡа әҙерләнә. 2 июлдә дошман Набережное ауылы янында Олым йылғаһы кисеүе аша уң яҡ ярға сыға, был хәл 294-се полктың тылына һәм флангыһына оло хәүеф тыуҙыра. Полк командиры, майор Гәрәй Нафиҡов төнгә ҡаршы һөжүм итеп, йылға аша сыҡҡан немецтарҙы юҡ итергә ҡарар итә. Ошо маҡсатта ул ҡул пулеметсылары эскадронынан һәм автоматсылар взводынан торған махсус боевой төркөм ойоштороп, уның менән үҙе командалыҡ итергә була.

Июль төнө йылы, артыҡ ҡараңғы ла түгел. Көн эҫеһенән әлһерәгән тәбиғәт ял итә. Немец һалдаттары ла ҡаты йоҡоға талған, улар яҡында ғына сая башҡорт атлылары булыуын аңғарып етмәгән әле. Хатта төнгә һаҡсылар ҙа ҡуймаған улар. Нафиҡовтың боецтары, өлгөрөп етеп килгән арыш баҫыуы аша тын ғына үтеп, фашистарҙы өс яҡтан ҡамап алды. Төн тынлығын ярып, майор Нафиҡов командаһы яңғыраны: "Алға, бөркөттәрем! Дошманды дөмөктөрөгөҙ!" Көтөлмәгән һөжүмдән шаңҡыған немецтар әллә ни ҡаршылыҡ күрһәтә алманы: Курск ерендә, Набережное ауылы эргәһендә дошман һалдаттары һәм офицерҙарының 100-ҙән ашыу мәйете ятып ҡалды...

Был башҡорт атлыларының иң тәүге еңеүе булды, иртәгәһен ошо хәбәрҙе дивизияның барса командирҙары һәм яугирҙары ҡыуанып ҡабул итте. Тәүге уңыш һәр саҡ ҡанатландыра, яңы дәрт һәм ҡеүәт бирә. Еңеү хисен татыған һалдат күңелендә дошмандан ҡурҡыу юғала: уларҙы ла юҡ итеп була бит!

Бына ошо мәлдәге күңел күтәренкелеге дивизия политбүлеге начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадировтың хәтеренә һеңеп ҡалған:

"Немецтар яғында ваҡытлыса тынлыҡ урынлашыуҙан файҙаланып, ашнаҡсылар алғы һыҙыҡҡа ҡайнар аш килтерҙе. Бөтә часҡа билдәле булған 21 йәшлек мәргән наводчик Н. Аслаев:

- Һай, маладис та инде беҙҙең Шәйхетдин ағай! Фриц иҫен йыйырға өлгөргәнсе, һурпаһын боҫландырып, килеп тә етә. Хатта һылыу килендәренә алмаштырғыһыҙ - былдай тәмле ашты уңған хужабикә лә бешерә алмаҫ! - тип мәрәкәләй.

- Ашаһаҡ беҙ Шәйхетдин ағайҙың һурпаһын, күр ҙә тор фашистарҙың артҡа ҡарап юртҡанын! - тип, ҡалаҡ шылтырата башҡалар".

Беҙҙекеләрҙең ғәйрәте немец командованиеһын да һиҫкәндерә, улар алдарында ныҡлы көс торғанын һиҙә. Дошман бында яңы көстәр туплай, беҙҙең позицияларҙы бомбаға тотоу һәм артиллерия утын көсәйтеү яғын ҡарай. Немецтар һөжүме туктап ҡала, бер нисә көнгә тынлыҡ урынлаша.

5 июль таңы ата. Ҡуйы арыш баҫыуҙары өҫтөнән тыныс ҡыҡҡа йәйге ҡояш күтәрелә. Тирә-яҡ тып-тын, ҡоштар ҙа һайрамай. Атлылар окоптарҙа, улар уйсандар - үҙҙәренең тыуған төйәктәрен, ауылдарын, ошолай һыҙылып ҡына таң атыуын хәтерләйҙәрҙер. Майор Нафиҡов, утты-һыуҙы кискән командир, ошондай хәүефле тынлыҡтың юҡҡа түгеллеген күптән белә инде. Дошмандың яңы һөжүм әҙерләүе сер түгел уға. Ул эскадрондарға ялан телефонынан шылтыратып, әҙер торорға бойороҡ биреп бөтөүгә, тиҫтәләгән дошман самолеттарының яман геүләүе, иртәнге һиллекте боҙоп, ер өҫтөн хәүефкә сорнаны. Ҡолаҡты ярырҙай имәнес тауыш сығарып, ергә бомбалар яуҙы, туктауһыҙ шартлауҙарҙан ер ҡуптарылып, Дон тупрағы һауаға артылды, тирә-яҡты төтөн һәм туҙан баҫты.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔**1800 йылдың 26 сентябре -** Башҡорт халҡының данлыҡлы улы, шағир һәм яугир Салауат Юлаев Балтик диңгеҙҙең Рогервик крепосында (әле Эстонияның Палдиски ҡалаһы) 26 йыл һөргөндә булғандан һуң вафат була.

➔**1801 йыл -** Өфөлә типография асыла.

➔**1802-1849 йылдар -** Өфөлә Ырымбур граждандар губернаторы Т.С. Глазеноп башланғысы менән типография асыла. Ярты быуаттан ашыу ул кәнсәләр өсөн ҡазна ҡағыҙҙары баҫыу менән шөғөлләнә.

➔**1802-1849 йылдар -** күренекле механик, Рәсәйҙә пар менән идара ителеүсе тәүге тимер юлын төҙөгән М.Е. Черепановтың ғүмер йылдары. 1839 йылдың көҙөндә ул Пермдән Кама менән Волга буйлап судноларҙы буксирлаусы пароход төҙөү проектын тәҡдим итә.

➔**1802 йыл -** Уралдағы бөтөн заводтар Финанс министрлығының Тау департаментына буйһона.

➔**1802 йыл -** губерна идаралығы Ырымбурҙан Өфөгә күсерелә. Губерна менән ике идаралыҡ итеү үҙәге барлыҡҡа килә.

➔**1803-1817 йылдар -** Ырымбур генерал-губернаторы булып Григорий Семенович Волконский эшләгән йылдар. Неплюев хәрби училищеһына нигеҙ һалыу кенәз Волконскийҙың идеяһы була. 1817 йылдың 26 февралендә ул Дәүләт Советы ағзаһы итеп һайлана һәм Санкт-Петербургҡа күсерелә.

➔**1805-1806 йылдар -** Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашыу өсөн Ырымбур губернаһынан 500-әр кешелек 20 полк булдырыла. Уларҙың күбеһе һуғышта ҡатнашмай, ә Тильзит солохонан һуң Башҡортостанға ҡайтарылып, таратыла.

➔**1805 йылдың 18 апреле -** Илецк тоҙ промыслаһы төҙөлә.

➔**1811 йылдың апреле -** Франция тарафынан янауҙар сәбәпле, батша хөкүмәте башҡорттарҙан торған ике полк ойоштороу хаҡында махсус указ сығара.

➔**1812-1814 йылдар -** Ватан һуғышы. Унда Ҡаһым түрә етәкселегендәге 28 башҡорт полкы ҡатнаша һәм рус ғәскәрҙәре менән Парижға бәреп инә.

➔**1812 йылдың апреле -** Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашыу өсөн тәғәйенләнгән башҡорт полктары Һамар аша Мәскәүгә юллана.

➔**1814 йыл -** Париждан ҡайтышлай, башҡорт атлылары вәкилдәре Веймар ҡалаһында (Германия) бөйөк немец шағиры һәм ғалимы Гете менән осраша һәм уға йәйә менән уҡ бүләк итә.

➔**1816 йылдың 15 майы -** Ғәли йәнәптәре Александр I Бөйөк Ватан һуғышында рус армияһын 4 139 баш ат менән тәьмин иткән өсөн башҡорттарға һәм мишәрҙәргә рәхмәт белдерә. Телеграмма Ырымбур генерал-губернаторы исеменә ебәрелә.

➔**1816 йыл -** билдәле сәйәхәтсе һәм зоолог, "Ырымбур крайының тәбиғи тарихы" китабы авторы А. Эверсманн Златоуст тау округын өйрәнә башлай. 1820 йылдан Ырымбур крайы буйынса ентекле тикшеренеүҙәр алып бара.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Тағы нисә йыл башҡорт кейемен тергеҙеүҙе аҡсаһыҙ пенсионерҙарға, ағинәйҙәргә тапшырып, тыныс ҡына "Милли кейем байрамдары" үткәреп ултырырҙар икән? Ғәрлек түгел микән аҡса өҫтөндә ултырған министрлыҡтарға?*

# ”СЕЛТӘР”

## милли кейемебеҙҙе

**Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ ижады үҙәге эргәһендә "Селтәр" башҡорт милли кейеме студияһы ойошторолоуға биш йыл. Ошо арала "Урал" галереяһында был ижади төркөм ағзаларының ҡул эштәре күргәҙмәһе булып үтте. Студияның ойоштороусыһы һәм етәксеһе Гөлгөнә Баймырҙина өсөн был "бик өмөтлө һәм булдыҡлы оҫталарҙың йыйыны, уларҙы берләштергән уй-маҡсат изге: башҡорт милли кейемен тергеҙеү". Биш йыллыҡты йомғаҡлау күргәҙмәһенән һуң "Киске Өфө" гәзите редакцияһына студия ағзалары Фатима ХӘЙРЕТДИНОВА менән Әлфиә ӘХТӘРИЕВАны саҡырып, әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Башҡорт ҡатындары башлыса көмөш таҡҡан, сыңлап торған көмөш аҡсаны тишеп, сәсмәү, ҡашмау, елән, камзул, хәситә, дәүәт, гәләбаш, һағылдырыҡ теҙеп һаған. Башҡорттоң сулпыһы, ҡәмәре (ирҙәр ҡайышы), ҡаптырмаһы һ.б. көмөш тәңкә һәм көмбәҙҙәр менән биҙәлгән. Көмбәҙ махсус эшләнгән - уға ырып аяттар, теләк-алғыштар, хатта исем-тарихтар теркәлгән. Элекке шикелле шау көмөштән булған кейем өлгөләрен бөгөн дә эшләргә мөмкин, бары тик шундай ҡиммәтле биҙәүестәр генә ысын иғтибарға лайыҡ була ала. Был фекер менән килешәһегеҙме?**

**Фатима Хәйретдинова:** Әлбиттә, шулай. Тик бөгөн мәсьәлә ҡатмарлыраҡ: биҙәүес яһар өсөн тейешле гәрәбә, ынйымәрйен, көмөш тәңкәләр табырмын тимә. Тәүге мәлдә бына шундай материалдарҙы тапмай бик аптырандыҡ. Мәрйендәрҙе Мәскәүгә барып алдыҡ, Каховка метроһында 11 ҡатлы баҙар бар, шунда боронғо биҙәүестәргә яҡын сифатлы ҡортбаш, гәрәбә, мәрйендәр осрай. Силәбенән Акулов тигән оҫта ла килтереп һата, уның мәрйендәре күпкә ҡыйбат, ләкин уныҡы ысын мәрйен, уҡа-позументтары, француз яулыҡтары ла бар... Ышанабыҙ, ул башҡорт милли кейемен ярата, башҡорт биҙәүестәре, кейемдәре менән ихлас ҡыҙыҡһына, бик күп белә, беҙгә аңлата, ярҙам итә.

Башҡорт милли кейемен һәм биҙәүестәрен тергеҙеүсе оҫталарҙы тейешле материал менән тәьмин итеүҙә республиканың Еңел сәнәғәт министрлығының, Сәнәғәт палатаһының да ярҙамы мотлаҡ кәрәк. Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ ижады үҙәге генә был мәсьәләне хәл итә алмай. Бер дөйөм үҙәкләштерелгән урын булһын ине ул. Ниндәй материал кәрәк, шунда тупланыр ине, беҙгә кәрәкле нәмәләрҙе һатыусылар үҙҙәре килтереп ауҙарыр ине, хаҡы ла арзанырыҡ булыр ине.

**Әлфиә Әхтәриева:** Ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ һымаҡ тойолған, әммә хәл ителмәгән проблемалар бик күп, шуға ла Башҡортостанда этнографик кейемдәрҙе тергеҙеү бик ауыр бара. Быны мин үҙемсә былай тип аңлайым: быуындар бәйләнеше өҙөлгән, бөгөн милли кейем кейергә теләгән һәм уны тегергә тотонған быуын ул кейемде төп нөсхәһендә бөтөнләй күрмәгән, йәғни хәҙерге йәштәрҙең генә түгел, хатта урта быуындың да ата-әсәһе лә, өләсәй-олатаһы ла милли кейемде бөтөнләй киймәгән. Беҙҙең быуын - 1950-1965 йылғылар. Башҡорт кейемен сәхнәләрҙә, кинола, театрҙа, музейҙа ғына күрҙек. Кемдәрҙәлер өләсәйҙәрҙең бер-ике тәңкәһе, сулпыһы, иҫке камзулы йә еләне ҡалғайны. Улары ла әрһеҙләнеп ятты, йә сүплеккә ташланды.

**Башҡорт ҡатындарының көмөш биҙәүестәре йөк-йөк итеп хөкүмәткә тапшырылған, йә трактор, йә танк төҙөү өсөн йыйып бирелгән бит инде ул... Рәссам-дизайнер Роза Рафиҡ ҡыҙы Юлдашбаева әйтмешләй, Башҡортостанда айырым "Оҫталар мәктәбе" булһа, исмаһам, милли кейемдәребеҙҙе дөрөҫ эшләргә өйрәнер инек. Бөгөн үткәрелгән оҫталыҡ дәрестәре үҙҙәрен бик аҡламай, улар бары тик башланғыс өлгө-үрнәк була ала. Ҡыҙыҡ, Сыуашстанда сигеү сәнғәте буйынса тотош институт эшләй, йөҙәрләгән китап-әсбаптар баҫтырылған. Татарстанда ла нағыштың, сигеүҙең ниндәй генә төрҙәрен өйрәтмәйҙәр, ҙур-ҙур курстар эшләй, альбом-каталог-дәреслектәр бар. Ҡаҙағстан менән Үзбәкстан сәнәғәт кимәлендә милли биҙәктәрен күрһәтеү, таратыу, ҡулланыу менән байып-кинәнеп йәшәй. Ә ниңә тап беҙҙә, Башҡортостанда, әллә күпме төрлө, ҡыҙыҡлы, кәрәкле башҡорт сигеү-ҡайыу-нағышы (беҙҙә был кәсептең ундан артыҡ төрө бар!) була тороп, был шөғөл шул хәтле артҡа ташланған, юғалтыу һәм юҡҡа сығарыу сигенә еткерелгән?**



**Әлфиә Әхтәриева:** Мин үҙем Ҡаҙағстанда тыуып-үҫтем. Чимкент өлкәһендә бөтә халыҡ милли кейемдә йөрөй. Йәше лә, ҡарты ла этнографик кейемде белә һәм кейә. Һәм 2000 йылдарҙа Ҡаҙағстанда "Ҡаҙаҡ халыҡ кейеме" көнө иғлан ителгәс, һатыусы ла, уҡытыусы ла, ғалимдар ҙа, илдең етәкселәре лә ҡаҙаҡса кейенеп йөрөнө... Ни өсөн шулай анһат хәл ителә был һорау? Сөнки улар үҙҙәренең кейеме менән бала саҡтан таныш: һәр ҡайһыһы уны өйөндә булһа ла кейә. "Ҡаҙаҡ кейеме байрамы" тәү башлап Ҡаҙағстанда үтте, шунан был башланғысты Татарстан, Сыуашстан, Удмуртия күтәреп алды, тағы ла әллә ҡайҙарҙа гөрләп үтә бындай байрамдар. Һәр урында ул саралар республикаға исем биргән халыҡтың атамаһы менән бергә исемләнә.

Ә беҙҙә, Башҡортостанда, хәл икенсерәк. Тәүге тапҡыр милли кейем байрамы 2016 йылдың июль айында үтте, ул "Башҡорт кейеме көнө" тип иғлан ителде. Икенсе йылда ул йәнә ойошторолдо, тик ни өсөндөр исеме "Милли кейем байрамы" тип үҙгәртелде. Өсөнсө йылда ла ул "Милли кейем байрамы" булып ҡалды. Ниңә ул сара Башҡортостанда "Башҡорт кейеме байрамы" исеме аҫтында үтә алмай? Беҙ тағы ҡайҙа барып үткәрә алабыҙ бындай байрамды? Бөтә донъя фольклориадаһына арнаптыр инде, быйыл да ике "Милли кейем байрамы" үткәреләсәге иғлан ителгәйне. Тағы төшөп ҡалды "башҡорт" тигән һүҙ. Пандемияға бәйле, был сараның беренсеһе апрель башында онлайн үтте. Иғтибар иттегеҙме икән: ул бит ойоштороусылар ихтыярынан тыш тап беҙ теләгәнсә, "Башҡорт милли кейеме" байрамы төҫөн алды, сөнки унда башҡорт милли кейеме өлгөләрен һынландырған сығыштар, фотоһүрәттәр, видеолар өҫтөнлөк итте. Тимәк, ошо **Хөкүмәт кимәлендә билдәләнгән байрамдарҙың береһе мотлаҡ "Башҡорт милли кейеме" тигән баш аҫтында үтергә тейеш!**

**Республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары көсө, аҡсаһы, хәстәрләүе менән урындарҙа милли башҡорт кейемен тергеҙеү буйынса эш күптән бара. Ысынында, республикала был эште улар башланы ла инде. Тергеҙеү тарихи дөрөҫлөк, художестволы зауыҡ һәм сама белеү тигән төп принциптарға нигеҙләнә. Әле ағинәйҙәр "Хаталар өҫтөндә эш" акцияһы иғлан итте, маҡсат - һәр ырыу, һәр төбәк үҙенә хас булған, үҙенсәлектәре һәм эшләнеше традицияға тура килгән кейемдәрҙе әҙерләһен, белһен, таратһын!**

**Фатима Хәйретдинова:** Был бик урынлы һәм дөрөҫ эш: тик һәр ырыуҙың костюмын белгестәр, ғалимдар, рәссамдар, сәнғәт белгестәре, тарихсылар бергәләп раҫлаһын ине. Йәки Өфөләге оҫталарға төбәктәрҙәге белгестәр һәм оҫталар менән бәйләнеш тотоп, аҡса бүлеп һәм ваҡыт биреп, һәр ырыуҙың кейемен әҙерләргә ҡушырға була, шул саҡта "Башҡорт кейеме байрамы" ырыуҙарҙың өлгөлө кейемдәрен күрһәтә алыр ине.

Беҙҙең "Селтәр" студияһына ла пенсия йәшендәге, төрлө һөнәр ҡатын-ҡыҙҙары йөрөй. "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы ағзалары кеүек үк, бөтә сығымдарыбыҙҙы бары тик үҙ кеҫәбеҙҙән ҡаплайбыҙ. Тауарын да алабыҙ, биҙәүескә кәрәк-ярағын да... Ҡайһыларыбыҙ тәүҙә энә лә тота белмәй ине, яйлап милли биҙәүес эшләргә өйрәндек. Аяныс һәм көлкө хәл был: тағы нисә йыл башҡорт кейемен тергеҙеүҙе аҡсаһыҙ пенсионерҙарға, ағинәйҙәргә тапшырып, тыныс ҡына "Милли кейем байрамдары" үткәреп ултырырҙар икән? Ғәрлек түгел микән аҡса өҫтөндә ултырған министрлыҡтарға? Еңел сәнәғәт министрлығы, Сәнәғәт палатаһы һәм тағы әллә күпме учреждениелар башҡорт мәҙәниәте үҫешенә тейешле өлөш индерергә тейеш түгелме икән ни? Документтарҙа һәм отчеттарҙа барыһы ла барҙыр, ә ысынында - "король шәрә!" Ысынында, беҙҙә башҡорт милли кейеме Хөкүмәт кимәлендә тергеҙелмәй!

**Әлфиә Әхтәриева:** Беҙҙә милли кейемде тергеҙеү юҡ, тиһәң, ҡайһы берәүҙәр сәсрәп ҡаршы сыға. Ана, сәхнә тулы милли кейем, тиҙәр. Ләкин сәхнәләге - ул сәхнәләгесә, күберәк стилләштерелгән кейемдәр. Беҙгә кисекмәҫтән башҡорт милли кейемен төп нөсхәһендә тергеҙеү эшенә тотонорға кәрәк. Әлегә был эште, эйе, республика ағинәйҙәре генә алып бара.

**Фатима Хәйретдинова:** Республика Халыҡ ижады үҙәге беҙгә, Өфөләге берҙән-бер "Селтәр" студияһына, бөтә был эштәрҙе алып барырға бер нисек тә ярҙам итә алмай - ни аҡса юҡ, ни йыйылырға урын юҡ. Шәһит Хоҙайбирҙин музейында йыйыла торғайныҡ, ремонтҡа ябыла тип, бүтәнсә индермәнеләр. Һирәкләп Кустарный урамындағы Мәҙәниәт йортона йыйылабыҙ, тик беҙ хужа ла түгел, ҡунаҡ та түгел, бер кемгә кәрәкмәгән муйнаҡ хәлендәбеҙ. Ун квадрат метрлы ғына бер аулаҡ бүлмәбеҙ булһа, исмаһам, шул да етер ине. Ә бит берәй тантана булһа, беҙҙе эҙләй башлайҙар. Бөтә ҙур ҡунаҡтарҙы ҡаршылайбыҙ, балалар менән осрашыуҙарға, яҙыусыларҙың ижад кисәләренә, китапханаларға, хатта яҡын-тирә район ауылдарына сығып китәбеҙ - үҙ аҡсабыҙҙы түләйбеҙ, машина булмаһа, такси яллайбыҙ! Бер ниндәй ярҙамһыҙ күпме йөрөп була? Күреп-ишетеп торабыҙ, күп райондарҙа мәҙәниәт йорттарында, китапханаларҙа "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларына айырым бүлмәләр бүленгән. Беҙ ҙә бик ҡыуаныр инек ундай махсус йыйылыр урыныбыҙ булһа. Мәҙәниәт йорттарында, "Торатау" Конгресс-холлында ла урындар етерлек - баш ҡалала берҙән-бер юҡтан бар булған башҡорт кейеме "Селтәр" студияһы өсөн берәй бүлмә бүленергә мөмкиндер бит?

**Ағинәйҙәр бөгөн "Хаталар өҫтөндә эш" алып бара, тинек. Һеҙ беҙҙең милли кейемдәрҙә ниндәй хаталар күрәһегеҙ?**

**Әлфиә Әхтәриева:** Өфөгә беҙ, башҡорт тигән боронғо халыҡтың төрлө ырыуы кешеләре, төрлө яҡтан, төрлө төбәктәрҙән йыйылғанбыҙ. Һәр кемебеҙҙең ырыуыбыҙға хас үҙ кейем үҙенсәлектәре бар. "Селтәр" студияһына йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар ҙа төрлө ырыу вәкилдәре һәм милли кейем тураһындағы күҙаллауыбыҙ ҙа айырыла. Беҙ тәүҙән үк ошо үҙенсәлектәрҙе өйрәнеүгә тотондоҡ. Был ифрат та ҡыҙыҡлы һәм ижади эш булды.

Мин телевизорҙы һирәк ҡарайым. Йыш ҡына ирем зәңгәр экран янына саҡыра: "Кил! Һинең әбейҙәреңде күрһәтәләр!" Милли кейем кейгән башҡорт ҡыҙҙары, инәйҙәре аҡыллы итеп сығыш яһай, дәртле итеп бейей, моңло итеп йырлай, иманлылыҡ-тәүфиҡ йөҙҙәренә сыҡҡан. Ләкин бер нәмә күңелде ҡыра: кейемдәре! Уларҙың ҡайһы берәүҙәре башҡорт милли кейемен шул хәтле боҙоп, сыбарлап, бутап кейә. Саҡ ҡына ла музейҙарҙағы өлгөләргә, китаптарға күҙ һалмайҙар микән?

**✓ Типтәрҙәрҙең бер өлөшө башҡорттарға тартылһа, уларҙың күпселеге татарҙар составына инеп, һуңынан Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәре аҫаба башҡорттарының ассимиляцияға бирелеүенә юл аса.**



Телеэкранға сығарыр алдынан уларҙы бер кем тикшермәй, кәңәш итмәй, иләктән үткәрмәй, күрәһең. Ә телевидение аша бөтә гәмгә күрһәтеп, улар күпме кешенең зауҡын боҙа, башын бутай, халыҡтан көлдөрә! Был хәлде мин үҙ милләтемдә хөрмәт итмәү тип ҡарайым. Милли кейемгә изге нәмә тип ҡарамауҙан был. Беҙ нимәгә изге тип ҡарайбыҙ? Тәбиғәткә, йырҙарыбыҙға, ҡурайға, аттарыбыҙға, шәжәрәбеҙгә, эпостарыбыҙға, ләкин беҙ милли кейемебеҙгә изге тип ҡарауҙы онотҡанбыҙ, сөнки тамғаларыбыҙҙы, орандарыбыҙҙы ла онотҡанбыҙ. Беҙ тыуған тәбиғәткә изге тип ҡарайбыҙ. Ерҙе һөрәм, сәсәм-урам, тип шапырынмайбыҙ, ерҙе яратам, һаҡлайым, яҡлайым, тип йән атабыҙ. Тау-һыуҙарыбыҙҙың именлеген ҡайғыртабыҙ, телебеҙҙе һаҡлайбыҙ, йырҙарыбыҙҙы боҙмайбыҙ, эпосыбыҙҙы ятлайбыҙ, шәжәрәбеҙҙе өйрәнәбеҙ, ҡурайыбыҙҙы яҡлайбыҙ. Әлхәмдүлиллаһ, шулай булырға тейеш, ә нинә милли кейемдәребеҙҙең төп нөсхәһендә тергеҙелеүенә битарафбыҙ? Быуаттар буйы уйланған һәм һаҡланған биҙәктәребеҙ баяғы тамғаны ла, тарих-шәжәрәне лә, йыр-моңдо һәм милли зауыҡты ла сағылдыра бит, ә уларҙы **"уңған һәм булдыҡлы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һаҡлап ҡалған"** (ошо хаҡта ғалим Круковский 1901 йылда уҡ әйткән).

Бөгөн беҙгә милли кейемдәребеҙҙе, биҙәүестәребеҙҙе өйрәнергә юл **яныңдағы "Урал" галереяһында милли кейем буйынса конкурстар, конференциялар уҙып тора. 2008 йылда Өфөлә "Селтәр" башҡорт сәхнә кейеме фестивале үтте, унда баш ҡаланан һәм төрлө район-ҡалаларҙан башҡорт сәхнә кейемен тегеү менән шөғөлләнгән утыҙҙан ашыу ателье һәм студиялар ҡатнашты. Икенсе "Селтәр" фестивале республика Милли музейында үтте (2011). Артабан Мәсетле районында "Һомай" башҡорт милли кейемдәре фестивале (2014), Өфөлә "Гөлстан" башҡорт милли кейеме фестивале (2019) булып уҙҙы. Бындай йүнәлештәге конкурстар "Торатау" Конгресс-холында үтеп тора (2019). Ләкин студияларҙың эше күренмәй, ни өсөн?**

**Әлфиә Әхтәриева:** Яуап бик ябай. Беҙҙә бер төптән эшләү, ғилми үҙәкләштереү булмаған, тырым-тырағайлыҡ, дилетантлыҡ, башбаштаҡ күренештәре тулып ята. Дизайнерҙар кемуҙарҙан "ижади осош" өсөн ярыша башлай, әйтерһең дә, улар өсөн "башҡорт милли кейемдәре - заман шауҡымдары менән тултырып ҡыуыҡ осора торған ярыш, уйын майҙаны". Кейемде тергеҙеүҙәге төплө халыҡсанлыҡ - традиция ҡиммәттәре, тарихи дөрөҫлөккә тура килгән эстетик зауыҡ һәм бөгөнгө көн талабына яуап бирерлек сама белеү тойғоһо онотола. Ә тап шулар һәр бер яңы өлгөнө замандаштарға күрһәтерлек итергә маны табыуға иң ышанаслы сара булып тора.

**Фатима Хәйретдинова:** Ырыуҙарҙың кейемен тергеҙеү һәр оҫтанан башлана: күрәләтә боҙоу, бутау, сыбарлау, халыҡтың башын әйләндереүгә юл ҡуйылмаһын ине. Бигерәк тә яңы өйрәнергә тотонған ҡайһы берәүҙәр бер-ике рәт кенә мәрйен теҙә лә алюмин тәңкәләр тегә һала һәм шул ярты-йорто мәғәнәһеҙ эшен "башҡорт биҙәүесе", "башҡорт һаҡалы" тип иғлан итеп, башҡаларға һатырға-таратырға ашыға. Ундай "оҫталарға" әйтер инем: ашыҡмағыҙ, белер-белмәҫ, тулыр-тулмаҫ "биҙәүестәр" менән бөгөнгө йәштәрҙең һәм ысын этнографик кейемгә ынтылғандарҙың юлын ҡыймағыҙ, күҙен быуmағыҙ. Белгестәр йәки зауыҡлы кешеләр аңлатып йә үтенеп әйтә тороп та, һаман халыҡҡа үҙ ярты-йорто эшен "башҡорт биҙәүесе" тип тағырға маташҡандарҙы туҡтатырға кәрәк.

**Әлфиә Әхтәриева:** Эшләһәгеҙ, бик хуп, тик башта бик ентекләп өйрәнеп, белгестәр менән, китаптар менән кәңәшләшеп, шунан ғына ерәнә еткерелгән һаҡал йә селтәрҙе халыҡ алдына сығарығыҙ, тиер инем мин ундайҙарға. Зинһар, арзан ҡытай тәтәйҙәре һатҡан "алыпһатарҙар" кеүек ҡыланмағыҙ. Һеҙ бик ҙур эш башлағанһығыҙ - **"төрки халыҡтар араһында иң бай, иң төрлө, иң мәғәнәле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейемдәрен"** (Сергей Руденко һүҙҙәре, 19-сы быуат) тергеҙеү

# САҢ ҠАҒА:

## төп нөсхәлә тергеҙәйек!

асылғайны, башланды ығы-зығы: телә нинде материал, килешмәгән-булмаған биҙәктәр һәм деталдәр, уйлап сығарылған биҙәүестәр! Туктағыҙ, тәүҙә ентекләп-төпсөрләп өйрәнегеҙ, шунан "башҡорт биҙәүесе", "башҡорт кейеме" тип кешегә күрһәтерһегеҙ, тиһәм килә. Шундай ҙа дорфа "оҫталар" табылды, нинә улай боҙоп эшләйһең йәки булмағанды тегәһең, тиғән шелтәгә бик йәтеш яуап табалар: "Был - минең фантазия, ижади осош, ҡамасаулама!" Ә нинә тап башҡорт милли кейеме хәҙер килеп нинде йәйҙер баламуттарҙың ижади эксперимент майҙанына әйләнеп китергә тейеш? Бер халыҡтың да кейеменән шул хәтле көлмәйҙәр, уны үҙгәртеп, төрләсә өҫтәп-шапыртып, аҙағынан, "был - милли, мин шулай хәл иттем, интуициям, хыялым, фантазиям", тимәйҙәр. Ундай эштәрҙең урыны - махсус фәнтәзи дизайнер конкурстарында, ә этнография менән бәйле урында түгел. Йәнегеҙ нисек телә, шунса фантазия ҡороғоҙ, ләкин һәр бер "яңы асыш"ты башҡорт кейеменә таҡмағыҙ. Барыһы ла томаналыҡтан, битарафлыҡтан килә. Һәммәһе лә беҙҙә башҡорт кейемен кәмһетеү, аңламау, хөрмәт итмәү хаҡында һөйләй. Башҡортостанда хәлдәр шулай, ҡыҙғаныс ҡаршы.

**Әлбиттә, беҙ тикшергән мәсьәлә Мәҙәниәт министрлығының иғтибарынан бөтөнләй үк ситтә тип әйтеп булмай. Халыҡ ижады үҙәге** тейеш бит. Әгәр кейем йәки биҙәүес беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙа нинде йәйҙер эске ытырғаныу, аңлашылмаған һораҙар, екһенеү һәм ышанмау хисе уята икән, уларҙы кешегә тәҡдим итеү - хилафлыҡ.

**Күптән түгел Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының яңы күрһәтмәләре республика район һәм ҡала мәҙәниәт бүлектәренә таралды: милли кейем, милли тәрбиә һәм халыҡ йолалары тергеҙгән ағинәйҙәрҙең эшен, фольклор төркөмө булараҡ сығыштарын урындағы мәҙәни тормоштан айырмаҫҡа, бергә алып барырға, уларға юл һәм ойоштороу сығымдарында ярҙамлашырға ҡушылды.**

**Әлфиә Әхтәриева:** Милли кейемде тергеҙеүселәрҙең тағы бер ҙур теләге бар. Белем етешмәй, уҡыу етешмәй беҙгә. Китаптар етешмәй. Шитованың китаптарын табырлыҡ түгел, район китапханаларында булғаны күптән айырым кешеләргә таралып бөткән. "Киске Өфө" гәзите бындай китаптарҙы башҡортсаға ауҙарып баҫтыра, ләкин гәзит варианты ғына бик аҙ. Тимәк, беҙ китапһыҙ, компасһыҙ, ғалимһыҙ томаналар хәләнә ҡалып барабыҙ. "Китап" нәшриәте милли кейемдәр буйынса киң халыҡҡа таратырлыҡ унайлы һәм арзанлы китапсыҡтар сығарһын ине лә бит. Шитованың китабы яңынан баҫылһын ине. Сөнки тап ғилми баҫмалар ғына һәр кем ынтылған тарихи дөрөҫлөктө, традицион юлды, зауыҡты һәм са-

дәүеренә аяҡ баҫҡанһығыҙ. Болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотҡандай, әлегә был эшкә төплө дәүләт ҡурсыуы, яуаплы етәкселәр, эрудициялы белгестәр, ентекле ғалимдар, каталоглы китаптар етешмәүҙән файҙаланып, тишек бер тин аҡсаға алданып, башҡорт биҙәүестәрен теләһә ҡалай эшләүгә тотонған кешеләрҙе үрсетмәгеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормош үҙгәрмәй тормай, бында әйтелгән фекерҙәр күптән йәшәй, һәр кемдең күңелендә, теленде был теләктәр йыйылған, хатта Хөкүмәт етәкселәре, Мәҙәниәт министрлығы етәкселәре лә быны күрә. Сәхнә кейеме һәм стилләштерелгән кейемдәр үҙ яйына заман талабына ярашлы эшләнә. Ә беҙ традицион кейемдәрҙе дөрөҫ тегеү, башҡорт биҙәүесе тиғән талапҡа яуап бирерлек һаҡал, селтәр, яға һәм башҡа биҙәүестәр эшләү тураһында һүҙ алып барабыҙ. Башҡорт ҡалпағы, һарыуысы, таҫтары, еләне, камзулы һ.б. хаҡында төплө мәғлүмәтле ысын оҫталар менән осрашҡыбыҙ килә, уларҙың эштәрен ил менән бергә баһаларға, бергә шатланырға, байрам итергә ниәтләйбеҙ. Мәҙәниәт министрлығы ағинәйҙәрҙең "Хаталар өҫтөндә эш" тигән хәрәкәтен хуплап ҡаршы алды. Республикала милли башҡорт кейемен тергеҙеүҙе изге эш тип һанау, был эшкә яуаплы ҡарау торған һайын көсәйә. Тик был хәрәкәт ҡулы эш белгән оҫталар төркөмөн "Оҫталар мәктәбе"нә берләштереп, дөрөҫ йүнәлеш кенә алырға тейеш.**

**Сәрүәр СУРИНА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

*Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ*



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Әлбиттә, 1855 йылда Ырымбур, Һамар, Вятка һәм Пермь губерналарында иҫәпкә алынған 93 895 типтәр (ир-ат енесенән) араһында башҡорттарҙан башҡа татарҙар һәм сыуаштар ҙа була. Әммә колонизация дәүеренә тиклем башҡорт типтәрҙәре бер төрлө социаль-этник категорияға ҡараған. Башҡортостанға Волга буйы халыҡтары күпләп күсенә башлағас, типтәрҙәр төрлө этник сығышлы социаль төркөмгә әйләнә. 1855-1865 йылдарҙа кантон идаралығы ҡарамағына типтәрҙәр ҙә индерелә, әммә кантон системаһы бөтөрөлгәс, улар феодаль бәйлелеге һаҡланған крәҫтиәндәрҙең социаль-этник төркөмөн барлыҡҡа килтерә. Билдәле сәбәптәр арҡаһында татар типтәрҙәре татар милләтенә, фин телләләре - мари, мордва, удмурттарға ҡушылырға ынтыла. Башҡорт сығышлы типтәрҙәрҙең бер өлөшө башҡорттарға тартылһа, уларҙың күпселеге татарҙар составына инеп, һуңынан Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙҙәре аҫаба башҡорттарының ассимиляцияға бирелеүенә юл аса.

Үткән замандарҙа башҡорт йәмғиәтенең ижтимағи тормошо тураһында бер ни ҙә белмәгән тикшеренеүселәр башҡорт типтәрҙәрен ("тептяры из башкир") этник башҡорт сығышлы итеп ҡарамайынса, башҡорт сословиеһына ҡусҡан, йәғни хоҡуҡтары һәм бурыстары буйынса башҡорттарға тиңләнгән татар һәм башҡа халыҡ төркөмдәре, тип фаразлай. Шул уҡ ваҡытта 1855 йылда Башҡорт ғәскәренә йәлеп ителгән типтәр төркөмдәре документтарҙа айырым асыҡ итеп татар типтәрҙәре, сирмеш (черемис) типтәрҙәре, сыуаш типтәрҙәре, башҡорт типтәрҙәре тип теркәлгән. Кантонлыҡ осороноң һуңғы ун йылында ғына типтәрҙәргә башҡорт сословиеһында хас булған бурыстар йөкмәтелә.

Көнбайыш Башҡортостанда этнос-ара процестарға көслө йоғонто яһаусы факторҙар булыуы Минзәлә, Бөгөлмә, Алабуға һәм Сарапул башҡорттарының татарҙар менән яҡынлашыуына һәм, һуңғы сиктә, улар тарафынан йотолоуына килтерә. Ошо факторҙарҙы ғилми күҙлектән ҡарап үтәйек.

Беренсенән, көнбайыш башҡорттары һәм татарҙар араһында барған этник процестар үҫешенә уларҙың тел һәм мәҙәни-көнкүреш мөнәсәбәттәре яҡынлығы булышлыҡ итә. Лингвистар башҡорт телен төрки телдәрҙең ҡыпсаҡ төркөмөнә индерә, татар теле уға иң яҡын телдәрҙән һанала. Башҡорт теле татар теленән өндәрҙең консонантлығы һәм лексикаһы яғынан айырыла. Көндәлек аралашыуҙа ошо халыҡ вәкилдәренә тәржемәсе кәрәкмәй. Элек-электән башҡорт мәктәпләрендә һәм мәҙрәсәләрендә уҡытыу Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Кавказда, Волга буйында һәм Уралда китап һәм эш алып барыу теле булараҡ киң таралған "төрки" телендә алып барылған. Һуңғы осорҙа "төрки" яҙма теле татар теле менән алмаштырыла. Ошо шарттарҙа Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул башҡорттарының теле татар теленә яраҡлаша башлай, ә XIX быуат аҙағынан тулыһынса тиерлек ассимиляцияланыуға дусар була. Шул заманда йәшәгән башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының, мәҫәлән, Ҡол Ғәли, Тажетдин Ялсығол, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулланың әҫәрҙәре лә ошо телдәрҙә ижад ителә һәм халыҡ араһында тарала.

Татар телендә уҡытыу һәм татар телендә баҫылған әҙәбиәт, һан яғынан күбәйә барған татарҙарҙың ошо территорияла башҡорттар менән тығыҙ аралашып йәшәүе менән ҡуша килеп, Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙе башҡорттарына татар мәҙәни сифаттарын һеңдерә бара. Көнбайыш башҡорттарының этник үҙаңы ике төрлөгә әйләнеп, аҙаҡҡа табан уларҙың татарҙар тарафынан тулыһынса ассимиляцияланыуына килтерә.

**(Дауамы бар).**

***✓ Әҙәйемдең бер һүҙе булды: "Яңы айҙың тыуып, ун биштәренә тиклем башҡарылған эштәр хәйерле була, тиҙәр", ти торғайны. Иң яҡшыһы - өйлә ваҡытына тиклем килһендәр. Шул мәлдә Бәрәкәт ишектәре асыҡ була, ти.***



*ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ*

# КӘҢӘШ ТУЙЫ

***(Боронғолар мәктәбенән)***



## 1-се күренеш

*Сәхнәлә хужа һәм хужабикә. Ире гәзит уҡый. Ҡатыны тәңкәле түшелдереген кейеп, көҙгө алдында улай-былай әйләнә.*

**Хужа:** Кемгә әҙерләйһең быларҙы?

**Хужабикә:** Аллаһы бирһә, ҡыҙыбыҙҙың туйында кейәсәкмен.

**Хужа:** Һе, уныһы әле кейәүгә лә сыҡмаған.

**Хужабикә:** Никах һыуы ҡалҡһа, сығыр әле.

**Хужа:** Йәше утыҙға еткәсме?

**Хужабикә:** Үҙең килгән-киткән ҡоҙаларҙы "Зат!" тип кире бороп торғас, бөтөнләй сыҡмауы ла бар.

**Хужа:** Шәжәрә буйынса нәҫелдәштәргә ғаилә ҡороу тыйыла. Үҙең белмәгән ни эш. Күрше ауылда ике туғандар өйләнешеп, ниндәй балалар тыуғанын белмәйһеңме ни...

**Хужабикә:** Аллам һаҡлаһын. Ана, күршенең ҡыҙы кейәүҙе йыраҡтан етәкләне лә алып ҡайтты. Йәшәне лә киттеләр.

**Хужа:** Күршеңдең хәлен ситтән һора, ти. Бер ай ҙа тормай, айырылышҡандар.

**Хужабикә:** Һм? Нишләп икән?

**Хужа:** Мәһәргә ҡыҙ машина һораған. Ә егет кредитҡа машина бүләк итергә теләмәгән.

**Хужабикә:** Үәт заман. Ҡайһы бер ҡыҙҙар ҙа иҫәп менән кейәүгә сыға. Ундайҙар үҙҙәрен тауар урынына ҡуя.

**Хужа:** Әйтмә инде. Никах туйына ла айырым күлдәк, йә машина һорай. Яңылышҡан ҡыҙ, ай, яңылышҡан. Хәйер, һәр ата-әсә балаһының бәхетле булыуын теләй.

**Хужабикә:** Әҙер мал менән бәхет буламы инде.Үҙҙәре табып, үҙҙәре ҡапһын! Ҡыҙ бала, хәсрәткәйем, тәүҙә үҙен батша егетенә барырҙай итеп тоя. Йәше үтә барған һайын, үтмәҫ тауар кеүек хис итә. Ҡыҙыбыҙ һинең һымаҡ һайланып, таҙға осрап ҡуймаһа ярар ҙа...

**Хужа:** Ниңә, һин таҙмы ни?

**Хужабикә:** Ҡыҙ баланың ҡулын беренселәрҙән булып һорауҫы фәрештәгә тиң, ти торғайны әҙәйем. Бәхетемдән, мин - һинең бәхетле берҙән-бер таҙың *(Ҡулдарынан тотошоп, бер-беренең күҙҙәренә ҡарап торалар).*

**Хужа:** Беҙ өйләнешкәндә, иң мөһиме - бер-берендә яратыу тойғоһо беренсе урында торҙо.

**Хужабикә:** Шулаймы? *(Иренең сәстәренән һыйпай).*

**Хужа:** Аллаһы Тәғәләгә шөкөр генә итәмен. Барыһын да бергә-бергә булдырҙыҡ. Күлдәк тә, машинаһын ла алдыҡ. Йорт та төҙөнөк. Бергәләп балалар ҙа үҫтерҙек.

**Хужабикә:** Үҙебеҙ имен-һау булғанда, баланы урынлаштырып ҡалырға ине.

**Хужа:** Ҡыҙымды теләһә кемгә тоттороп ебәрә торғаным юҡ. Хатта оҡшаған егете булһа ла, әйтеүем - әйтеү, ҡарағыҙ уны, ҡапҡа төбөнә килгән бер мыйыҡҡа һеләгәй ағыҙып ултырмағыҙ!

**Хужабикә:** Абау! Телең бысаҡтай! *(Бысаҡ төшкәне күренә).* Атаҡ, бысаҡ төштөсө... Берәү килә, ахыры. Хәйерлегә булһын. Әғүҙе билләһи шайтанирражим... *(Бысаҡты алып ҡуя).*

*Ишек шаҡыйҙар. Ирҙең ҡусты тейеш кешеһе инә.*

**Ҡустыһы:** Әссәләмәғәләйкүм!

**Хужа:** Вәғәләйкүмәссәләм! Кем икән, тип торам. Үҙемдең ҡусты икән дә... Уҙып кит түргә, туғаным! *(Күрешәләр. Ултырышалар).*

**Ҡустыһы:** Ағай, еңгә, ни хәлдәһегеҙ?

**Хужа:** Арыу әле. Хәл белергә генә килмәгәнһеңдер бит?

**Ҡусты:** Уныһы шулай. Тап өҫтөнә баҫтың.

**Хужа:** Берәй нәмәңде юғалттыңмы әллә?

**Ҡусты:** Юғалтҡан кеше мин дә түгел. Башҡа ағай-энең дә түгел.

**Хужа:** Һм... Ә ниңә үҙе килмәй?

**Хужа:** Малайҙары... Һе... Ә тауыш сығарҙылар заманында...

**Ҡустыһы:** Ирҙе - ир итеп, ҡатынды - ҡатын итеп алыу анһаттарҙан түгел шул. Етмәһә, уҡыу эше торһа... Бына бит һин ябай тракторсы инең. Еңгә һинең уҡып бөткәнеңде көтөп алды. Бына минең географ булаһым килгәйне. Ә шул хәтлем ымһынып ынтылғайным. Күтәрмәләүсе лә булманы. Үҙем дә инде, булдыҡһыҙ. Тәүәккәллек етмәгән. Яңы аңланым шуны.

**Хужа:** Ярай, үткән эшкә салауат. Әсәһе, ҡунаҡтарҙың килеү-килмәүенә нимә әйтерһең?

**Хужа:** Һинең аш-һыу яғы нисек?

**Хужабикә:** Барыһы ла әҙер.

**Хужа:** Ҡайһы арала өлгөрҙөң?

**Хужабикә:** Ҡыҙ бала үҫтергән кешенең ете төйөнсөгө әҙер булһын. Ҡыҙҙың йорто ҡапҡаһынан яусы өҙөлмәҫ, тигән әйтем бар. Был аш-һыуға ла ҡағыла инде.

**Хужа:** Һай-һай, аҡыллы баш.

**Хужабикә:** Баш - һиндә, ә миндә - муйын. Ҡайҙа әйтәһең, шунда боролам!

**Хужа:** Һе...*(Аптырана).* Ҡапыл ғына була бит әле. Улар менән нимә генә һөйләшербеҙ икән?

**Ҡустыһы:** Сәбәбе бар. Дуҫ әйтә: улар арыу халыҡ. Беҙҙе тиң күрерҙәрме икән, ти. Ошо хаҡта бөгөн һөйләшергә теләктәре бар. Аптыранған саҡта кешегә тел ярҙамы ла кәрәк бит. Бына шуның өсөн килдем.

**Хужа:** Үҙҙәренең ниндәй икәнен беләләр икән. *(Пауза).* Егет арыу күренә. Яҡшынан яҡшы тыуа, тигәне - ғәҙәт, ә бына ямандан яҡшы тыуғаны - ғәжәп.

**Ҡустыһы:** Яман тип ни, улай уҡ түгел дә инде. Ҡайһы берәүҙәр өсөн теләп, һорап ала торған нәмә түгел бит. Берәүгә лә гарантия юҡ. Ниндәй шарттарға барып юлыҡҡаһың инде. Бәғзеһе уңа, икенсе туңа, тигән кеүек. Ул да ҡасандыр берәүҙәрҙең ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле улы ине. Үҙең беләһең, ул минең яҡын дуҫым булды. Тәүге ҡатыны менән йәшәгәндә, ир булараҡ, ғаиләм өсөн аҡса эшләйем, тип тырышты. Йорт һатып алғайнылар. Уның хаҡын түләп бөттө. Билдәле инде: көнө-төнө эшләгәс, ғаиләһенә иғтибар етмәне, үҙенә терәк-таяныс булманы, таянысы... тайҙы.

**Хужа:** Һәәй...

**Хужабикә:** Ҡалайтаһың, яҙмыш...

**Ҡустыһы:** Унды ал - уңғанын ал, ти. Яңғыҙлыҡтан арынһын, тигән ниәт менән һеҙҙең буласаҡ ҡоҙағыйығыҙ менән мин үҙем таныштырғайным. Ир ҡуштаны - илгә яраған, бисә ҡуштаны - иргә яраған, ти. Гөрләтеп донъя көтәләр. Хатта айыҡ тормош алып баралар. Мәсеткә йөрөйҙәр. Малайҙары ла буй еткерҙе.

**Хужабикә:** Ҡаршы түгелмен. Ата-әсәһе бер айҙан килһен әйҙә - һөйләшергә. Тик өҫтәлгә араҡы ҡуя торғаныбыҙ юҡ.

**Ҡустыһы:** Әйтәм бит, айыҡ йәшәүселәрҙән улар. Әле генә йома намаҙынан сыҡҡандар. Ысын, билләһи!

**Хужа:** Килһен, тип әйтәһеңме?

**Хужабикә:** Эйе. Сөнки уларҙың улы менән беҙҙең ҡыҙыбыҙ бер-берен өҙөлөп яраталар. *(Пауза).*

**Ҡустыһы:** Еңгә, ә ниңә бер айҙан? Оҙаҡ була бит.

**Хужабикә:** Мәрхүмә әҙәйемдең гел бер һүҙе булды: "Яңы айҙың тыуып, ун биштәренә тиклем башҡарылған эштәр хәйерле була, тиҙәр", ти торғайны. Бәхеттәре төн кеүек ҡараңғы булмаһын өсөн, иң яҡшыһы - өйлә ваҡытына тиклем килһендәр. Шул мәлдә Бәрәкәт ишектәре асыҡ була, ти. Шулай, тәнәйем!

**Ҡустыһы:** Эй, еңгә, бөтмәне инде һинең боронғолар мәктәбен ҡабатлауың, ҡасан ятлап бөткәнһеңдер ул һабаҡтарҙы.

**Хужабикә:** Ятлап ултырмаһам да, бик яҡшылап хәтер төбөнә һалып ҡуйғанмын: ҡыҙың булһа, үҫеп етһә, һоратырға килһәләр, яңы ай үҫкән саҡта, өйлә ваҡытынан алда көн яҡтыһында уҡ килһендәр, шул!

**Ҡустыһы:** Йә, хуп, еңгәһе, бик хуп. Ә һинеңсә, бөгөн ниндәй көн?

**Еңгә:** Ай башы. Өйлә алды. Ағайың фатихаһын бирһә, хатта хәҙер үк килһәләр ҙә ризамын.

**Ҡустыһы:** Үҙ-ара танышырһығыҙ. Ҡоҙалыҡҡа ҡасанырак килеү өсөн рөхсәт һорарҙар. Уға ғына һүҙ табылыр. Бик булмаһа, тәүҙә ата-бабалар тарихын һөйләрһең. Һин ул яҡҡа шәп бит.

**Хужабикә:** Мәсеттә никах уҡытыу, туй көнөн билдәләүҙе ҡоҙалыҡҡа килгән көнгә ҡалдырырбыҙ.

**Хужа:** Ҡоҙалыҡ... Ҡоҙа булып киләләрме?

**Ҡустыһы:** Йола шул. Туй алдынан ныҡ һөйләш, туйҙан һуң ныҡ һыйлаш, ти.

**Хужабикә:** Һөйләш үҙең ныҡлап. Ураҙаға, йомаға тура килмәһен. Ҡыҙыҡай, айыҡ туй булһын, ти. Һиңә әйтәм, ныҡ тор.

**Ҡустыһы:** Никахтың хаҡы йыназанан оло бит. Йәштәрҙе зарыҡтырмайыҡ, ағай. Юғиһә, ағай-энеләр, ҡоҙалашырға бер яулыҡ тапмаймы, тип әйтә.

**Хужа:** Йә, хуш улайһа, килһендәр. Өйлә етмәҫ борон...

*Ҡустыһы тәҙрәгә барып, ҡулын иҙәй.*

## 2-се күренеш

*Мосолманса бик матур кейенгән ир һәм ҡатын - буласаҡ Ҡоҙа менән Ҡоҙағый - килеп инә. Үҙ-үҙҙәрен тотошонан уларҙың тәрбиәле, әҙәпле икәнлектәре һиҙелә.*

**Ҡоҙа:** Әссәләмәғәләйкүм!

**Хужа:** Вәғәләйкүмәссәләм. Уҙығыҙ. Ултырығыҙ.

**Ҡоҙа:** Һеҙҙең йортоғоҙға бәрәкәт һәм именлек теләйбеҙ .

**Хужа:** Рәхмәт. Әйткәнегеҙ килһен.

*Ултырышалар. Аллаһу әкбәр, тип, йөҙҙәрен һыпыралар. Буласаҡ Ҡоҙағый күстәнәстәрен өҫтәлгә ҡуя. Пауза. Хужабикә сәй яһай башлай.*

**Ҡустыһы:** Дуҫ кеше, үҙең менән яҡындан таныштырһаңсы.

**Ҡоҙа:** Минең исем-атым - Шәрифйән Сурағол улы Фәттәхов, 1970 йылғымын. Мин "сырымталар" аймағынан. Ата-бабалар көнөнә биш намаҙ уҡығас, башҡа кешеләргә улар бер ҙә йоҡламаған һымаҡ, әҙерәк сырым итеп кенә алған һымаҡ тойолған. Шәжәрәмде бик яҡшы беләм. Ә тормош иптәшем Әминә Лотфулла ҡыҙы. Мәхмүт ауылының "аҡтамаҡтар" нәҫеленән. Ата-бабалары борон ишле мал аҫрап көн күргән. Аҡтан өҙөлмәгәндәр. Шуға бөйлә улар араһына шул атама йәбешкән.

**Ҡустыһы:** Ә беҙ... ни? *(Ағаһына ҡарай).*

**Хужа** *(ҡыуанып)*: Ҡустым, һин бар әле, килеңгә әйт. Тиҙ генә килеп етһен.

**Хужабикә:** Ҡыҙымдың еңгәләре лә кәңәш туйына килһендәр. Һөйләшәһе һүҙ бар, тип әйт.

**Ҡустыһы:** Була ул. *(Ҙур теләк менән сығып китә).*

**Хужа:** Минең исемем - Барый Юлбарыҫ улы Исмәғилев. Илле йәште үткәрҙек. Мин "бүреләр" аймағынан. Уның тарихы былай: борон ҡалмыҡтар барымтаға килгәндә бер нисә ғаилә тауҙағы мәмерйәгә - бүреләр төйәгенә йәшенә. Шунда ир бала донъяға килгән. Илдә тыныслыҡ урынлашҡас, ул ғаилә төбәгенә ҡайта. Әлеге баланан таралған тоҡомдарға "бүреләр" тигән ҡушамат тағылған... Ә йәмәғәтем *(Ҡулы менән хәләленең иңбашынан ҡосаҡлай)* - "уфтар" аймағы ҡыҙы. Шул хаҡта үҙең асыҡлап һөйләп ебәр әле.

**Хужабикә:** Аймаҡ тарихыбыҙ ҙур. Ата-олатайҙар элек ил сиген һаҡларға тейеш булған. Алты ай хеҙмәте тулғас, былар кире ҡайтырға сыға. Бер оло һыу буйына туҡтап, аттарын һуғаралар. Ҡаҙаҡ ҡыҙҙары ла һыуға килгән булған. Шул мәл олатай ҡыҙҙарҙың береһенән һыу һораған кеше була. Тегене күтәреп алдына ултырта һәм урлап алып ҡаса... Баштары шәп эшләй уғрыларҙың: аттары менән килгән яҡтарына сабалар. Арттарынан төшкән ҡыуғынсылар кире әйләнгәс кенә, былар артабан юлын дауам итә. Уфтанып ғүмер итә ҡаҙаҡ ҡыҙы башҡорт ерендә. Шуға күрә беҙҙең аймаҡ "уфтар" булып, шул атаманы йөрөтә.

**Хужа:** Ярай, таныштыҡ, бик һәйбәт. Бер күргәндә таныш, икенсе күргәндә атыңдан төш тә күреш, ти халыҡ. Шунан, ниндәй ниәтегеҙ бар?

**Ҡоҙа:** Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, ике яҡтың да ата-әсәһенең фатихаһы менән йәштәрҙе беректереп ҡуйырға ине. Рөхсәт итһәгеҙ, ниәтебеҙ: һеҙгә ҡоҙалыҡҡа килеү. Ҡасанырак килергә мөмкин?

**Хужа:** Әсәһе... Уй-ниәтен белдек ҡунаҡтарҙың. Боронғолар мәктәбенә күҙ һалайыҡ әле. *(Кәштәгә ымлай. Хужабикә йүгертеп китап алып бирә. Хужа китапты асып ҡарай).* Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик асыҡ яҙып ҡалдырған: ғаилә ҡорор алдынан ете быуынын тикшергәндәр.

**Ҡоҙа:** Зат түгелбеҙ!

✓ *Икенсе килен: Миңә лә ҡыҙ кәрәк. Беҙҙең диндә бер хәҙис бар тиме: өс ҡыҙ табып, мөьминә итеп тәрбиәләп үҫтергән әсәй тура ожмахҡа инә, ти. Ожмахҡа инге килә, китабыңды уҡыт әле, бикәм.*



**Хужа:** Ҡыҙыҡ нәмәләр яҙып ҡалдырған беҙҙең бабайҙар. Тыңлағыҙ әле, нәмә ти: "Киләсәк быуын һау-сәләмәт булһын өсөн эттәр ҡарыҡҡанда, бүреләр туйлағанда балаларҙы өйләндермәгәндәр". *(Уйлана. Китапты артабан аса).* Тәк, ниндәй сабый теләйһең? Бынығын айға ҡарап белгәндәр. Һе... Бер аҙнанан һуң килгән ваҡыт ҡулай күренә... Был китапты йәшерәк саҡта нишләп асып ҡараманыҡ, әсәһе? Беҙҙең бит ҡыҙыбыҙ түгел, улыбыҙ булыр ине. Ошо көндә улар түгел, беҙ ҡоҙалыҡ һорап барыр инек. *(Хужабикә килеп, ирен ситкә алып китә. Китапты иренең ҡулынан ала).*

**Хужабикә:** Был китап еңгәләр өсөн тәғәйенләнгән.

**Хужа:** Һе... Анһат ҡотолдоң.

**Ҡоҙа:** Тәҡдир тигәне лә бар бит әле. Кемгә кем насип...

**Ҡоҙағый:** Никахты мәсеттә уҡытыуға нисек ҡарайһығыҙ?

**Хужа:** Ҡуш ҡуллап ризабыҙ.

**Ҡоҙа:** Йәштәр айыҡ тормош яҡлы хәҙер. Айыҡ туй үткәрергә ине.

**Хужа:** Бик яҡшы. Тәүәккәлләнек. Ҡулымды бирәм.

**Ҡоҙа:** Аллаһы Тәғәлә ихтыярына тапшырҙыҡ. *(Ризалыҡ билдәһе итеп, ҡулдарын бер-беренең ҡулы өҫтөнә һалалар).* Йәштәрҙең бәхетле булыуын һорап, Хәжәт намаҙын уҡып алайыҡ. *(Ҡоҙа менән Ҡоҙағый күрше бүлмәгә сыға).*

## 3-сө күренеш

**Хужа:** Йолаға таянған - таймаҫ, ти. Йоланы килештерә алырһығыҙ микән? Теге китапта әллә нимәләр бар, уҡығыҙ.

**Хужабикә:** Йоланы тотоу өсөн күп кәрәкмәй, уның мәғәнәһен, асылын аңлау етә. Меңәр йыл буйы нисәмә дәүләт булып, нисәмә ҡәүем алмашынған, ә йола һаман ҡала: тейешле хеҙмәт-хөрмәт менән йәш ғаиләне беркетеү. Йоланың һәр бер аҙымы - йәш кешене аяу, аңғартыу, өйрәтеү. Аҡылы бар кеше быны үҙе лә белеп тора.

**Хужа:** Ана, елдереп килә килендәрең. Ҡаршыла.

**Хужабикә:** Эй, рәхмәт яуғырҙарым, ҡалай күңелләнеп килеп ултыралар, йөрәккәйҙәрем, хәйерле сәғәттә.

**Хужа:** Үҙебеҙҙең йәш саҡ иҫкә төшөп, йөрәк тулап китте әллә?

**Хужабикә:** Ҡоҙа менән ҡоҙағый булабыҙ бит, ҡайны менән ҡәйнә булабыҙ бит, Аллаһы бойорһа, ҡартыҡайым, алтынҡайым. *(Иренең битенән һыйпап һөйөп ала).* Әһе, ҡалай рәхәтләнеп торасы, хас быҙау кеүек!

**Хужа:** Быҙау булырмын мин һиңә, иһиннааһаа! *(Айғыр булып кешнәп, әбейен ҡосаҡлап ала).*

**Хужабикә:** Атаҡ, сеү! *(Күрше бүлмәгә ымлай).*

*Хужа оялып, башын тотоп тышҡа сығып китә. Уға ҡаршы геүләшеп килендәр - ҡыҙҙың еңгәләре, буласаҡ ҡәйнеш тейеш егет инә.*

**Беренсе килен:** Абау, ҡайнағаға ни булды, башын тотоп сығып барасы?

**Хужабикә:** Бер ни ҙә булманы. Ныҡ шатланһа, башын тота ул. Рәхмәт төшкөрҙәре, ҡыҙымдың еңгәләре лә килеп етте. Хәҙер, барыһы тураһында кәңәшләшербеҙ. *(Килендәр аяғөҫтө тороп баҫа).* Ҡыҙ йәшереү, килен төшөрөү, һыу юлын күрһәтеү йолаһын атҡарыу бурысы ла тора.

**Икенсе килен:** Алланың рәхмәте. Йәшерербеҙ. Төшөрөрбөҙ.

**Ҡәйнеш:** Һыу юлын да күрһәтербеҙ...

**Хужабикә:** Ҡуй, һыу юлын күрһәтер бикәсе бар, ҡамасаулап йөрөмәгеҙ. Ҡаршы осрап, киленгә сәләм бирегеҙ, еңгә бүләге һорағыҙ. Һыу юлында шайтан туйы яһап, теләһә ниндәй ир-ҡатын булып албаҫтыланмағыҙ, йәме. Араҡы эсерәм, тип уҙған-барған кешегә ташланмағыҙ, гонаһҡа батырһығыҙ.

**Ҡәйнеш:** Ярай, беҙ еҙнә менән үҙебеҙҙың тәртипте үҙебеҙ ҡарарбыҙ. Үҙегеҙҙең йолағыҙҙы ҡарағыҙ.

**Хужабикә:** Ҡайһығыҙ нимә өсөн яуаплы? Уйлап та килгәнһегеҙҙер?

**Беренсе килен:** Һөйләшелгән. Килешелгәнсә, беҙ икебеҙ ҡыҙ йәшерәбеҙ. Ишек бауы өсөн бына шулай ғына хаҡ һораясаҡбыҙ. Ун мең!

**Хужабикә:** Ай-бай, улай ярайҙыр шул, нәфселәнмәгеҙ.

**Икенсе килен:** Борон шулай көйләгәндәр: "Килде-китте, китте-барҙы ҡулдарҙан, бер һум, ике һум, өс һум да илле биш тин..." Замана үҙгәргәс, хәҙер: "Бер мең, ике мең, ун мең дә илле биш һум," - тип йырлайҙар. *(Ҡалған еңгәләр хуплап ҡушыла).*

**Беренсе килен:** Заман башҡа - заң башҡа, бикәмем.

**Хужабикә:** Унан аҙаҡ кейәүҙе ҡыҙ янына оҙатыуҙы хәстәрләйбеҙ. Тәүге никах төнөнә инеү өсөн ишектең ике яғында тороп, бына шулай йыртыш тотабыҙ.

*Йыртыш тауарын икеһе ике яҡтан тотоуға, Ҡәйнеш арттан килеп өҙә баҫам тигәндә, тегене күреп өлгөрәләр ҙә ҡыуып ебәрәләр.*

**Беренсе килен:** Эй, бар, китеп торсәле, ҡәйнеш, беҙ кешенең никах туйы хаҡында һөйләшәбеҙ. Уйын эш түгел.

**Хужабикә:** Түшәк янына ошо ҡулланманы, йәнә, Ризаитдин Фәхретдиндең "Ҡатындарға нәсихәтен " һалабыҙ. *(Баш осона күтәреп күрһәтә).*

**Икенсе килен:** Ҡуйсы, тәүге төндә үк китап уҡып ятмаҫтар ҙа!

**Хужабикә:** Уҡыу тигәс тә нисегерәк уҡырҙар! Уҡырлыҡ итеп аңлатығыҙ. Был ябай мәктүп түгел, был китапсыҡ, "Ниндәй сабый теләйһең?" тип атала. Боронғолар буласаҡ әсәнең йөккә уҙыу ваҡытын бик мөһим, тип һанаған. Шуға күрә тыуасаҡ баланың сәләмәтлеген алдан ҡайғыртҡандар. Әгәр сабый айҙың ун етенсе төнөндә тумаланһа, ул уңыштарға еңел өлгәшәсәк. *(Китапты күкрәгенә ҡыҫа. Уйлана).*

**Килендәр** *(бергә)*: Ҡайҙа, ҡайҙа? Бир әле. *(Ҡулдарын һуҙалар).*

**Хужабикә:** Ә, барып еттеме? Ҡыҙыма, тип Өфөнөң төп мәсетенән алдырҙым. Аҙаҡ уҡырһығыҙ.

**Беренсе килен:** Ыста, бындай китап та бар икән мосолманда.

**Хужабикә:** Мунсаны ҡайһығыҙ яға?

**Килендәр:** Үҙебеҙ, үҙебеҙ. Бергә!

**Хужабикә:** Килендәр, әйтеп ҡуям: уйындан уймаҡ сығармағыҙ. Кейәү талауға тиклем барып етмәгеҙ. Ҡыҙымды һаҡлағыҙ. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр, һатып алығыҙ, тип, йә уның туфлийын, йә ҡыҙҙы алып ҡасып йәшерәләр. Ул беҙҙең йола түгел. Ҡаҙаҡтан килгән йола, тиҙәр. Быға юл ҡуймағыҙ.

**Беренсе килен:** Ярай, бикәм, борсолма. Ҡарауылларбыҙ. Ағайҙары ла өйҙә торһа, күҙ-ҡолаҡ етерлек.

**Хужабикә:** Һыу юлын кем күрһәтә? Күнәк-көйәнтәһе әҙерме? Күҙ-ҡолаҡ шунда ла кәрәк. Иңбашына көйәнтә һалған, сәскәле биҙрәләр элгән бикәсе күтөп торамы? Бикәсенә бүләге әҙерме? Барыһын да алдан хәстәрләгеҙ.

**Беренсе килен:** Бикәм, улай ныҡ борсолма, үҙ яйы менән китә ул.

**Икенсе килен:** Эйе, аҡыллы кейәү генә килһен! Бай булһын, һау булһын.

**Хужабикә:** Һыу башлауҙы, килен төшөрөүҙе күреүҙең үҙенең сере бар. Беҙ бәләкәй саҡта ауылға әллә нисә еңгә оҙатылып килде. Һеҙгә лә шундай бәхет татыһын, ҡарарға сығығыҙ, хәтерегеҙҙә ҡалыр, тип, әсәйҙәр беҙҙе урамға ҡыуып сығара торғайны. Ҡулъяулыҡ таратҡанда барыбыҙҙың да күҙҙәре яңы еңгә йөҙөндә. Күҙ ҡарашының нуры хәтерендә ҡалһа, өйләнеү, кәләш алыу үҙеңә лә насип була, тип юрауға өйрәтә торғайнылар. Шуға микәндер, беҙҙең йәштәштәрҙең барыһы ла башлы-күҙле булды.

**Беренсе килен:** Бикәм, баяғы китапты ҡасан уҡып булыр икән. Ней бит әле... Ҡәйнешең ҡыҙ һорай. Ике малайҙан һуң ҡыҙ ғына кәрәк, ти...

**Икенсе килен:** Миңә лә ҡыҙ кәрәк. Беҙҙең диндә бер хәҙис бар тиме: өс ҡыҙ табып, мөьминә итеп тәрбиәләп үҫтергән әсәй тура ожмахҡа инә, ти. Ожмахҡа инге килә, китабыңды уҡыт әле, бикәм.

**Хужабикә:** Эшегеҙҙе теүәл итеп атҡарһағыҙ, китаптарҙы һәр берегеҙгә бүләк итеп таратырмын. Үәт! Килештекме? Ана, намаҙ уҡып сығып килә минең ҡоҙ... ҡунаҡтарым. Әйҙәгеҙ, намаҙҙарығыҙ сауаплы булһын. Ана, өй хужаһы ла инеп килә. Килендәр, һөйләштек, итәк-ең тартып, эштәрегеҙҙе ослап, һалдат кеүек әҙер булығыҙ, йәме, йөрәккәйҙәрем. Бөтә ышаныс һеҙҙә.

*Килендәр баш ҡағып, йылт итеп сығып китә.*

**Хужа** *(инә)*: Һе... Сәй яңырт! Тамаҡ кипте.

**Ҡоҙа** *(Ҡоҙағый менән күрше бүлмәнән сыға)*: Ярай, мәшәҡәтләнмәгеҙ, беҙ ҡайтайыҡ.

**Ҡоҙағый:** Ҡыҙлы йорт - наҙлы йорт. Гөлдәрегеҙ сәскә атып тора, өйөгөҙҙә хушбуй еҫтәре, тәҙрәләр көләп тора... Рәхәтләнеп намаҙға ойоп киткәнмен.

**Хужабикә:** Рәхмәт яҡшы һүҙеңә, ҡоҙ... эй, кем, исеменде лә әйтәлмәй торамсы, ғәфү ит.

**Ҡоҙағый:** Аллаһы бойорһа, исемләшеп тә тормабыҙ, йола ҡушҡанса ауыҙ тултырып нисек кәрәк шулай өндәшербеҙ. Балаларҙы ла шулай өйрәтербеҙ.

**Хужабикә:** Ярай, әйткәнең насип булһын, шайтан ҡолағы һаңғырау булһын.

**Хужа:** Шишмә һыуы ҡоромаған да - ана, кранда! Сәйһеҙ булмай!

**Ҡоҙа:** Булмай, булмай... Өйөгөҙҙө ҡасан һалдығыҙ? Урҙаһы бейек...

*Сәйгә ултыралар.*

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы**
**Сораман ауылы.**

---

*ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП*



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

## Нәфсе

**49.** Нәфсене тәрбиәләү. Нәфсене тәрбиәләү уға һәм уның талаптарына ҡаршы тороуға бәйле. Әммә нәфсеңдең һиңә үҙе ҡаршы тороуына юл ҡуйырға ярамай, ул осраҡта нәфсеңдә сәм уяна. Әйтәйек, һин тәмле ризыҡтан баш тартаһың икән, нәфсеңде тыйыу өсөн түгел, тағы ла тәмлерәк ризыҡ ашар өсөн был юлға бараһың. Әгәр ҙә һин башҡалар алдында айырылып торор өсөн, һине маҡтаһындар, гөлсәскәгә күмһендәр, исемеңде күккә күтәрһендәр, ҡулыңды үпһендәр өсөн генә ниндәйҙер изге ғәмәл ҡылаһың икән, барыбер үҙ нәфсеңә хеҙмәт итәһең булып сыға. "Эт кеүек йоҡо һәм ризыҡ менән генә риза булма, хатта һиңә ата бесәй һөжүм итһә лә, уға йөрәгеңде бир..." тиелә суфый шиғырҙарында.

**50.** Күп кенә суфыйҙар нәфсенең дүрт кимәлен билдәләй.

## Бойороҡ биреүсе нәфсе

Бойороҡ биреүсе нәфсе кешене яуызлыҡ ҡылырға ҡоторта. Ул - барлыҡ яуызлыҡтарҙың сығанағы, хайуан холоҡло, үҙенә туҡтауһыҙ маҡтау йырҙары сығара, һыйланырға, йоҡо һимертергә генә белә. Һәр саҡ теләктәрен бойомға ашырыу хаҡында ғына уйлай. Формаһы буйынса ул - кеше, йөкмәткеһе буйынса - Иблис. Бойороҡ биреүсе нәфсенең ун билдәһе бар: әҙәпһеҙлек, яуызлыҡ, дошмансылыҡ, яһиллыҡ, тәкәбберлек, күрә алмаусанлыҡ, көнсөллөк, ике йөҙлөлөк, ышанмаусанлыҡ, ҡомһоҙлоҡ.

## Ғәйепләүсе нәфсе

Ғәйепләүсе нәфсе ҡырын эштәре өсөн үҙ-үҙенә яза биреүсе нәфсе. Суфыйсылыҡтың тәүге аҙымдарында, кешенең рухы һәм йөрәге уяна башлағанда шул яҡтылыҡта нәфсе үҙенең ҡырын эштәрен күрә һәм Аллаһы Тәғәлә алдында ярлыҡау һорай башлай. Ғәйепләүсе нәфсе бойороҡ биреүсе нәфсе менән тынысланған нәфсенең ҡап уртаһында тора. Ғәйепләүсе нәфсе - Аллаһы Тәғәләгә яһалған тәүге аҙым да ул. Уның ун билдәһе бар: дәрүишлек, намыҫлылыҡ, түҙемлек, тоғролоҡ, намаҙ уҡыуҙа даимилыҡ, хажға барыу, ғибәҙәт ҡылғанда ихласлыҡ, дини һалымдарҙы түләү, рухи һуғыш. Ғәйепләүсе нәфсене интеллектҡа ла тиңләйҙәр.

## Илһамланған нәфсе

Аллаһы Тәғәләнән төшкән яҡтылыҡ нәфсене илһамландыра һәм ул изгелек менән яуызлыҡты айыра башлай. Уның ун билдәһе бар: аҡыл, зирәклек, белем, ихласлыҡ, илһам, уяныу, камиллыҡ, бөхтәлек, изгелек һәм йомартлыҡ.

## Тынысланған нәфсе

Был саҡта нәфсе Аллаһы Тәғәлә хозурында тыныслыҡ таба. Аллаһы Тәғәләнән төшкән ҡояш иң юғары нөктәһенә барып еткән саҡта нәфсе тыныслана, барлыҡ кире сифаттарынан таҙарына. Тынысланған нәфсе кешенең йөрәгендә урын ала. Уның ун билдәһе бар: фәҡирлек, сабырлыҡ, ғәҙеллек, ғәҙел хөкөм итә белеү, ҡәнәғәтлек, белем, бойомға ашыу, үҙ-үҙеңә ышаныусанлыҡ, намыҫ һәм тоғролоҡ. Тынысланған нәфсе йөрәк кимәленә барып етеп, рухҡа әүерелә.

## Рух менән нәфсе уртаһында ул

Нәфсе камиллыҡтың иң юғары баҫҡысына ирешкәс, йөрәк кимәленә күсә. Тынысланған нәфсе шул уҡ йөрәк ул. Фәйләсуфтар уны "рациональ нәфсе" тип тә атай. Матди донъяның психологик кимәлендә тороусыларҙың йөрәге юҡ.

Йөрәк - ул берҙәмлек (рух) һәм төрлөлөк (нәфсе) биләмәләре уртаһындағы ҡала. Рух - изгелек, ә нәфсе яуызлыҡ сығанағы. Мөхәббәт - ул рух ғәскәре, ә дәрт (теләк) - нәфсе ғәскәре. Рух - Хоҙай алдында уңыш ҡаҙаныу, нәфсе - Хоҙай алдында уңышһыҙлыҡҡа юлығыу. Йөрәк ошо ике хаким араһында урынлашҡан һәм уларҙың ҡайһыһы еңһә, йөрәк шуға буйһона.

**(Дауамы бар).**

✓ **Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар.**



ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ЯҢЫЛЫҠ
## тыңлама

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бактиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Быҡдай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙән насарлайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тинләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яратҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды нығыта.

■ Һауа температураһының 10 градусҡа түбәнәйеүе инфаркт ҡорбаны булыу хәүефен 7 процентҡа күтәрә. Кардиологтарҙың яңыраҡ үткән "ESC Congress 2015" сараһында ғалимдар ошо турала хәбәр итте. Белгестәр алты йыл дауамында Канаданың Виннипег ҡалаһында йәшәүсе кешеләрҙә миокард инфаркты ни сәбәптән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Йәйгеһен был ҡалала көндәр ҡоро һәм эҫе тора, ҡышын ныҡ һыуыҡ була. Һалҡын ваҡытта миокард инфаркты йышыраҡ булған. Шуға ла кем йөрәк сирҙәре менән ауырый, һауа температураһы ҡапыл һыуытҡан мәлдә үҙ организмына иғтибарлыраҡ булһын, тип кәңәш итә ғалимдар.

■ Асыҡҡан ваҡытта мөһим ҡарарҙар ҡабул итмәгеҙ, тип кәңәш итә белгестәр. Макс Планка институты ғалимдары фекеренсә, асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Бактиһән, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм уның ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстиктив рәүештә углекислый газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа ыҡлынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнең компромисы һөҙөмтәһе, быҡдай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

ХӘТЕРКИТАП

**Бизмән, тиһәң, минең күҙ алдына бала саҡтың бер ваҡиғаһы килеп баҫа. Беҙ, беренсе кластар, теүәл ун ике бөртөкбеҙ. Мәктәп баҡсаһында йыуан бер ҡоро бүрәнә ятып, беҙ шуға бер оҙон ҡалын таҡтаны һалып, ҡалҡанбаш өйә инек. Ике яҡҡа 6-шар бала ултырғас, ауырлыҡ тигеҙ, рәхәтләнеп өйәбеҙ генә. Бер яҡта иң алда мин ултырам. Бер мәл ҡаршы яҡтағы берәү (иң арттағы кеше) шаяртып һикерҙе лә төштө. Тигеҙлек юғалғас, мин тағы ла алға ышҡылып барып, таҡтаға йәбешкән уң ҡулымдың һуҡ бармағы бүрәнә аҫтына инде лә китте. Тегеләр һикереп төшкәндән көлә, мин аҡырып илайым. Күмәк тауышҡа ишетмәйҙәр - 11 кеше бармағымды иҙә генә. Балалығыма барып, йән көсөмә бармаҡты тартып алдым. Һөйәге сыҡты, ите тороп ҡалды. Ауылды яңғыратып аҡырам. Минең хәлде күреп, класташтар аптырауға ҡалды. Йүгереп мәктәпкә инәм, Маһира апайыма ҡанлы бармаҡты күрһәтәм. Ул, шундағы бер гәзит ситен йыртып алып, минең бармаҡты ураны ла, ауыл фельдшеры Мәрзиә апайға ебәрҙе. Оҙаҡ уңалмай йөрөнө бармаҡ. Байназарға ебәрҙеләр. Унда атай матас менән алып барҙы. Врач ҡараны ла: "Перелом", - тип әйтте. Атай әйтә: "Чепуха (был уның яратҡан һүҙе), бер нәмә лә булмаған, бөтә ул", - тип мине йыуата. "Мин русса беләм, перелом - һынған була..." - тип мин илайым...**

# ЗАМАНДЫ БИЗМӘНГӘ ҺАЛЫП...



Беҙҙең быуынды алғанда ла, беҙгә лә һәптеюҡ нәмә күрергә насип булған икән. Социализм сәскә атып, коммунизмға саҡ-саҡ етмәй торған мәлдә тыуғанбыҙ беҙ 1968-селәр. Октябрят булып, уртаһында кескәй Володя (В.И.Лениндың бала сағы) торған биш саталы йондоҙҙо ла түшкә ҡаҙап йөрөлдө, пионер булып, ҡыҙыл галстук та тағылды, комсомол булып, комсомол значогын тағыу бәхете лә тейҙе. "Ленин һөйөклө атабыҙ - ул һәр саҡ беҙҙең менән!" тип йырлап та йөрөлдө. Әйткәндәй, моңом булмаһа ла, Ленин, комсомол тураһында һәптеюҡ йыр беләм.

Өсөнсө класта пионерға алдылар. 19 май көнө иртән арьяҡта йәшәгән өләсәйем килде. Атайымдың әсәһе. Ул совет заманында ла шаршау артында йәшенеп намаҙ уҡыған, ураҙа тотҡан диндар кеше. Уның ҡыҙы, атайымдың бер туған һеңлеһе Маһира апайым- беҙҙең уҡытыусы.

"Балам, пионерға инәһең. Алла юҡ, тиһәләр ҙә, шулай әйтергә ҡушһалар ҙа, телең, юҡ, тип торһа ла, эстән, күңелең менән, бар, тип тор", - тине. Мин, ул саҡтағы социализм тәрбиәһе нигеҙҙәрендә тәрбиәләнеүсе булараҡ, өләсәйҙең был һүҙҙәрен ҡолаҡҡа ла элмәнем. "Нисек инде: уҡытыусы Алла юҡ, тип тора, китаптар Алланы инҡар итә, өйҙәгеләр шуны тыҡый, класташтар ҙа. Бер өләсәй генә алйып йөрөй", - тип уйланым.

Мәктәпте комсомолдар булып тамамланыҡ. 1988 йылда студент булып киттек. Ул осор магазиндарҙа әйбер-фәлән юҡ ине. Өфөләге аҙыҡ-түлек магазиндарында ҡара мышар ҡайнатмаһы, икмәк-булка изделиелары ғына бар ине, тиһәң дә хата булмаҫ. Шәкәр, вермишель, ярмалар грамға ҡалып китте. 200-әр грамлап бирҙеләр, ахыры. Ҡара мышар ҡайнатмаһын ашап, тешебеҙ ҡап-ҡара булып ултырғанбыҙ хәтерҙә.

1988 йылда Мәскәүгә барҙым. Студент билеты менән поезға бер яҡҡа 9 һум (!) түләп. Унан банан сумкаға (шундай сумкалар модаға инеп китте) ҡутара күҙ һабыны тейәп ҡайттым. Ҡыҙҙарға бүләккә, сөнки һабын-фәлән магазинда юҡ ине. Беҙҙә шулай уҡ дефицит булған спорт шапкалары, фотоальбомдар алып ҡайттым.

1990 йылдарҙа ла шул уҡ хәл. Кейәүгә сыҡҡас, Ҡолғанала мин ауыл хакимиәтендә иҫәптә түгел, шуға теге 200-шәр грамм вермишель дә тәтемәне. Промтауар, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары ла исемлек буйынса ғына бирелә. Кешеләр магазиндағы ябай колготки, носкиҙарҙы теҙмә буйынса ала. Беҙ кәҙә матасы менән Мәһәҙейҙән барып, әсәйемдән тоҡсай-тоҡсай ярма, һалма-курйер алып ҡайта инек. Мәктәптә эшләй башлағас, ҡулға аҡса арыу ғына инә һымаҡ, тик магазиндарҙа бер нәмә юҡ ине. Әле булһа шул мәлдәге 25 һумлыҡ аҡсалар китаптар араһынан килеп сыға. Аҡса булды, уға һатып алырға нәмәһе булманы.

Бер мәл эш хаҡын РНО (уның нимә аңлатҡанын да белмәйем хәҙер) итеп бирә башланылар - тәгәйен магазиндан ғына шул РНО-ға әйбер, аҙыҡ-түлек алаһың. Шунан тормош йәйләп яҡшыра барҙы, яҡшыра барҙы. Магазиндар әйбер, аҙыҡ-түлеккә күмелде - аҡсаң ғына булһын! Халыҡ һуңғы йылдарҙа, әсәм әйтмешләй, бырамы һәйбәт йәшәй башланы. Ауылдарға командировкаларға барғанда күрә йөрөйбеҙ: күбеһе ауылда ҡаланыҡындай шәп шарттарҙа йәшәй - һыуы өйҙә, газы бар, душ, унитаз һ.б. Ҡапҡа һайын трактор, машина. Өйҙәр хан һарайындай. Интернет, текә телефон тураһында әйтеп тораһы ла түгел - уларҙа хәҙер 60-70 йәшлек инәй-бабайҙар ултыра. Сағыштырыу өсөн: Ҡолғанала һайлау комиссияһында сәркәтип саҡта стационар телефон да юҡ, рация бәйләнеше генә ине!

Ҡыҫҡаса әйткәндә, Аллаға шөкөр. Тик бынау ҡорғоҡ вирусы килеп сыҡты. Ярай, уныһы ғына быстаҡ ул. Рәсәй халҡы бер быуат эсендә генә унан гәйреһен дә күргән. Мәҫәлән, әсәйем һуғыш осоронда дүрт йыл эсендә икмәкте тешебеҙгә лә элмәнек, таяҡҡа эшләнек, ти. Шөкөр, тыҡһаныһа тәгәрәп ултыра әле ул. "Халыҡ дошманы" балаһы мөһөрө лә алған, өс класты бөтһә лә, ғүмерҙә магазинда отолманы - ҡара шут менән калькуляторҙан шәп шутланы, олатай НКВД тройкаһы менән 10 йылға хөкөм ителеп, төрмәгә киткәс, өйһеҙ ҙә ҡалалар. 1938-1951 йылдарҙа Әүжәндә йәшәп эшләргә мәжбүр була. Аслыҡтан Әүжән ҡотҡарҙы, ти. Ҡыуғынын да ҡыуған, лоцман булдым, передовойҙа йөрөнөм, тип ҡупая. Ҡупайырға хаҡлылыр ҙа. Аслыҡ күргәс, ғүмере буйы запас менән йәшәне: атай мәрхүм эшләгән ҙур ларҙың бер бүлемендә 6 тоҡ бойҙай, икенсеһендә алты тоҡ он һыйыр ине. Шул бер иле кәмеһә, әсәй: "Он, иген бөтөп бара", - тип яныһын ала ине. Ҡайнатмаһы ашалған һәр өс литрлыҡ банка бутмылға (Мәһәҙейҙәр, Ҡағы яҡын булғас, баҙҙы бутмыл (подполдан башҡортлаштырылған) ти) шәкәр тултырып төшөрөлдө. Ғүмер буйы. Шырпы, тоҙ, сәй сетка-сетка аҫылынып торҙо. 200 литрлыҡ бер мискәлә - тоҙло кәбеҫтә, икенсеһендә бәшмәк булды. Кәбеҫтәне генә мең баш ултыртты (беҙ шуға аҫҡы, өҫкө ҡотоҡтан көнөнә егермешәр көйәнтә һыу ташып ҡоя инек).

Әсәйҙең ошо йыйынтыҡ холҡо беҙгә күсмәгән, ниңәләр. Магазинда бар, тигәнгә һылтанып өйрәнгәнбеҙ. Бөгөнгә көн менән генә йәшәйбеҙ. Ярап ҡалыр ине әле ошо мәлдә. Юҡ шул.

Шөкөр, тейем. Бөгөнгө замандың меңәрләгән минустарын ҡапларлыҡ елле, ҙур плюсы бар - иманға ҡайттыҡ, дин күтәрелде. Уҡазлы мулла балаһы булһа ла, әсәйем Ҡөрьән уҡый белмәй, намаҙ уҡымай, мин, шөкөр, тырышып-тырышып ғәрәпсә уҡырға өйрәндем, биш намаҙҙы, ураҙаны ҡалдырған юҡ, әлхәмдүлилләһ. Иң ҙур байлыҡ - иман байлығы. Уға эйә булһаҡ, беҙ Аллаһ ебәргән ниндәй һынауҙар алдында ла бирешмәҫбеҙ, һынмаҫбыҙ. Бәхет нисә тоҡ кәртүгең, онон булыуы менән үлсәнмәй бит. Бәхет - Аллаһ ризалығына ирешеүҙә. Уның һайлаған, яратҡан ҡолдарынан булыуҙа...

Һәр замандың ыңғай һәм кире яҡтары бихисап. Беҙҙең замандың ыңғай яҡтары иҫ киткес күп. Уларҙы баһалай, шөкөр итә генә белер кәрәк. Үҙем йәшәгән заманды бизмәнгә һалып, ошондай фекергә килдем әле: нимә булғанда ла тигеҙлек һаҡлайыҡ, аҡыл һәм миһырбаныбыҙ, иманыбыҙҙы асыу, ризаһыҙлыҡ, нәфрәт еңеп китмәһен. Бармаҡ ҡына зыян күрмәҫ ул сағында...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

✓ Ир менән ҡатын баланы донъяға килтереү-килтермәү тураһында бәхәс ҡуптарғандан һуң ҡатын кеше ауырын ҡалдырырға ҡарар итә, ләкин тәүге фекер - "баланың ҡабул ителмәүе" эҙҙәре баланың холҡонда сағылыш таба.



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘРБИӘ МЕНӘН ДӘ...

## сирҙе еңеп була



**Һәр быуаттың үҙенә хас ауырыуҙары һәм шулай уҡ дауалау алымдары, иҫкәртеү саралары бар. Һуңғы мең йыллыҡта, XX һәм XXI быуатта, беҙ эскелек, наркоманлыҡ һәм СПИД ауырыуҙары күбәйеүен күҙәтәбеҙ. Был ауырыуҙар башҡа күп төрлө хроник сирҙәр сәбәбе булып тора, милләттең генофондына тәьҫир итә, шәхестең үҫеш кимәле түбәнәйеүгә килтерә.**

Аллаға шөкөр, мосолман ғаиләләрендә дөйөм иманһыҙлыҡҡа бирелмәй, әхлаҡи тәртиптәргә таянып тәрбиәләнгән, насар ғәҙәттәрһеҙ, аҡыллы, зиһенле балалар үҫә. Был уларҙың рух көслөлөгөндә лә, физик яҡтан сәләмәт булыуында ла асыҡ сағыла. Иманлы ата-әсә балаларын Ислам алымдары менән тәрбиәләргә тырыша. Был физик, аҡыл, рухи, тойғо, әхлаҡи һәм социаль тәрбиәне үҙ эсенә алған алымдар кешенең тәбиғи асылына тура килә, баланың һәләттәрен аса, үҫтерә. "...Һәр әҙәми затҡа һәм уны (Ер йөҙөндә йәшәрлек итеп) яралтҡан, уға яҡшылыҡ һәм яманлыҡ ҡылырға ирекле иткәндең исеме менән әйтәм: йәнен пак тотҡан кеше мораҙына (сәғәҙәткә) ирешер. Выждандын кер ҡаплаған кеше, әлбиттә, хәтәр зыян күрәсәк", - тиелә Ҡөрьән Кәримдең Шәмс (Ҡояш) сүрәһендә.

Бөгөнгө коронавирус пандемияһы мәлендә төп талап булған күп кенә гигиена нормалары һәм ҡағиҙәләрен мотлаҡ күҙәтеү тураһында Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәтендә әйтелә. Ашарға тиклем дә, ашағандан һуң да ҡулдарҙы йыуыу, тәһәрәт алған ваҡытта өс тапҡыр ауыҙ эсен, танауҙы сайҡау, аяҡ табандарын йыуыу, мисүәк менән тештәрҙе йыуыу кеүек ғәҙәттәр балаға кесе йәштән үк һеңеп ҡала һәм кешене ғүмер буйы оҙатып бара. Мосолман уларҙы ҙур теләк менән башҡара, бындай күнекмәләр уны ялҡытмай, сөнки бындай эштәр беҙҙе Аллаһы Тәғәләгә яҡынайта.

Йыш ҡына сабыйҙы тәрбиәләүҙе бишектән үк башларға кәрәк, тип әйтәләр. Әммә ғалимдар әйтеүенсә, баланың рухи һәм физик үҫешенә яралғы барлыҡҡа килгәндән алып тыуғанға ҡәҙәр булған антенаталь (лат. ante - алдан, natus - тыуыу) факторҙар ҙа тәьҫир итә. Яралғыны антенаталь һаҡлау үҙ эсенә дауалау-профилактик һәм социаль-гигиена ҡағиҙәләрен ала, был үҙ сиратында яралғының үҫеше өсөн яҡшы шарттар тыуҙыра. Шуға күрә лә баланың һаулығы тураһында ул тыумаҫ борон уҡ ҡайғырта башларға кәрәк. Бының өсөн табиптар йөклө ҡатын-ҡыҙға һәйбәт итеп туҡланырға, саф һауала йөрөргә, яҡшы итеп йоҡларға кәңәш итә. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары тыйылған (харам) ризыҡты ашамай, шулай итеп улар һаулығын нығыраҡ һаҡлай. Ғәҙәттә, йөклө ҡатындарға дауалау күнекмәләре тәҡдим итәләр. Мосолман ҡатын-ҡыҙы көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡып, шул уҡ физик күнекмәләрҙе яһай. Намаҙ организмдың биоритмдары менән тап килә. Быуындарға, эске ағзаларға ла яҡшы тәьҫир итә һәм яралғының үҫешенә ыңғай йоғонто яһай.

Медицина психологияһында "баланың ҡабул ителмәүе" тигән термин бар. Ҡайһы саҡта ир менән ҡатын ата-әсә булырға әҙер түгелмен, тип иҫәпләп, баланы донъяға килтереү-килтермәү тураһында бәхәс ҡуптара. Оҙаҡ бәхәсләшкәндән һуң ҡатын кеше ауырын ҡалдырырға ҡарар итә, ләкин тәүге фекер - "баланың ҡабул ителмәүе" эҙҙәре баланың холҡонда сағылыш таба, ул тыумыштан ҡыҙыу ҡанлы була. Бындай психик имгәнеү факторҙары мосолман ғаиләләрендә сағыштырмаса һирәк осрай. Сөнки улар Аллаһы Тәғәләнең биргәнен ҡабул итеп, һәр нәмәнән ҡәнәғәт булып йәшәй белә.

Мосолман ғаиләләрендә баланың тыуыуын теләмәгән, йә уның енесе менән ҡәнәғәт булмаған осраҡтар юҡ. Сабыйҙы һәр ата-әсә Аллаһы Тәғәләнең бүләге, тип ҡабул итә. Сөнки изге Ҡөрьәндә лә: "Күктәр һәм ер - Аллаһ милке. Үҙ теләгәнен бар итер. Теләһә - ҡыҙ балалар, теләһә - ир-уландар бүләк итер", - тиелә.

Ислам ауырлы ҡатындарға иҫерткес эсемлектәр һәм тәмәке ҡулланыуҙы тыя. Быны фән дә иҫбат итте: тәмәке төтөнө тәьҫирендә яралғының беренсе 2-3 аҙнаһында ярала башлаған үҙәк нервылар системаһы ҡаҡшай, ә 4-5-се аҙнаһында тәмәке ағыуы формалашып килгән йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына эләгә, яралғының матдәләр алмашыныу процесы боҙола, һөйәк, быуын үҫеше тотҡарлана. Балалар бәләкәй башлы, йөрәк ауырыулы, әҙ ауырлыҡта һәм бәләкәй буйлы булып тыуа.

Ҡарындағы бала 5-5,5 айлыҡ булғанда ишетеү, тәм тойоу, вестибуляр аппараты, тактиль анализаторҙары эшләй башлай. Шуға күрә лә баланы көслө тауыштан, ҡыҙыу факторҙарҙан һаҡларға кәрәк. Бөтә ҡатындар ҙа шуны иҫтәрендә тоторға тейеш.

Сабый донъяға килгәс тә әсәгә мохтаж. Уға беренсе көндәрҙән үк әсә һөтө мөһим. Үкенескә күрә, күп әсәләр балаларын тейешенсә имеҙмәй, йә ике-өс айынан туҡтаталар. Ҡайһы саҡта бала әсә һөтөнән үҙе баш тарта. Сөнки тартҡан әсәләрҙең 1 литр һөтөндә 0.5 мг никотин туплана, шулай уҡ башҡа ағыуҙар ҙа була. Шулай уҡ дин баланың кәрәкле витаминдарҙы ваҡытында алыу мөһимлеген аңлатыу менән бергә күп аҙыҡ ҡулланыуҙың зарарына ла иғтибарҙы йүнәлтә. Беҙ әленән-әле диеталар, организмды таҙартыу ысулдары тураһында яңы системалар уйлап сығарабыҙ. Ә исламда бит мең тапҡырға яҡшыраҡ та, осһоҙораҡ та ысулдар бар. Әгәр ҙә бөтә әсәләр ҙә дин ҡанундарына иғтибар бүлһә, сәләмәт балалар ҙа күберәк булыр ине.

# ТАБИПҠА ЫШАНҒАНДАР ҺАУЫҒА



**Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем дә кем дауалау эшенә тотона һәм ул кешенең дауалау оҫталығы тураһында бер нәмә лә билдәле түгел, ул үҙенә бик ҙур яуаплылыҡ ала".**

Табиплыҡ эше башҡа эшмәкәрлектән ҡырҡа айырыла. Ни өсөн тигәндә, ул ауырыу кеше менән эш итә һәм һау кешенән айырмалы рәүештә, сирле кеше ауырыу һөҙөмтәһендә бер аҙ үҙгәреп тә ҡуя. Шуға күрә табип үҙе белем алған өлкәнең белгесе генә түгел, граждан, йәмәғәт эшмәкәре лә булырға тейеш. Табип даими рәүештә үҙен-үҙе тәрбиәләргә бурыслы. Үҙ-үҙеңде тәрбиәләү - бик ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Ысын табип үҙе шөғөлләнгән эшмәкәрлеге, ауырыу һәм йәмғиәт алдындағы бурысы хаҡына эш итә. Медицина классиктары табипҡа хас ошондай үҙенсәлектәрҙе атай: үҙ өлкәһен бик яҡшы белеү, кешенең сирен тиҙ арала аңлап, кәрәкле саралар күреү, үҙ-үҙен тыныс һәм ышаныслы тота белеү һ.б.

Ауырыу табипҡа ышанырға тейеш. Шунһыҙ һауығыу процесы оҙаҡҡа һуҙылыуы мөмкин. Бер-береһен тулыһынса аңлау, тығыҙ мөнәсәбәттәр, табиптың һәр әйткәнен үтәү - һауығыуға илткән юлдар. Сирләгән кеше шул хаҡта онотмаһын ине: бары тик үҙенең һауығыуына сикһеҙ ышанған кеше генә ауырыуын еңә ала.

Табип өсөн баҫалҡылыҡ - иң кәрәкле холоҡ үҙенсәлеге. Билдәле ғалим, бөтә тормошон медицина өлкәһенә бағышлаған Әбүғалисина, үлер мәле еткәс, былай тип әйтеп ҡалдырған: "Кешеләр үҙҙәренең бер нәмә лә белмәйенсә үлеп китеүен тойоп, теге донъяға күсә". Әйткәндәй, Әбүғалисинаның һаулыҡ һаҡлауға бағышланған күп томлыҡ хеҙмәттәрен бөгөнгө медицина ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнә.

Әлбиттә, оптимизм хисе һәр табипта ла булырға тейеш, әммә үҙ көсөңә уғата ышаныу ҙа килешмәгән хәл. Табип тере кеше менән эш иткәнен бер минутҡа ла онотмаҫҡа тейеш.

Табип өсөн дөрөҫлөк - эшмәкәрлегенең төп шарты. Ҡайһы саҡ уға ауырыу һәм уның туғандары өсөн бик үк күңелле булмаған нәмәләрҙе хәбәр итеү бурыс итеп йөкмәтелә. Бәғзе бер тәжрибәһеҙ һәм үҙенә артыҡ нык ышанған табиптар сирлеләргә дөрөҫөн әйтмәүсән. Дөрөҫөн әйтеү, әлбиттә, һәр ваҡыт ҡыйын, әммә был табип өсөн мөмкин булмаған хәл. Бындай ваҡытта табип, хәҡиҡәтте йәшермәйенсә генә, шулай ҙа ауырыуҙың психикаһын һаҡларға тырышып, диагнозды хәбәр итергә бурыслы.

Табиптың әйткән һәр бер һүҙе оло мәғәнәгә эйә. Ул бер үк ваҡытта сирле кешене мөғжизәле рәүештә һауыҡтыра ла, үлемгә этәрә лә ала

**. "Медицина Пророка" китабынан.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 22-се идея Һәр әйткән һүҙең

Һин кешеләр менән аралаша беләһеңме? Трибунаға күтәрелеп, ҙур аудиторияға мөрәжәғәт итә алаһыңмы, тимәйем. Мин һинең ғәҙәти көндәлек аралашыуыңды күҙ уңында тотам. Әлбиттә, беләһең. Бөтә һөйләгәндәрең тыңлаусыларыңа тәьҫир итә. Ә нисек тәьҫир итә һуң? Шаян булһаң, моғайын, кешеләр көләләрҙер. Әгәр уҫал икәнһең, башҡаларҙа ниндәйҙер ҡурҡыу һәм асыу уятаһыңдыр. Әгәр шәфҡәтле һәм мөләйем булһаң, ихтимал, һинең менән аралашыуҙан кешеләрҙең күңеленә йылы йүгерәлер. Әгәр ғүмер буйы зарланһаң, моғайын, башҡа кешеләргә үҙең тураһында фекерҙәрен нығытырға ярҙам итәһеңдер.

Һәр һүҙең тыңлаусыға тәьҫир итә. Үҙең мөрәжәғәт иткән һәр кеше тураһында һин барыбер ниҙер уйлайһың һәм һинең һүҙҙәреңдең аҙмы-күпме мотлаҡ йоғонтоһо бар. Был фекерҙе киңәйтеберәк әйтәм: һинең әйткәндәреңде ишетеүсе берҙән-бер шәхес бар, был шәхес - һин үҙең! Ҡалғандар һин һөйләгәндәрҙең бер өлөшөн генә ишетә, ләкин һин үҙең һәр һүҙеңде ишетәһең. Тимәк, башҡаларға ниндәй йоғонто яһаһаң да, был үҙеңә яһаған йоғонтоноң бер өлөшө генә буласаҡ. Шул турала уйла: һүҙҙәреңдең көсө һәм уларҙың тормошоңа йоғонтоһо сикһеҙ ҙур.

Әгәр һин уңышҡа өлгәшергә теләһәң, арзан вәғәҙәләр биреү менән мауыҡма. Кире осраҡта, һине тыңлаған кешеләр, иртәме-һуңмы, үҙҙәрен алданған итеп тойһа, һүҙҙәрең үҙеңдә сағыласаҡ. Әгәр үҙеңде насар тойһаң, туҡтауһыҙ зарланып, башҡаларҙы маҙаһыҙлама. Һин мөрәжәғәт иткән һәр кем был ҡайғының саҡ ҡына өлөшөн тоясаҡ, ә һинең тәнең үҙең һөйләгәндәрҙе тулыһынса үҙенә ҡабул итәсәк. Беҙ һүҙҙәребеҙҙең кешеләргә тәьҫир итеүе менән килештек; шуға күрә әгәр теләһәң, ваҡытында әйткән изге һүҙең менән кемдең дә булһа тормошон яҡшырта алаһың. Әгәр ысын күңелдән һөйләһәң, һис шикһеҙ, үҙ тормошоңдо ла яҡшыртасаҡһың, сөнки әйткәнең үҙеңә әйләнеп ҡайта бит. Шулай итеп, тыңлаусыларыңдың тормошонан бигерәк, һин үҙ тормошоңдо формалаштыраһың. Балаларыңа, коллегаларыңа йәки өйөңә килгән ҡунаҡтарға мөрәжәғәт итәһеңме, һәр береһенә йоғонто яһауҙан тыш, һәр әйтелгән һүҙеңдең бер өлөшөн үҙеңә алаһың.

Бында һин хаҡлыҡ күрәһеңме? Һинең ярҙамың, һүҙҙәреңдең ярҙамы, башҡаларға яһаған йоғонтоң менән һин үҙ-үҙеңде үҙгәртәһең. Шуны аңла: һин башҡалар менән ниндәй мөғәмәлә булһаң, һинең менән дә шулай эш итәләр. Һин үҙ тормошоңдо ойоштораһың, үҙ тормошоңа үҙ һүҙҙәреңдең көсө менән тәьҫир итәһең, шуға күрә һәр һүҙеңә ҡолаҡ һалырға онотма.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



### 25 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Млечный путь". [12+]**
**9.15 "Бай". [12+]**
**9.45 "100-летний азан". [12+]**
**10.30 Добрые дела. [0+]**
**10.45 "Гора новостей".**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Т/с "Бирешмә!" [0+]**
**13.45 Спектакль "Мулла". [12+]**
**16.00 "Башҡорт йыры" тәҡдим итә... [12+]**
**18.00 "Бай бакса". [12+]**
**19.00 Х/ф "Долгое-долгое детство". [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Д/ф "Полюс времени". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жених по объявлению". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Шомбай". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 26 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Садовое кольцо". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-7". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**17.15 Министр леса. [12+]**
**17.45 "История башкирского войска". [12+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Д/ф "Сотканный из пламени и чувств". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 "Ретроград". [6+]**
**21.15 История одного села. [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.45 Х/ф "Охота жить". [12+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.30 "Бай бакса". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 27 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Садовое кольцо". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00 "Сәләм. Время героев". [12+]**
**10.00 Д/ф "Свет во тьме". [12+]**
**11.15, 18.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**15.00 Современник. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**15.45 "АйТекә!" [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**17.15 Үткән гүмер. [12+]**
**17.45 "История башкирского войска". [12+]**
**19.00 Д/ф "Как прекрасен этот мир". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Ради добра. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Убийство в дачный сезон". [16+]**
**3.00 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 28 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Журавль в небе". [16+]
22.25 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.25 "Вечерний Ургант". [16+]
0.00 Т/с "Садовое кольцо". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 2.00 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Черная кошка". [12+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15, 23.00 Автограф. [12+]**
**8.45, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00 "Сәләм. Время героев". [12+]**
**10.00 "Автограф". [12+]**
**10.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай бакса". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/ф "Огненный танкист". [12+]**
**17.15 "Нәҙер". [12+]**
**17.45 "История башкирского войска". [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Д/ф "Колыбель искусства-пещера Шульган-Таш". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 "Действующие лица". [12+]**
**21.15 История одного села. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.30 Земляки. [12+]**
**23.45 Х/ф "Доводы рассудка". [12+]**
**2.30 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 29 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50, 2.40 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.25 Давай поженимся! [16+]
16.00, 1.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Лучшее. [0+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Д/ф "История The Cavern Club". [16+]
4.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
17.50 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Дом культуры и смеха. [16+]
23.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
0.10 Х/ф "Спасённая любовь".[12+]
3.20 Т/с "Тайны следствия-8". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00 "Сәләм. Время героев". [12+]**
**10.00, 16.30 Д/с "Курская битва. Время побеждать". [6+]**
**10.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр".[16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 5.00 Башкорттар. [6+]**
**13.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.45 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Замандаш. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "История башкирского войска". [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Земляки. [16+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Башкорттар. [12+]**
**21.15 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ты у меня одна". [16+]**
**2.30 Спектакль "Наследство". [12+]**
**4.15 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

### 30 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф "Александр Абдулов. "С любимыми не расставайтесь". [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Д/ф "Александр Абдулов. Жизнь на большой скорости". [16+]
16.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.15, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Х/ф "Наивный человек". [16+]
1.50 Мужское / Женское. [16+]
3.20 Модный приговор. [6+]
4.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 100ЯНОВ. [12+]
12.35 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
13.40 Х/ф "Любить и верить". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Вкус счастья". [12+]
1.05 Х/ф "Один единственный и навсегда". [12+]
4.25 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Земляки. [12+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00, 5.00 Х/ф "Опасный возраст". [16+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**4.30 Үткән гүмер. [12+]**

### 31 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20, 6.10 Т/с "Любовь по приказу". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Играй, гармонь любимая![12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
13.40 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
14.45 Д/с "Теория заговора". [16+]
15.35 Х/ф "Верные друзья". [0+]
17.30 Премьера. Концерт "Звезды "Русского радио". [12+]
19.25 Лучше всех! [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. [16+]
23.10 Х/ф Премьера. "Хищник". [18+]
0.55 Мужское / Женское. [16+]
2.20 Модный приговор. [6+]
3.05 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

4.30, 3.05 Х/ф "Кружева". [12+]
6.15, 1.30 Х/ф "Тариф "Счастливая семья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 100ЯНОВ. [12+]
12.15 Х/ф "Цвет спелой вишни". [12+]
16.05 Х/ф "Моя чужая жизнь".[12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә.Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 Башкорттар. [6+]**
**15.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 "БГФ: Роман на 80 лет". Юбилейный Гала-концерт БГФ им. Х.Ахметова. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.15 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.30, 4.15 Х/ф "Дежа Вю". [12+]**
**2.15 Спектакль "Кара юрга". [12+]**
**3.30 "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Историческая среда. [12+]**

***✓ Быйыл Башҡортостан мосолмандары йән иҫәбенә иң кәме 100 һум, урта хәллеләр - 200 һум, байҙар - 700 һум фытыр саҙаҡаһы бирә ала. Ураҙа тота алмағандар һәр ҡалдырған көн өсөн 250 һумдан фиҙиә бирергә мөмкин.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШИФАЛЫ ЭСЕМЛЕК - ҠЫМЫҘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**20-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Күҙәй. Геродот. Көлсә. Клуб. Эркет. Толстой. Икмәк. Әйтеш. Вәлиди. Алама. БМВ. Үткәл. Сеул. Убыр. Сәғәт. Етен. Илгә. Өфө. Өйө. Үркәс. Ля. Ту. Нефедов.

**Вертикаль буйынса:** Игнатьев. Камикадзе. Какаду. Герб. Фаҙлан. Тува. Көрәк. Бура. Өҙәңге. Лоссиевский. Лөғәт. Йәтсә. Эйә. Үлсәү. Йорт. Елкә. Таш. Лотос.

*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

# ФЫТЫР САҘАҠАҺЫ

**Фытыр саҙаҡаһының төп мәғәнәһе - ярлы кешеләргә Ураҙа ғәйетен байрам итергә, матур итеп үткәрергә ярҙам итеү.**

Фытыр саҙаҡаһының күләме өйҙәге кеше һанынан иҫәпләп сығарыла. Мәҫәлән, әгәр өйҙә ир менән ҡатын булып, уларҙың өс сабыйы бар икән, ир кеше биш кеше иҫәбенән - сабыйҙары ураҙа тотмаһа ла - фытыр саҙаҡаһы бирергә тейеш. Ниндәйҙер сәбәп менән ураҙа тотмаған кеше лә фытыр саҙаҡаһы бирергә бурыслы. Бүтән кеше өсөн саҙаҡа бирергә уйлағанда был турала шул кешегә мотлаҡ белгертергә һәм уның рөхсәтен алырға кәрәк. Әгәр мөмкинлек юҡ икән, фытыр саҙаҡаһы биреү фарыз түгел һәм уның өсөн ҡайҙандыр бурысҡа аҡса йә ризыҡ алып атҡарырға ярамай.

Фытыр саҙаҡаһы, асылда, ризыҡ менән бирелә. Ҡайҙа ниндәй ризыҡ ҡулланылыш тапҡан һәм фытыр саҙаҡаһы биреүсенең нимә менән бирергә ҡулынан килә, шуны бирә. Бик теләгәндә ит менән дә бирергә була. Әммә тиҙ боҙолоусан һәм һаҡлауы ауыр булған ризыҡтар бирергә кәңәш ителмәй. Шулай уҡ, шәкәр, тоҙ кеүек әйберҙәр ҙә бирелмәй, сөнки улар төп ризыҡ түгел, тәмләткес булараҡ ҡулланыла.

Күп дин белгестәре саҙаҡаны фәҡәт ризыҡ менән бирергә ҡуша. Ҡайһы берҙәре аҡсалата биреүҙе лә рөхсәт итә. Тик аҡсаны ниндәй күләмдә бирергә? Быны һәр кеше үҙе хәл итә. Фытыр саҙаҡаһын арттырып үтәһәң дә була. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡта сәй, бал, һабын ҡушып биреүселәр бар. Был да дөрөҫ. Быйыл Башҡортостан мосолмандары йән иҫәбенә иң кәме 100 һум, урта хәллеләр - 200 һум, байҙар - 700 һум фытыр саҙаҡаһы бирә ала. Ниндәйҙер сәбәп менән ураҙа тота алмағандар һәр ҡалдырған көн өсөн 250 һумдан фиҙиә бирергә мөмкин.

Фытыр саҙаҡаһы башҡа зәкәт малдары иҫәбенә инеп, мохтаж кешеләргә бирелә. Мәсет файҙаһына тип мәсеткә биреү дөрөҫ түгел, сөнки Раббыбыҙ фытыр саҙаҡаһын кешеләр бер-береһен шатландырһын, байрам хасил булһын һәм ураҙабыҙҙа булған кәмселектәр юҡҡа сыҡһын өсөн фарыз иткән. Фытыр саҙаҡаһы фәҡәт мохтаж булған кешеләргә таратылырға тейеш. Саҙаҡаны, артыҡ мохтажлыҡ кисермәһә лә, әммә зәкәт түләй алғандай малы булмаған кешегә лә бирергә була, улай ҙа дөрөҫ.

Фытыр саҙаҡаһы кафырҙарға, шулай уҡ былай ҙа ҡарарға тейешле кешеләргә (мәҫәлән, ир кеше үҙенең ҡатынына, балаларына, ата-әсәһенә фытыр саҙаҡаһы таратмай, сөнки уларҙы былай ҙа ашатып-кейендереп торорға тейеш, был уның бурысы), байҙарға, көслө, хәлле кешеләргә бирелмәй. Фытырҙы мотлаҡ Ураҙа байрамына тиклем биреп өлгөрөргә кәрәк. Байрам намаҙына барғанда тейешле кешенең өйөнә ҡалдырып китһәң, был иң яҡшы, иң матур ваҡыт. Байрам намаҙынан һуң бирелгән саҙаҡа фытыр саҙаҡаһы булып иҫәпләнмәй, ябай саҙаҡа була.

**Илдар хәҙрәт ХӘЙРУЛЛИН.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1441 һижри йыл.***

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (2) дүшәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (3) шишәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 27 (4) шаршамбы | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 28 (5) кесе йома | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:05 | 21:35 | 23:05 |
| 29 (6) йома | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |
| 30 (7) шәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |
| 31 (8) йәкшәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



# ДАНЛЫ ҠАЛА

**Белоретҡа "Хеҙмәт батырлығы һәм даны ҡалаһы" тигән абруйлы халыҡ-ара исем бирелде. Был хаҡта Дәүләт-ара Герой-ҡалалар союзына һылтанма менән Белорет районы хакимиәте башлығы Андрей Иванюта хәбәр итте.**

Ҡалаларға бындай исем халыҡтың Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә күрһәткән хеҙмәт ҡаһарманлығы, Ватан алдындағы ҙур ҡаҙаныштары өсөн бирелә. Был исемде алыу өсөн документтар йыйырға Белорет металлургия комбинатының Ветерандар советы тәҡдим иткән, уларҙы республиканың тау-металлургия профсоюзы, ҡала һәм район Советы, хакимиәте, Белореттың почётлы граждандары һәм ҡала тарихына вайымлылар хуплаған. "Беҙ исем алыу өсөн алты меңгә яҡын ҡултамға йыйҙыҡ, уны 1941-1945 йылдарҙа баҫылған "Белорецкий рабочий" гәзитенең бөтә һандары төпләменән материалдар менән нығыттыҡ, бик күп документтар тупланыҡ. Пандемия ҡыҙған осорҙа Белореттан Мәскәүгә курьер менән ебәрелгән документтар баш ҡалаға барып етмәҫ, ойоштороу комитеты исем биреү буйынса кәңәшмәне күсерер тип ныҡ борсолдоҡ. 9 майға ҡалаға бүләк эшләү теләге ҙур ине - беҙ быға өлгәштек. Был исем - беҙҙең дөйөм еңеү, белореттар!" - тип яҙҙы Андрей Иванюта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ҠАЙЫН ЯПРАҒЫ ЙЫЙҘЫҒЫҘМЫ?



**Был арала "Бәйләнештә" селтәрендәге дуҫтарҙың яҙғандарын да байҡап, кәрәклеләрен гәзит биттәренә лә күсергеләйбеҙ. Күгәрсен районында йәшәгән авторыбыҙ Фирүзә Хәсәйенова-Әбдрәхимова, мәҫәлән, йыш ҡына тәбиғәт ҡосағына сығып әйләнеүе һәм файҙалы үлән-япраҡтар йыйыуы тураһында хәбәр итә.**

"Эһе-һе-һей, ҡайын япрағы йыйҙығыҙмы-у?- тип оран һалды Фирүзә май баштарында. - Әле уның иң йәбешкәк, балауыҙлы мәле. Кемдең форсаты бар, йыйып ҡалығыҙ. Бик мәшәҡәтле эш, әлбиттә. Тик бар түҙемлегеңде туплайһың да, эшкә тотонаһың. Бер ағастан икенсеһенә, өсөнсөһөнә... Апаруҡ ара үтергә тура килә. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тигән девиз менән үҙеңде дәртләндереп ебәрәһең дә әйҙә йыяһың да йыяһың.

Беренсенән, япраҡтарҙы бер ағастан күпләп алырға ярамай. Ағасҡа зыян килеүе бар. Икенсенән, ағастың эргәһендә ҡырмыҫҡа ояһы булмаҫҡа тейеш. Бар икән, ул ағасҡа яҡын да барып булмай. Сөнки һәр япраҡта ҡырмыҫҡа йәбешеп тора. Йәбешкәк кенә япраҡтың файҙалы матдәләрен һурып алырға тырыша улар. Ҡырмыҫҡа бар икән, тимәк, япраҡта кеблә лә (тля) бар. Ҡайын япрағының зыяны юҡ. Мин үҙем уны йөрәккә көс бирһен өсөн ҡулланам. Тағы ла лямблияға ҡаршы файҙалы улар.

Япраҡ йыя алмаһағыҙ, ҡайындың алҡаларын булһа ла йыйығыҙ. Тик ишлеләрен, йәки өсәр-дүртәр теҙелешкәнен. Яңғыҙ эленеп торғандарына теймәгеҙ..."

# ТАҒЫ БЕР КӘҢӘШ

"Ҡайын япрағының шифаһын халыҡ борон-борондан белгән һәм киң ҡулланған. Уны ағас япраҡ ярған мәлдә - май аҙағында, июнь башында йыйырға кәңәш итәләр. Ҡайын япрағы - бик яҡшы антисептик, шулай уҡ ул елһенеүгә ҡаршы тороу, бәүел ҡыуыу, шешенеүҙе бөтөрөү, организмдан шлактарҙы сығарыу һәләтенә эйә. Сама белеп эсқәндә төнәтмәнең кире эҙемтәләре юҡ. Йәш япраҡтан әҙерләнгән төнәтмә эсәктәге ҡорттарҙан (лямблиоз) арынырға ярҙам итә. Бының өсөн 10-15 бөртөк япраҡты эҙерәк һыуҙа сайып, стаканға һалығыҙ һәм өҫтөнә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Өҫтөн ябып, ярты сәғәт самаһы ултыртып тороғоҙ. Ашауҙан ярты сәғәт алда көнөнә өс тапҡыр бер ай дауамында эсергә.

Ҡайын япрағы төнәтмәһе шулай уҡ бөйөр, бауыр сирҙәренән, тире ауырыуҙарынан шифалы, ҡан баҫымын көйләй, кешегә көс, дәрт өҫтәй. Мәлендә йыйып, еләҫ урында дөрөҫ киптерһәгеҙ, йыл буйына рәхәтләнеп ҡуллана алаҫаҡһығыҙ. Бер ҡалаҡ кипкән япраҡҡа бер стакан һыу ҡушып ҡайнатып сығарһығыҙ һәм бер сәғәт йылы урында төнәтегеҙ. Ашар алдынан ярты стакан эсергә тәҡдим ителә. Ыуыҙ ғына шифалы япраҡтар косметологияла ла киң ҡулланыла. Уларҙан иҙмә эшләп, саҡ ҡына крем ҡушып, битегеҙгә маска эшләһәгеҙ йәки япраҡ бешекләнгән һыу менән йыуынһағыҙ, тирегеҙ сафланып, йомшарып китер. Сәләмәт булығыҙ!"

# УҪАҠ ЯПРАҒЫ



**Сәлим Шараповтың был рецебы иһә социаль селтәрҙәрҙә күптән йөрөй. Уны ҡабатлағандан зыян булмаҫ:**

"Ҡайһы ғына төркөмгә инмә, аяҡҡулы һыҙланыуына зарланыусылар күп. Әрмиянан һуң ҡапыл ғына аяҡтарым һыҙлай башланы. Хатта аяғымды һоноп ултыра алмай инем. Әсәйем шулай эшләргә өйрәтте: бер моҡсай уҫаҡ (осина) япрағы йыйып алып ҡайт. Ҡояшҡа һалып ҡуй. Һап-һары булып бешкәс, тәрән таҫҡа һал. Өҫтөнә ҡайнап торған һыу ҡой. Төнәтмәнең эҫелеге аяҡты бешермәҫлек булғас, тубыҡҡа хәтлем аяҡтарыңды тығып ултыр. Һәм мин шулай эшләнем. Ауырыуҙың бармаҡ остарынан сыҡҡаны һиҙелә. Беренсе тапҡырҙа уҡ ауырыу юҡҡа сыҡты. Ә мин профилактика өсөн ике тапҡыр аяҡтарымды уҫаҡ япраҡтары һыуында тоттом. Шунан бирле - күҙ теймәһен!

Шуныһы ла бар: Мәжәүир хәҙрәт тә гел кешеләргә ошо ысулды өйрәткән икән. Ул ауырыу нығ көслө булһа микән, хатта япраҡты 40 уҫаҡтан йыйырға ҡушҡан. Юғиһә, йәйгеһен тапап йөрөйбөҙ дарыуҙы, ҡыш аптекаға йүгерәбеҙ. Аллаһы Тәғәлә башҡортҡа бөтәһен дә йәлләмәй биргән. Шуны әйелеп алырға йыбанабыҙ. Һеҙгә яҙғаным ярҙам итер тигән ышаныста ҡалам..."

# ДЕГӘНӘК ТАМЫРЫ



**Был яҙманың авторы күрһәтелмәгән, бында ла мәленә күрә бик файҙалы кәңәш бирелә: "Дегәнәк үләненең файҙалы булмаған бер өлөшө лә юҡ. Тамырынан яһалған төнәтмәһенең аптекала 200 миллилитры 600 һум торғанын беләм. Ә ул беҙҙең кәртә артында күҙ көйөгә булып үҫеп ултыра. Дегәнәктең сихәтләнеү көсөнә эйә булған япраҡтары киң, яҫы булып үҫә. Элек ҡыҙыуҙа һыу ингәндә башҡа ябынып ята инек, ҡояш эҫеһе башҡа һуҡмаһын, тип.**

Япрағының үҙе лә, һуты ла файҙалы. Японияла уны махсус баҡсаларҙа үҫтереп ҡулланалар, аш итеп бешерәләр, йәш япраҡтарынан салат әҙерләп ашайҙар. Ул япраҡтарҙа бик күп С витамины һәм файҙалы мәтдәләр тупланған. Беҙҙең дегәнәкте кәрәк менән һөрөп атҡанды, ярай, япондар күрмәй! Уның япраҡтарынан һут һығыуҙың бер генә лә ҡыйынлығы юҡ. Йәшел, матур япраҡтарын йыйып ҡайнатаһың да һыуыҡ һыуға ике сәғәткә һалып ҡуяһың. Ваҡытығыҙ булмайынса, берәр сәғәт артып китһә лә, ташламағыҙ, улай ҙа ярай. Һелкенһең дә эшкә тотонаһың. Йә ит турағыстан үткәреп, йә ваҡ итеп турап япраҡ бутҡаһы яһайбыҙ. Кемдә һут һыҡҡыс бар - шунан сығарабыҙ. Күп итеп тултырмайбыҙ. Әҙләп һалып сығарабыҙ. Һут һыуытҡыста 5-6 көн тора ала. Артығын яһамайбыҙ. Кемдер ҡышҡылыҡҡа яһайым тиһә, 50/ 50 спирт менән бутайбыҙ. Кемдә һут һыҡҡыс юҡ, ҡул менән һығабыҙ. Ашар алдынан ике сәғәт ҡала бер ҡалаҡ һутты ярты стакан һыуға һалып эсәбеҙ. Көнөнә ике-өс тапҡыр эсәң дә була. Балаларға бер ҡалаҡ етә. Профилактика өсөн дә, дауалану өсөн дә файҙаһы күп. Көслө сирең булғанда икешәр ҡалаҡ эсәң дә була. Кемдер эсеп ҡарар ҙа ташлар. Тәмле ашарға өйрәнгән организм ҡаршы килә башлар. Әсене эсмә тиер. Бигерәк тә ҡорттар бунт ойоштороп. Ә аҡыл "кәрәк" тейер. Уның файҙаһын эскән көнөндә уҡ һиҙеп булмаҫ. Ә бер-ике аҙнанан бөйөрҙәге таштар ирер, бауырҙан, үт ҡыуығынан тотҡарлыҡ юҡҡа сығыр, ашҡаҙан сәғәт һымаҡ эшләй башлар. Эсәктәрҙә беҙҙе көнө-төнө кимергән паразиттарға, бактерияларға көн бөтөр. Тиҙ генә беҙҙе ташлап һыпыртырҙар. Улар дегәнәк әсеһенә сыҙамай. Организм көс йыя. Сөнки дегәнәк япрағы иммунитетты нығ күтәрә. Уның составында организмдың иммунитеты өсөн яуап бирә торған С витамины хәтәр күп. Йәй буйы эсеп, көҙ төнегеҙҙән, ағзаларығыҙҙан бер сир ҙә тапмаһалар, дегәнәккә барып баш әйергә, рәхмәт әйтергә онотмағыҙ. Хатта ревматизм, артрит кеүек сирҙәрҙең дә сигенеүҙәре билдәле. Япраҡтарын быуландырып, ауыртҡан быуындарға бәйләргә була. Япраҡтарын киптереп, ҡыш көндәрендә лә иммунитетты күтәреү, тәнгә С витамины биреү өсөн дә ҡулланалар. Бына һиңә сүп үләне!

Ә дегәнәктең орлоҡтарынан май яһайҙар. Ул майҙы яраларға, ауыртҡан быуындарға һөртәләр. Тамырының файҙаһы ла нығ ҙур. Кәрәктең файҙаһы бына ошонда тейә инде. Сентябрь-октябрь айҙарында тамырын ҡаҙып алып, тупрағын һелкеп төшөрәһең, һалҡын һыуҙа йыуып, тышын таҙартаһың. Шунан ҡояш төшмәгән, елләп торған ерҙә киптерәһең. Шунан инде бер балғалаҡ ваҡланған тамырҙы бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтәһең. Тәмләп эсәһең. Афарин дегәнәккә!

Әлбиттә, теләһә ҡайһы үләнде дауаланыу өсөн дә, организмдың иммунитетын күтәреү өсөн эскәндә лә организмда ниндәйҙер дәрәжәлә үҙгәрештәр башланырға, сирҙәр ҡуҙғырға мөмкин. Шуның өсөн ундай көслө үләндәрҙе эскәндә ҡорһаҡты тыйып торғанда, ҡамыр, ит ризыҡтарын, файҙаһыҙ колбаса һәм тәмле ризыҡтарҙы кәметкәндә яҡшыраҡ булыр. Әлбиттә, сирегеҙгә күрә яраҡлымы-түгелме икәне тураһында врач менән дә кәңәшләшеп алырға онотмағыҙ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠСА ЙЫЙЫУ...

## ул ярты аҡыллылыҡ билдәһе

Йомарт малын үҙе ашар, һаран малын эт ашар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тыуған илде бөйөк булған өсөн түгел, ә үҙеңдеке булған өсөн һөйәләр.

**(Сенека).**

Бай булырға түгел, аҡыллы булырға тырыш - байлыҡтан яҙырһың, аҡыл һәр саҡ үҙең менән ҡалыр.

**(Эзоп).**

Бай булыр өсөн тырышып аҡса йыйыу - ярты аҡыллылыҡ йәки түбән йәнлелек билдәһе ул.

**(С. Франк).**

Байрам итеү гәҙәте менән бергә кешегә эс бошоу сифаты ла бирелгән.

**(Ж. Лабрюйэр).**

Аҡһөйәктәр йәмғиәтендә кемдәрме? Йөрәкһеҙ ҡыҙ-ҡатындар һәм мейеһеҙ ирҙәр йыйылған унда һәм улар бер-береһенә торорлоҡ.

**(А. Детуш).**

Ҡала - джунгли түгел, ә кешеләр зоопаркы.

**(Десмонд Моррис).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Был хәл Сөләймән бәйғәмбәр заманында була. Бер кеше тирләп-бешеп бәйғәмбәр һарайының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Уның ҡурҡыуҙан ағарынған йөҙөн күреп, бәйғәмбәр: "Ни булды?" - тип һорай. "Мин Ғазраилды күрҙем, - ти кеше. - Ул миңә шул тиклем асыуланып ҡараны". "Ә мин нимә эшләй алам?" - тип һорай унан тағы ла Сөләймән бәйғәмбәр. "Ел менән әрҙәрөп, мине Һиндостанға алып барып төшөр. Шулайтып, мин Ғазраилдан йәнемде ҡотҡарып ҡалайым..." Бәйғәмбәр уның үтенесен үтә: елгә был кешене Һиндостандың үҙәгенә уҡ осороп алып барып ташларға бойора.**

**Икенсе көндө Сөләймән бәйғәмбәр Ғазраилды осрата һәм: "Һин ни өсөн ул кешегә асыуланып ҡараның, ул ҡурҡышынан ғаиләһен һәм илен ҡалдырып, сит тарафтарға ҡасып китте", - ти. "Мин уға асыуланып ҡараманым, - ти Ғазраил. - Алла миңә: "Иртәгә һин Һиндостанға бар һәм ул кешенең йәнен ал!" , - тип бойорҙо. Ә ул кеше бында йөрөп ята. Ул иртәгә нисек итеп Һиндостанға барып етә алыр икән, тип аптырап ҡараным мин уға..."**

**Бына шулай, беҙ йыш ҡына үҙ-үҙебеҙҙән ҡасабыҙ. Алланан да ҡасып ҡотолорға теләйбеҙ. Был бит файҙаһыҙ. Яҙмыштан, Алла ҡушҡандан ҡасып булмай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
22 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 403/05